ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

15 йыл

16-22 сентябрь (һарысай) 2017

№37 (767)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ир уҡытыусыларҙы...**
динозаврҙарға тиңләмәйексе әле



3

**Ат - минең өсөн мал түгел,**
ул дуҫ, ғаилә ағзаһы, коллега



8-9

**"Туғанлыҡ" фестиваленең...**
бәйге түгел, берҙәмлек рухында үтеүе ҡиммәт



11

**Әҙәм балаһының...**
үҙ-үҙен үлтерергә хоҡуғы юҡ!



12-13

**ТВ-программа** 14

*Үҙ туған телен белмәгән, әммә сит телдә һөйләшкән интеллигент - көлкө генә тыуҙыра. Ул үҙ туған мөхитенән ситләшә, ләкин икенсе, үҙе ҡабул иткән телдә һөйләшеүселәр мөхитенә лә тулыһынса инеп китә алмай.*

***М.Э. РАСУЛАДЗЕ.***

БАШҠОРТ ТЕЛЕ - ДӘҮЛӘТ ТЕЛЕ

# УРЫҪ АТАЙЫМ...

## башҡорт әсәйемдең телен яратырға өйрәтте



**Башҡорт теле - минең әсә телем, уны мин бишектән ишетеп, белеп, яратып, һөйләшеп үҫтем. Хәҙерге йәштәр, урыҫ милләтле кеше нисек башҡорт телендә һөйләшеп үҫкән ул, тип аптырар ҙа кеүек. Дөрөҫөн әйткәндә, минең башҡорт әсәйемдең телен дә, урыҫ атайымдың телен дә берҙәй хөрмәт итеп, ике телде лә яҡшы белеп үҫеүем атайымдың ҡаҙанышы. Ул үҙе башҡорттарҙы, башҡорт мәҙәниәтен бик ныҡ хөрмәт иткән кеше булараҡ, әсәйемә: "Балаларҙың теле башҡорт телендә асылһын, рус телен һуңынан да өйрәнерҙәр", - тип, беҙгә әсә телендә һөйләшеү мөмкинлеген биргән. Ҡала балаһы булһам да, өйҙә гел башҡортса һөйләшеп үҫтем, атайым да телде беҙҙең менән бергә өйрәнде. Өләсәйем килһә, ул русса белмәгәс, гел башҡорт телендә аралаша торғайныҡ. Шуға ла башҡорт телен өйрәтеп, башҡорт мәҙәниәте донъяһына ылыҡтырып, уға һөйөү тәрбиәләп үҫтергән атай-әсәйемә бик рәхмәтлемен.**

Бөгөн ҡайһы бер атай-әсәйҙәрҙең башҡорт телен туған тел булараҡ һәм дәүләт теле булараҡ уҡытыу мәсьәләһендә ҡәтғи-лек күрһәтеүенә аптырайым. Башҡорт кешеһе, һис шикһеҙ, балаһын бишектән башҡортса һөйләштереп үҫтерергә һәм мәктәптә лә уҡытырға тейеш. Башҡа милләт вәкилдәренә лә, Башҡортостанда йәшәгәс, республикаға нигеҙ һалыусы милләткә хөрмәт йөҙөнән, аралашыу һәм араларҙы яҡынайтыу маҡсатында икмәк-тоҙлоҡ булһа ла икенсе дәүләт телен шулай уҡ өйрәнеү фарыз. Ә шулай ҙа бөгөнгө хәлдең сәбәбе башҡорт халҡының рухи донъяһын һанламауҙан түгел, ә белем биреү учреждениеларында башҡорт телен уҡытыу методикаһының, дәреслектәрҙең камил булмауынан килеп сыҡҡандыр, тип уйлайым. Мәҫәлән, өлкән улым алтынсы класта уҡығанда өйгә эш итеп инша яҙырға биргәйнеләр, ә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнгән балалар, бигерәк тә ҡала балалары был йәштә әле башҡорт телен инша яҙырлыҡ кимәлдә белмәй бит. Уларға тәүҙә көнкүрештә кәрәк булған ябай ғына һүҙҙәрҙе өйрәтеп башларға кәрәк ине уҡытыуҙы. Башҡорт телен дә инглиз йә француз телдәрен өйрәткән кеүек итеп уҡытһалар, балаға дәрес ҡыҙыҡ булһа, өйгә ҡайтҡас уға дәрес әҙерләүе ҡатмарлыҡтар тыуҙырмаһа, атай-әсәйҙәр ҙә был дәрескә ҡаршы килмәҫ ине, минеңсә. Юғиһә, бер дуҫым һөйләүенсә, балаға өйгә эш итеп туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен белдергән һүҙҙәрҙе башҡортса яҙып килергә биргәндәр. Өйҙә береһе лә белмәгәс, брат, сестра, тетя, дядя һүҙҙәренең тәржемәһен дәреслектән эҙләй башлағандар, әммә үтелгән параграфта был һүҙҙәр бөтөнләй күрһәтелмәгән булып сыҡҡан. Үҙебеҙ менән булған ошо миҫалдарҙан сығып, шундай теләк еткерге килә: башҡорт теле дәреслектәре, эш дәфтәре һәм башҡа кәрәкле материалдар эҙмә-эҙлекле, системалы итеп төҙөлһөн ине. Әлбиттә, өҫтәп тағы ла бер тел белеү насар түгел, быға аҡылы булған атай-әсәй бер ҡасан да ҡаршы булмаясаҡ һәм бик күп урыҫ таныштарым башҡорт телен мәктәптә уҡытыуға ыңғай ҡараштa. Улар бары тик балаларына яҡшылыҡ теләй һәм сифатлы белем алыуын, проблемаһыҙ уҡыуын хәстәрләй. Был мәсьәлә киләсәктә ыңғай хәл ителер, тип өмөтләнәм һәм башҡорт халҡыма ни бары шуны әйтергә теләйем: халыҡтың байлығы алтын-көмөш түгел, уның иң ҙур байлығы - теле, рухи ҡомартҡылары. Үҙ иркегеҙ менән ошо баһалап бөткөһөҙ хазинанан баш тартмағыҙ!

**Вячеслав ГОЛОВ,
"Вечерняя Уфа" гәзитенең
баш мөхәррире.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Беҙ айыға башланыҡ түгелме?

***Ирек ЮДАЕВ, Күгәрсен районы Ялсы ауыл хакимиәте башлығы:*** Байтаҡ йылдар инде беҙ үҙебеҙҙең ауыл хакимиәте биләмәһендә сәләмәт тормош рәүеше өсөн көсөргәнешле эш, ә дөрөҫөрәге, көрәш алып барабыҙ. Уйлап ҡараһаң, айыҡ тормош алып барыу - ул бер ҙә генә мөмкин булмаған эш түгел. Ул фәҡәт халҡыбыҙҙың борондан килгән тәбиғи һәм сәләмәт йәшәү рәүешенә әйләнеп ҡайтыу. Иманым камил: гендарыбыҙ боронғолоҡ йолаларын, сәләмәт тәбиғәтебеҙ һәм ғәҙәттәребеҙ хәтерен һаҡлай, гәрсә милләтебеҙҙең ниндәйҙер өлөшө совет замандарында алкоголь менән ағыуланып өлгөргән булһа ла. Бына ошо ағыу, дөрөҫөн әйткәндә, наркотик матдәләрҙең бер төрө йәштәребеҙҙе, балаларыбыҙҙы, шул иҫәптән әсә ҡарынындағы сабыйҙарыбыҙҙы ағыулап өлгөрмәһен өсөн бөтөн булған мөмкинлектәрҙе ҡулланып күрәшергә бурыслыбыҙ. Беҙҙең ауыл хакимиәте байтаҡтан бирле айыҡлыҡ биләмәһе булараҡ республикала ғына түгел, Рәсәй кимәлендә лә билдәле. Был турала үҙәк баҫмалар ҙа, урындағы гәзиттәр ҙә яҙҙы, телевидение тапшырыуҙары ла булды. Ләкин беҙгә ниндәйҙер дан, билдәлелек кәрәкмәй, ә ысынлап та айыҡ йәшәү рәүеше кәрәк һәм беҙ быға һаман да мохтажбыҙ әле. Ауылдарыбыҙ халҡы айыҡ йәшәү рәүешен үҙе һайланы һәм бынан бер нисә йыл элек үк Башҡортостан Республикаһының 2014 йыл ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы эсемлектәр етештереүҙе һәм уның әйләнешен көйләү" тураһында БР законына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы законға таянып, хакимиәт биләмәһендәге һәр бер ауылда дөйөм йыйылыштар үткәрелде һәм магазиндарҙа араҡы һатыуҙы тыйыу тураһында ҡарар ҡабул ителде. Был ҡарарҙан һуң ауылдарҙа спиртлы эсемлектәр ҡулланыу күҙгә күренеп кәмене, күпселек айыҡ тормош рәүешен үҙ итте. Кеше, айырыуса ир-егет донъяһы, элекке хәстәрлектәренә әйләнеп ҡайтты: ғаиләһенә иғтибарын арттырҙы, хужалығын бөтәйтте, аҡса эшләү йүнен күрҙе. Хакимиәткә килепме, урамда осратыпмы, ҡатын-ҡыҙҙар, хужабикәләр ысын күңелдән рәхмәттәрен белдереп китә ине.

Беҙ айыҡлыҡ өсөн эшмәкәрлегебеҙҙә фәҡәт тыйыу алымын ғына ҡулланманыҡ, әлбиттә. Иман йорттары - мәсеттәребеҙ ҙә халыҡҡа өгөт-нәсихәттәрен еткереп, айыҡлыҡтың өҫтөнлөктәрен дәлилләп кенә тора. Йыл һайын бер ауылда балалар һәм үҫмерҙәр өсөн спорт майҙансыҡтары төҙөп ултыртабыҙ. Әйткәндәй, бында өлкән йәштәгеләр ҙә көн дә килеп шөғөлләнә, һаулыҡтарын нығыта ала. Быйыл 12 июндә, мәҫәлән, шундай майҙансыҡ төҙөлдө, тиҙҙән хоккей майҙансығы ла булған ошондай уҡ спорт ҡоролмаһын Хоҙайбирҙин ауылында ла төҙөргә ниәтләйбеҙ. Бының менән мин хакимиәтебеҙ биләмәһендә, бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамайынса, тулыһынса айыҡ тормош өсөн маҡсатлы һәм планлы эш алып барыла, тип әйтергә теләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Беҙ айыға башланыҡ түгелме?



**(Башы 1-се биттә).**

Ҡаршылыҡтар, тигәнем шуға бәйле: бер генә ауылыбыҙҙың сауҙа нөктәһендә спиртлы эсемлектәр, шул иҫәптән хатта һыра ла һатылмауға ҡарамаҫтан, ошо тыйылған алкоголле эсемлектәрҙе һатыу шөғөлөн асыу буйынса бик ҡыҙыҡһынған ҡайһы берәүҙәр бар әле, үкенескә. Ғаилә ғәрипһеҙ булмай, тиҙәр бит. Ундай әҙәмдәр һаман да шуны аңларға теләмәй: эскелек арҡаһында күпме бәлә-ҡаза, фажиғә булып тора, күҙ йәштәре түгелә. Былтырғы рәсми мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостан эскелек арҡаһында үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар һаны буйынса илдә иң "алдынғыларҙан" иҫәпләнә. Шуның өсөн дә беҙ халыҡ мәнфәғәтендә башлаған эшебеҙҙе ныҡышмалы дауам итәсәкбеҙ һәм хакимиәтебеҙ биләмәһенә ҡараған ауылдарҙың бөтәһендә лә спиртлы эсемектәр һатыуҙы тулыһынса тыйыу тураһында БР законын ҡабул итеү мәсьәләһен юллап, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға мөрәжәғәт иттек. Республикабыҙҙың башҡа райондары ла ошо башланғысҡа берҙәм ҡушылыр, тигән өмөттәбеҙ.

***Урал МӨХӘМӘТШИН, Мәләүез районы Иштуған ауылы мәҙәниәт йорто хеҙмәткәре:*** Ил буйынса, әлбиттә, эскелек осраҡтары кәмей, кеше бөгөн аңлы рәүештә айыҡлыҡҡа ынтыла, тигән хәбәрҙәр ишетелеп ҡуя ул, ысын булһа, был ҡыуаныслы хәл, әйтерең бармы... Тик был йәһәттән һәр айырым төбәктәге хәлдәрҙе аныҡлабыраҡ ҡарарға кәрәктер, тим. Сөнки бөтөн ерҙә лә хәлдәр бер ҙә ал да гөл түгел шул... Һәр хәлдә, беҙҙең Башҡортостанда, мәҫәлән, айыҡлыҡ зонаһы иғлан ителгән бер нисә "утрау"ҙан башҡа әллә ни энтузиазм һиҙмәйем. Үҙем йәшәгән ауылды алып ҡарағанда ла, эсмәгәндәр юҡ, тип әйтеп булмай, үкенескә. Эсмәгәндәренең һаулығы юҡ, юғиһә, ундайҙар ҙа ситтә тороп ҡалмаҫ ине, буғай. Эскәндәре инде, билдәле, берләр артлы "теге донъяға" китеп тора. Проблемаларыбыҙ ни, республикалағы бик күп ауылдарҙағыса инде: йәштәр ауылдан китә, оло йәштәгеләр күбәйә. Шунлыҡтан, ике ҡатлы бына тигән мәктәбебеҙҙе яптылар, балалар хәҙер Һарыш ауылына йөрөп уҡырға мәжбүр. Шуныһы бер аҙ күңелгә йыуаныс: ситкә аҡса эшләргә китеүселәр ялға ҡайтып тора, шөкөр, бына улар араһында эсеүселәр һирәк. Тимәк, тир түгеп эшләнгән аҡсаның ҡәҙерен аңлаған улар, тип уйларға кәрәк.

Әйткәндәй, араҡының хаҡын арттырыу хаҡында һүҙ ҡуҙғата депутаттар. Тик шуны ла аңларға кәрәк: эскән кеше хаҡына ҡарап тормай бит барыбер. Бер тигәс тә, был һаман да әлеге ғаилә мәнфәғәттәренә килтереп һуғасаҡ. Был бер ҙә генә айыҡлыҡ өсөн көрәш түгел, ә былай ҙа фәҡир ғаиләләребеҙ хәлен тағы ла бөлдөрөү генә буласаҡ. Айыҡ тормош булдырыу өсөн башҡа төрләрәк юлдар эҙләү кәрәк. Мәҫәлән, араҡыға альтернатив сара буларак, республикала үҙебеҙҙең милли шифалы эсемлектәрҙән ҡымыҙ менән буҙа кеүек продукцияны күпләп етештереүҙе яйға һалырға ине! Эскелеккә ҡаршы ауыл хакимиәттәре бер ниндәй ҙә эш алып бармаған урындарҙа халыҡты айыҡлыҡҡа әйҙәүсе берҙән-бер тәрбиә сараһы булып, халыҡты туплап, иман юлына күндереүсе мәсеттәр генә тороп ҡалды. Бары ошо йорттарҙа ғына хәрәмде хәләлдән айырырға өйрәтәләр халыҡты. Уларҙың да был йүнәлештә етерлек эшләү-эшләмәүе шул мәсет әһелдәренең белеменә, булдыҡлылығына, ойоштороу һәләтенә бәйләнгән. Ә шулай ҙа айыҡлыҡ өсөн күп көс һалып эшләүсе ауыл мәҙәни усаҡтарын иң беренсе телгә алыу кәрәктер. Төп көс, әлбиттә, беҙҙең иңгә төшә, тиер инем. Был өлкәлә бөтөн башҡарған эштәребеҙҙе һанап тормайым, улар байтаҡ. Әле бына яңы ғына "Шәжәрә байрамы" ойошторҙоҡ. Халыҡта ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы был сара, фәһемле булды. Һәр кем үҙ тамырҙарын барлап, ете быуынынаса ата-бабалары тарихын белде, улар менән ғорурланды, уларға ҡарап, айыҡ аҡыл менән илһөйәр һәм телһөйәрҙәр булып йәшәү мәғәнәһен төшөндө, киләсәк быуынға үҙҙәренең ни ҡалдырыры хаҡында уйланды. Ә бит ҡайһы саҡ кешене айыҡ тормош асылына ҡайтарыу өсөн уның күңеленә уй һалыу ҙа етә.

***Мәрхәбә ИШМӨХӘМӘТОВА, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Гәзиттәрҙәге хәбәрҙәргә ышанһаң, ысынлап та, айыға ла башланыҡ һымаҡ. Яңыраҡ ҡына "Комсомольская правда" гәзитенең 18 август һанында тап ошо хаҡта мәҡәлә уҡыным: рәсәйҙәрҙең яртыһы тип әйтерлек айыҡ йәшәй, тип раҫлай хәбәрсе. Ышанырға ла, ышанмаҫҡа ла, ҡыуанырға ла, ҡыуанмаҫҡа ла белмәнем. Нимәгә нигеҙләнә һуң хәбәрсе? Асыҡланыуынса, Бөтә Рәсәй йәмәғәтселек фекерен өйрәнеү үҙәге мәғлүмәттәренә таяна икән ул. Үҙәк ҡуйған һорауҙарға яуап биреүселәрҙең 40 проценты, ғөмүмән, алкоголле эсемлектәрҙе ауыҙына ла алмауы хаҡында әйтә. Ә бит бынан 8 йыл элек кенә был һан ни бары 25 процент кешене тәшкил итә ине. Донъяла иң күп эсеүсе ил тигән даны сыҡҡан был рәсәйҙәргә, бә-әй, ни булған? Һүҙ ҙә юҡ, бик ҡыуаныслы, әлбиттә, ләкин... Был хәбәргә эксперттар ышанмай бит әле бына. Һорауҙарға яуаптар телефон аша алынған, ти улар. Ә кемдең инде күрәләтә, эсәм шул, тип әйткеһе килһен. Етмәһә, телефон номерын әллә ҡайҙан тапҡандар. Ә шулай ҙа яуап биреүселәрҙең һәр 4-сеһе - айына бер тапҡырҙан да һирәгерәк, ә һәр 6-сы кеше ике-өс тапҡыр "һалғылап" алыуын таныһа, ни бары 1 проценты ғына көн дә "рәхәтләнә" икән. Бына ғәжәп!

Әлеге эксперттар дәлилләүенсә, Рәсәйҙә алкоголле эсемлектәр етештереү йылға булып аға: 2017 йылдың тәүге яртыһында ғына ла араҡы етештереү 30 процентҡа артҡан. Бәс, ә уны кем эсеп тора икән? Ә бына Федераль һәм төбәк алкоголь баҙарын өйрәнеүсе үҙәк етәксеһе Вадим Дробиз башҡасараҡ фекер йөрөтә. "Алкоголь ҡулланыу беҙҙә һуңғы 100 йыл эсендә бер кимәлдәрәк һаҡланып килә: халыҡтың 70-75 проценты эсә,- ти ул. - Көрсөк мәлдәрендә күберәк эсәләр, ул үтеп китһә - араҡы ҡулланыу ҙа кәмей төшә". Ә шулай ҙа беҙ әҙерәк эсә башланыҡ, тип ҡырҡыша абруйлы үҙәк гәзит фекерен тағы ла абруйлыраҡ орган - Роспотребнадзор һандары менән дәлилләп: 2009 йылда илдә йәшәүсе уртаса статистик кешегә 15 литр алкоголь тура килгән булһа, 2017 йылда - ни бары 10 литр. Эксперттар иһә быны яңыраҡ булған демографик көрсөк менән бәйләй: алкоголле эсемлектәрҙе иң әүҙем ҡулланыусы 18-25 йәшлек кешеләр һаны 2 тапҡырға кәмене. Аҙыраҡ эсеүҙең сере бары тик шунда ғына, тип күңелдәге тыуып өлгөрмәгән ҡыуаныс тойғоһон "һүндереп" ҡуя әлеге В. Дробиз. Батабыҙмы былай булғас араҡы һаҙлығына? РФ Ғаиләне, әсәлекте һәм балалыҡты яҡлау буйынса Йәмәғәт палатаһы комиссияһы ағзаһы С. Рыбальченко әйтеүенсә, статистика шулай ти: Рәсәйҙәге үлем осраҡтарының 24 проценты эшкә һәләтле йәштәгеләр өлөшөнә тап килә, шуларҙың 78-79 проценты - ир-егет. Ә инде уларҙың үлеме күп йәһәттән эскелек менән бәйле. Ҡайҙа һуң шунда берәй һалым, бармы ул? Баҡтиһәң, илдә тиҙҙән Атай көнө булдырырға ниәтләйҙәр. Йәмәғәт палатаһы был көндө 11 сентябрҙә билдәләнеп килгән Айыҡлыҡ көнө менән берләштерергә тәҡдим итә. Тик бына был бер генә көн менән нимә хәл итергә булыр икән? Илдә араҡы етештереү эше юғары темптар менән алға барғанда?.. Телевидениенан көнө-төнө араҡы эсеү, эске мәжлестәре йәшерен рекламаланғанда?.. Һәм, ниһайәт, халыҡтың тормош кимәле һаман да бер сама килеш ҡалып, осон осҡа ялғай алмағанда?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Гәзит-журналдарға яҙылыу компанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● **Һәр ваҡыттағыса, уҡыусыны ылыҡтырыр вәғәҙәләребеҙ етерлек.** Берҙән, күп һорауҙарығыҙға яуап бирер, ниндәйҙер ауырлыҡтарға юлыҡҡанда уларҙы еңер сара, борсолоуҙар мәлендә - йән тынныслығы, күңел төшөнкөлөгө булғанда - рухландырыр, сәмләндерер һүҙ әйтер матур йөкмәткеле баҫма аласаҡһығыҙ ҡулдарығыҙға. Бының өсөн һеҙгә почта бүлексәһенә инеп, йә почтальонға мөрәжәғәт итеп, 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - **554 һум 82 тингә**, 50673 индекслыһына (ойошмалар) - **584 һум 82 тингә** яҙылырға ғына ҡала. Ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, I һәм II группа инвалидтары беҙҙең гәзиткә 499 һум 08 тингә генә яҙыла ала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **456 һум 00 тингә** яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға бер данаһы **276 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **276 һум.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Көҙгө сессияла Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы депутаттарын 2018 йылға һәм 2019, 2020 йылдарҙың план осорона бюджет проекты өҫтөндә етди эш көтә. Быйыл тәүге тапҡыр тейешле закон проекты асыҡ тыңлауҙар процедураһын үтә. Төбәк парламенты спикеры Константин Толкачев шишәмбе Дәүләт Йыйылышы Президиумы ултырышында ошо хаҡта һөйләне.

✓Октябрҙә Башҡортостан халҡын өҫтәмә ял көтә. 11 октябрҙә төбәктә Республика көнө билдәләнә. "Башҡортостан Республикаһында байрамдар һәм иҫтәлекле даталар тураһында" законға ярашлы, 11 октябрь (быйыл ул шаршамбы) ял көнө булып тора. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов байрамға әҙерлек һәм уны үткәреү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Ойоштороу комитетын Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев етәкләне.

✓Өфө делегацияһы Мурманскта үткән "Балалар хаҡына - бергә! Ғаилә менән" VIII Бөтә Рәсәй күргәҙмә-форумында лидер дипломына лайыҡ булды. Сарала Өфө ҡалаһы Опека һәм попечителлек идаралығының социаль етемлекте профилактикалау бүлеге начальнигы Ильмир Ғәниев ошо категорияға ҡараған балаларҙың тормошон яҡшыртыу маҡсатында ҡала ресурстарын үҫтереү мәсьәләһе буйынса тәжрибә менән бүлеште.

✓Өфө хакимиәтендә йорттарға ҡасан йылы биреүҙәре хаҡында һөйләнеләр. Бөтә ҡағиҙәләргә ярашлы, әгәр биш көн буйына уртаса тәүлек температураһы 8 градустан артмаһа, өйҙәр йылытыла башлай. Социаль объекттарҙа - балалар баҡсаларында, мәктәптәрҙә, поликлиникаларҙа һәм башҡаларҙа - йылы етәкселәрҙең ғаризаһы буйынса бирелә. Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр йылыны биреү-бирмәүҙе үҙҙәре хәл итә ала.

✓RAEX (РАЭКС-Аналитика) рейтинг агентлығы тикшереүҙәре һөҙөмтәләре буйынса баш ҡаланың 153-сө лицейы менән 93-сө гимназияһы Рәсәйҙең иң яҡшы мәктәптәре исемлегенә инә. Баһалауҙың төп критерийҙарының береһе булып сығарылыш уҡыусыларының абруйлы юғары уҡыу йорттарына бюджет нигеҙендә инеүе һәм уҡыусыларҙың төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа ҡатнашыу йомғаҡтары тора.

КИЛЕШМӘЙЕМ!

# ИР УҠЫТЫУСЫЛАРҘЫ...

## динозаврҙарға тиңләмәйексе әле

**Гәзиттең үткән 36-сы һанында "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһында баҫылған һөйләшеүҙе дауам итәйек әле. Бөгөн "уҡытыусы" һүҙен ишетһәң, күҙ алдында иң элек ҡатын-ҡыҙ образы пәйҙә була. Ә беренсе уҡытыусының ир-ат затынан булыу мөмкинлеге хатта уйға ла килмәй. Ысынлап та, беҙҙең мәктәптәребеҙҙә әле лә эшләп йөрөгән ир уҡытыусыларҙы динозаврҙарға ғына тиңләп булалыр. Мин бына ошо хәл менән бер нисек тә килешмәйем.**



Ҡатын-ҡыҙ затына һис бер һүҙ юҡ: улар үҙ индәренә уҡытыу һәм тәрбиә эше тип аталған шәхес үҫтереү һөнәрен йөкмәгән дә, арымай-талмай эшләй генә бирә. Пенсияға сыҡҡас та ташламай әле ҡатын-ҡыҙ ятраҡан шөғөлөн, һаулығы һәм дәрте етһә, мәктәп менән бәйләнешен өҙмәскә тырыша. Тәү ҡарамаҡҡа, мәктәптәрҙәге хәҙерге "ҡатын-ҡыҙ монополияһы" әллә нинде һорауҙар уятмаһа ла, ошо бер яҡлылыҡты шәхес тәрбиәләү өлкәһе өсөн өлгөлө, тип баһалап булмай. Ә бит бынан бары бер быуатҡа кире ҡайтһаҡ, мәҙрәсәләрҙә, мәктәптәрҙә тик ир-ат ҡына мөғәллимлек иткәне иҫкә төшә. Рәсәйҙә мәктәп эшен яңыса ойоштороу өсөн хирург Пирогов, ғалим-педагог Ушинский кеүек зыялы заттар йәмәғәтселеккә мөрәжәғәт итә, хеҙмәттәр яҙа. Башҡорт ишаны Зәйнулла Рәсүлев һәм уның мөриттәре яңыса уҡытыу өсөн консерватор муллалар менән аяуһыҙ бәрелешкә инә, ә Мифтахетдин Аҡмулла үҙенең мөғәллимлеге менән бер рәттән, шиғриәт аша мәғрифәтселек нурҙарын тарата. Щацкий, Макаренко, Сухомлинский, Амонашвили кеүек күренекле шәхестәр педагогика ғилеме һәм ғәмәлиәтенең яңы офоҡтарын асһа, Шаталов, Волков, Ильин, Хазанкин һәм башҡа байтаҡ уҡытыусы-новаторҙарҙың ижади эш системалары бөтә педагогик йәмәғәтселек тарафынан юғары баһаланды. Үрҙә әйтелгәндәр тап ир-аттың педагогик потенциалы бик юғары булыуын раҫлап тора.

Мин ир-егеттәре булмаған педагогик коллективтарҙы тулы булмаған, йәғни атайһыҙ ғаилә менән сағыштырыуҙы урынлы, тип табам. Ни өсөн? Ғаиләлә атай абруйы тигән төшөнсә бар, һәм ул балалар өсөн бик йөгөнтөлө факторҙарҙың береһе. Иғтибар итһәгеҙ, малайҙар өсөн бәләкәйҙән үк атайға оҡшарға тырышыу, уның һымаҡ һөйләшеү, ул ҡушҡанды теүәл үтәй барыу хас. Психология теле менән әйткәндә, малайҙар өсөн үҙҙәрен идентификациялай (сағыштыра, тиңләй) ала торған шәхес булыу фарыз, ғаиләлә был ролде тап атай кеше үтәй ҙә инде.

Уҡытыусыһы ҡатын-ҡыҙ, нисек кенә яҡшы уҡытмаһын, малайҙар өсөн өлгө була алмай. Ә үҫмерлек осоронда шәхси өлгөнән дә йөгөнтөлөрәк башҡа бер тәрбиә ысулын табыуы ауыр. Йәнә, ир-егеттәргә генә хас булған сифаттарҙы тик ир кеше генә тәрбиәләй аласаҡ, бының өсөн уларҙың тәбиғи мөмкинлектәре бар. Мин, мәҫәлән, ир-егет булараҡ, шәхсән үҙем белгән-өйрәнгән дәрем өсөн уҡытыусым Булат Хужинға рәхмәтлемен. Балта-бысҡы менән тотоноуҙан башлап, электр тогы селтәрен нисек дөрөҫ һәм хәүефһеҙ үткәрә белеүгә тиклем ул беҙҙе ҡулыбыҙҙан тотоп тигәндәй өйрәтә белде. Ә мәктәптә фото түңәрәге менән етәкселек иткәндә беҙ уның һәр бер һүҙен йотлоғоп тыңлар һәм һәр хәрәкәтен отоп алырға тырышыр инек. Беҙҙе мылтыҡтан сәпкә атырға өйрәткән башҡа кеше булманы. Малайҙар араһында уның абруйы ҙур ине: ҡыш беҙҙең менән шайба, яҙҙарын ағас шар һуғыу һымаҡ командалап уйнай торған уйындарҙа ихлас ҡатнашҡанын күп йәштәштәрем онотмағандыр әле.

Хәҙерге заман мәктәптәрендә уҡытыу-тәрбиә эшен гөрләтеп алып барыр өсөн бөтәһе лә етерлек, тип әйтер инек тә, бер әтнәкәһе бар. Эш яҡшы йыһазландырылған кабинеттарҙа йәки компьютерҙарҙа ғына түгел. Минеңсә, мәктәп мөхитендә ир-ат шәхесен бер нәмә менән дә алыштырып булмаясаҡ. Ни өсөн мәктәптәребеҙҙә йылдан-йыл ир-егеттәр аҙая бара һуң? Сәбәбе бер: йәмғиәттә уҡытыусы һөнәренең статусы ныҡ түбәнәйҙе. Бер яҡтан, уҡытыусының эш хаҡы сағыштырмаса түбән булыуы кәртә булһа, башлыса ҡатын-ҡыҙҙар уҡыған мәктәптәрҙә тәрбиә алған быуын уҡытыусылыҡты ҡатын-ҡыҙҙарға хас һәм уларға ғына яраҡлы өлкә рәүешендә ҡабул итә башлай. Һөҙөмтәлә педагогик уҡыу йорттарында бик аҙ ғына ир-егеттәр уҡый, унда уҡып сыҡҡан хәлдә лә, уларҙың мотлаҡ мәктәптә эшләү теләге юғала бара.

Әле әйтелгәндәргә өҫтәп, тағы ла бер фәһем алырлыҡ мәғлүмәтте иҫкә алмайынса булмаҫ. Һуңғы йылдарҙа донъя психологияһында йәмғиәтебеҙҙә "феминизация" (ҡатынлашыу) күренешенең көсәйеүе тураһында фекер алышыу бара. Һүҙ ир-ат шәхесендә тик ҡатын-ҡыҙға хас булған сифаттар барлыҡҡа килеп, ирҙәр холҡона ҡараған саялыҡ, ҡыйыулыҡ, лидерлыҡ кеүек сифаттарҙың юғала барыуы тураһында бара. Ни эшләп шулай булмаһын инде: тыуғандан башлап һуңғы көнөбөҙгә тиклем йәшәйешебеҙ дилбегәһе ҡатын-ҡыҙ ҡулында бит, һәм беҙ, ирҙәр, шуға риза булып, күнегеп бөткәнбеҙ.

Шулай булһа ла, ир-атһыҙ мәктәпте мин ярты етем итеп ҡарайым, сөнки ул - тормошобоҙҙоң бер өлөшө, һәм уның ҡапма-ҡаршылыҡлы бөтәнлөгө һәм тулылығы мәктәптә лә сағылыш тапһын ине. Шуның өсөн йәш ир-егеттәребеҙҙе ата-бабаларыбыҙҙан ҡалған мөғәллимлек юлына баҫырға саҡырам. Оптимист ҡарашлы кеше буларак, дәүләтебеҙ ҡасан да булһа бер иң юғары йәмғиәт ҡиммәттәренең береһе булған педагог эшмәкәрлегенә тейешле матди һәм әхлаҡи баһа бирә башлаясаҡ, тип ышанам.

**Вәли ИҘРИСОВ.**

---

• **Бынан тыш, әлбиттә, оптимистар өсөн бүләктәр ҙә булмай ҡалмаясаҡ.** Оптимистар өсөн, тибеҙ, сөнки гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларҙың "Мин барыбер бүләкһеҙ ҡалмайым!" тигән кешеләрҙән генә килеүен яҡшы беләбеҙ. "Киске Өфө"нө уҡыусыларҙың барыһының да оптимист булыуын теләйбеҙ, уларҙың ошондай сифаттарын уятыуҙы маҡсат итеп ҡуйбыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!

• Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

• **"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

• Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу" һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса (657 һум 42 тин) күсерергә генә ҡала.

• **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓17 сентябргә тиклем Өфөлә Рәсәй Федерацияһы Именлек хеҙмәттәренең 100 йыллығына арналған Беренсе ГТО форумы үтә. Былдай сара Мәскәүҙә 13 тапҡыр уҙғарыла, быйыл, географияны киңәйтеп, уны Башҡортостанда ла ойошторорға ҡарар итәләр. Өфөлә ГТО форумын үткәреү ҡарарын ҡабул итеүҙең төп факторы булып республикала һәм баш ҡалала "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" Бөтә Рәсәй комплексын тормошҡа ашырыу буйынса әүҙем һәм уңышлы эш алып барыу тора.

✓Башҡортостан парламентарийҙары төҙәкләндереү ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штрафты мең һумға тиклем арттырырға ниәтләй. Төбәктең законлар сығарыу йыйылышының пленар ултырышында тейешле башланғыс тәүге уҡыуҙа ҡараласаҡ.

✓2018 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләме (МРОТ) 21,7 процентҡа арта, тине Рәсәйҙең хеҙмәт һәм социаль яҡлау министры Максим Топилин. Дәүләт башлығының ҡушыуына ярашлы, закон проекты хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен ике этапта: 2018 йылдың 1 ғинуарынан йәшәү минимумынан 85 процентҡа ҡәҙәр һәм 2019 йылдың 1 ғинуарынан 100 процентҡа тиклем арттырыуҙы күҙ уңында тота.

✓Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы мәғлүмәттәренә ярашлы, 13 сентябрҙән 18-нә тиклем республиканың Хәйбулла районында ғәҙәттән тыш 5 класлы янғын хәүефе һаҡлана. Рәсәйҙә Янғынға ҡаршы режим ҡағиҙәләренең 218-се пунктына ярашлы, баҫыуҙарҙа кипкән үләнде үртәү, яланда йәки урманда усаҡ яғыу тыйыла. Әлеге талаптарҙы боҙоусыларға административ тәьҫир итеү сараларын ҡулланыу ҡаралған.

✓Австрияның Инсбрук ҡалаһында ҡаяға үрмәләү буйынса донъя беренселеге тамамланды. 50-нән ашыу илдән 1200-гә яҡын спортсы дүрт номинацияла мирҙалдар өсөн көс һынашты. Рәсәй йыйылмаһы составында Башҡортостандың Салауат ҡалаһынан Камилла Ҡушаева бар ине, ул бәләкәй ҡыҙҙар араһында "тиҙлек" дисциплинаһында бронза миҙал яуланы.

✓Республика халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәге сайтында социаль ярҙам сараларына хоҡуҡтар тураһында граждандарға консультация биреү өсөн яңы интерактив сервис эшләй башланы. Сервис булдырыусылар онлайн-консультант Башҡортостан халҡына үҙҙәренең дәүләт социаль ярҙамына хоҡуҡтары тураһында тулыраҡ белергә ярҙам итер тип ышана.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Былтыр туризм өлкәһендә хеҙмәттәр күләме 14 процентҡа артып, 17 миллиард һумдан ашҡан. Туристар ағымы 2 миллион кешегә еткән. Һалым керемдәре күләме 11 процентҡа артҡан һәм 769 миллион һум тәшкил иткән.*

ҠЫҪҠАСА



# ӘЙҘӘ, ИСЕМ ҠУШАЙЫҠ!

✓ Өфө халҡы ҡаланың Совет районындағы яңы скверға исем һайлай. Әле скверҙың уртаһында саҡрым бағанаһы урынлашҡан, ул ҡасандыр ошо урындан Иҫке Себер тракты үтеүе хаҡында иҫкә төшөрөп тора. Бында, революцияға тиклемге Өфөнөң көнсығыш сигендә, Мәскәүҙе Себер менән тоташтырған билдәле "Владимирка" юлы дауам иткән. Сквер Октябрь проспектында 1-се һәм 3-сө биналар араһында урынлашасаҡ. Скверға исем тәҡдим итеү социаль селтәрҙә "Өфөнөң Совет районы" төркөмөндә уҙғарыла.

✓ 17 сентябрҙә Өфөлә Өсөнсө Халыҡ-ара Өфө марафоны үтә. Унда донъяның 15 иленән һәм 180 ҡалаһынан 5000 спортсы ҡатнашыуы көтөлә. Марафон программаһында 4 дистанция ҡаралған: 42,2 км (марафон), 21,1 км (ярым-марафон), 10 км һәм 3 км. Улар барыһы ла Өфөнөң тарихи өлөшө буйынса уҙа. Беренсе Халыҡ-ара Өфө марафоны 2015 йылдың 27 сентябрендә ойошторола. Унда Өфө, Екатеринбург, Ҡаҙан, Ырымбур, Силәбе, Санкт-Петербург ҡалаларынан, шулай уҡ Ҡытайҙан, Украинанан, Белоруссиянан, АҠШ-тан бер нисә мең кеше ҡатнаша.

✓ 14-22 сентябрҙә Өфөлә территорияларҙы санитар таҙартыу һәм төҙөкләндереү буйынса айлыҡ иғлан ителде. Уның сиктәрендә баш ҡаланың барлыҡ райондарында аҙна һайын "санитар йома"лар уҙғарыласаҡ. Коммуналь хеҙмәттәр барлыҡ граждандарҙы, предприятие һәм ойошмалар етәкселәрен гражданлыҡ позицияһы күрһәтеп, айлыҡта ҡатнашырға һәм үҙҙәренә ҡараған территорияларҙы тәртиптә, таҙалыҡта тоторға саҡыра.

✓ 18 сентябрҙә баш ҡалала эш башлаусы эшҡыуарҙар өсөн ҡыҫҡа ваҡытлы белем биреү курстары асыла. Уларҙа шулай уҡ үҙ эшен асырға теләүселәр, уҡыу йорттарының сығарылыш курсы студенттары, эшһеҙ граждандар ҡатнаша ала. Курстарҙа бизнесты ойоштороуҙың нигеҙҙәре һәм тәжрибәләре биреләсәк. kmarks5015@gmail.com электрон почтаһы аша яҙылырға мөмкин. Бәйләнеш өсөн - Насретдинова Лия Фәрит ҡыҙы, тел. 8-927-314-8690. Үткәреү урыны һәм ваҡыты: Киров урамы, 15, аудитория 102. 18 - 30 сентябрь, сәғәт 4-тә.

✓ Ҡала хакимиәтенең Халыҡтың сәлмәтлеген һаҡлау бүлеге дауалау-профилактика учреждениеларының сәләмәтлек үҙәктәре, "Индиго" ирекмәндәр үҙәге менән берлектә акция ойоштора. Уның сиктәрендә теләге булған һәр кем бушлай сәләмәтлек торошон тикшертә ала. Бөгөн шундай ете үҙәк түбәндәге адрестар буйынса эшләй: 2-се поликлиника, Рәсәй урамы, 68, тел: (347) 284-78-12; 46-сы поликлиника, С. Перовская урамы, 38, тел: (347) 289-64-40; 2-се поликлиника, Тыныслыҡ урамы, 39/1, тел: (347) 240-07-33; 47-се поликлиника, Дағстан урамы, 10/2, тел: (347) 280-32-63; 38-се поликлиника, Октябрь урамы, 122/1, тел: (347) 235-36-16.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ ЛӘ ЯҠЛАНАСАҠ!




**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен үҫтереү буйынса саралар тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.**

Документ Рәсәй Федерацияһы Конституцияһының 68-се статьяһына, Башҡортостан Республикаһы Конституцияһының үҙ территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың туған телен һаҡлауға тиң хоҡуҡлылыҡты, Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен ирекле өйрәнеү өсөн шарттар булдырыуҙы, башҡорт телен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен өйрәнеү системаһының мөмкинлеген һәм һөҙөмтәлелеген тәьмин итеүҙе гарантиялаған 54-се статьяһына һәм Башҡортостан Республикаһы Халыҡтары ассамблеяһы менән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының ошо өлкәлә кадрҙар, методик ҡеүәтте үҫтереү һәм шарттарҙы камиллаштырыу буйынса индергән тәҡдимдәрен ҡарау йомғаҡтарына ярашлы ҡабул ителә.

Документта шулай уҡ Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса Фонд ойоштороуҙың маҡсатҡа ярашлылығы билдәләнелә.

БР Хөкүмәтенә 2018 йылдың 1 февраленә тиклем Башҡортостан Республикаһының дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының телдәрен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса "Башҡорт теле", "Рус теле", "Туған телдәр" өҫтәмә программалары булған дәүләт программаһы эшләргә һәм раҫларға, шулай уҡ Указды тормошҡа ашырыуға бәйле финанс сығымдары сығанаҡтарын билдәләргә ҡушыла.

БР Йәмәғәт палатаһына Башҡортостан Республикаһы Халыҡтары менән берлектә тел сәйәсәте өлкәһендә федераль һәм республика ҡануниәтен тормошҡа ашырыу буйынса йәмәғәт мониторингын тормошҡа ашырырға тәҡдим ителә.

# ОЛО ВАҠИҒА КӨТӨЛӘ




**Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов 2020 йылда Башҡортостанда VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу тураһында Указға ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа Рәсәй Федерацияһы Президенты Владимир Путиндың "VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу тураһында" Указын үтәү, шулай уҡ ошо сараға әҙерлекте ойоштороуҙы тәьмин итеү маҡсатында ҡул ҡуйылды. Указ менән Фольклориадаға әҙерлек һәм уны үткәреү буйынса республика ойоштороу комитеты составы раҫланды. Республика хөкүмәтенә 2017 йылдың 1 ноябренә тиклем тейешле саралар планын эшләргә һәм раҫларға ҡушылды. Муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре башлыҡтарына ошондай саралар планын әҙерләргә һәм раҫларға тәҡдим ителде.

Бөтә донъя фольклориадаһы Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының рәсми сараларының бер өлөшө булып тора. Ғәҙәттәгесә, унда 60-80 илдән өс меңгә яҡын артист ҡатнаша. Тәүге Фольклориада 1996 йылда Голландияла, икенсеһе 2000 йылда Японияла уҙғарылды. Өсөнсө тапҡыр Венгрия ерендә ойошторолдо. 2012 йылда Көньяҡ Корейала дүртенсе Бөтә донъя фольклориадаһы ҙур уңыш менән үтте. 2016 йылда иһә Фольклориаданы Мексика ҡабул итте. 2015 йылдың октябрендә Халыҡ-ара фольклор фестивалдәре һәм традицион сәнғәт ойошмалары советының 45-се Бөтә донъя конгресында һәм Генераль ассамблеяһында 2020 йылдағы Фольклориаданың Башҡортостан Республикаһында уҙғарыласағы иғлан ителде.

# ТУРИСТАР КҮБӘЙӘ



**Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәте ултырышын үткәрҙе. Унда туризмды үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде.**

Рөстәм Зәки улы билдәләүенсә, туризм өлкәһендә төп күрһәткестәр буйынса республика Волга буйы федераль округында алдынғылар һәм илдә иң яҡшы унау иҫәбенә инде. Төбәк етәксеһе әйтеүенсә, былтыр туризм өлкәһендә хеҙмәттәр күләме 14 процентҡа артып, 17 миллиард һумдан ашҡан. Туристар ағымы 2 миллион кешегә еткән. Һалым керемдәре күләме 11 процентҡа артҡан һәм 769 миллион һум тәшкил иткән. Шуның менән бергә, республика Башлығы фекеренсә, туризмдың үҫеш темптары юғарыраҡ та булырға мөмкин, сөнки Башҡортостанда йылдың теләһә ниндәй миҙгелендә күңел асыу, спорт туризмының бөтә төрҙәре өсөн дә тиерлек мөмкинлектәр бар.

Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты рәйесе Вячеслав Ғиләжетдинов 2023 йылға тиклем республикала туризмды үҫтереү буйынса дәүләт программаһын тәҡдим итте. Программа сиктәрендә туристик индустрияны кластер принцибына күсереү ҡаралған. "Бөрйән", "Урал легендаһы" Башҡортостандың тау курорттары" һәм "Асылыкүл курорт-паркы" кластерҙарын булдырыу тәжрибәһен башҡа муниципаль берәмектәргә таратыу күҙ уңында тотола.

# ХАЛЫҠ ҮТЕНЕСЕ - ҮҘӘКТӘ



**Баш ҡала райондарында муниципалитет етәксеһе Ирек Ялаловтың яҙғы-йәйге миҙгелдә граждандар менән осрашыуы һөҙөмтәһендә асыҡланған һәм үтәргә ҡушылған бурыстар тормошҡа ашырыла.**

Осрашыуҙар барышында халыҡ йорт эргәһе территорияларын һәм йәмәғәт урындарын төҙөкләндереү буйынса һорауҙарын шәхсән мэрға биреү мөмкинлегенә эйә булғайны. Дим районынан урам комитеты рәйесе Азат Ғайсин, мәҫәлән, Ситке урам сатындағы Үҙәк урам аша йәйәүлеләр үткәүелен төҙөкләндереү мәсьәләһен күтәргәйне. Мөрәжәғәт буйынса эштәр тамамланыу алдында. Юл участкаһы киңәйтелгән һәм рәтләнгән: 800 метр оҙонлоғонда тротуар һалынған, парковка урындары һәм тиҙлек арттырыу һыҙаты булдырылған, светофор ҡуйыу өсөн терәүҙәр әҙерләнгән. Шулай уҡ туҡталыштарҙа яңы павильондар барлыҡҡа килгән, яңы эскәмйәләр ҡуйылған, сүп һауыттары урынлаштырылған. Участканы төҙөкләндереүҙең

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓2017 йылдың 1-30 сентябрендә сираттағы "Вики һәйкәлдәр ярата" халыҡ-ара фотоконкурсы үткәрелә. Еңеүселәргә иң яҡшы фотоһүрәттәр өсөн аҡсалата, шул иҫәптән "заманса һәйкәлдәр" йәки "хәүеф янаған мәҙәни мираҫ" тигән тематик призлар тапшырыла. Конкурста ҡатнашыу өсөн кәрәкле төбәктең һәйкәлдәр исемлеген табып, унда күрһәтелгән теләһә ниндәй объектты фотоға төшөрөү һәм исемлектәге һылтанмалар буйлап һалыу зарур.

✓Ағымдағы йылдың 1 октябренән электрон регистратураның сайты аша табипҡа яҙылыр алдынан пациенттарға Дәүләт хеҙмәттәре порталында теркәлергә кәрәк. Яңы иҫәп яҙмаһы ярҙамында интернет аша табипҡа яҙылырға, шулай уҡ үҙеңдең электрон медицина картаһына рөхсәт алырға мөмкин. Башҡортостан Һаулыҡ һаҡлау министрлығының Бәйләнеш үҙәге телефоны буйынса (09-383), поликлиника регистратураһында, шулай уҡ дәүләт хеҙмәттәре порталы һәм мәғлүмәт киосктары аша яҙылыу дауам итә.

✓Республикабыҙҙа танылған бейеүсе, Рәсәйҙең атҡаҙан артисы һәм Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы, Салауат Юлаев һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялар лауреаты Рәшиҙә Туйсина ҙур юбилейын билдәләй. Юбилей кисәһе 18 сентябрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа.

✓Башҡортостанда көҙгө һалҡындар бер аҙға сигенә һәм "әбейҙәр сыуағы" тип аталған ҡоро, йылы көндәр башлана. Бер нисә көн буйына һауа торошо республика халҡын йылы көндәр менән ҡыуандыра, көндөҙ температура 19-24 градус тәшкил итә. Ләкин, республиканың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығында хәбәр итеүҙәренсә, төньяҡ райондарҙа ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуыуы ихтимал. Киләһе аҙнаның башында һауа температураһы түбәнәйә башлай.

✓Йыл башынан алып Башҡортостанда 15-17 йәшлек алты үҫмергә ВИЧ диагнозы ҡуйылған. ВИЧ менән зарарланыусыларҙың күбеһен 31-40 йәшлектәр тәшкил итә, уларҙың һаны - 925. Артабан 21-30 йәштәгеләр килә - 436 кеше; 41-50 йәшлектәр - 351 кеше; 51-60 йәштәгеләр - 139, 61 йәштән өлкәндәр - 28; 18-20 йәшлектәр - 20, 15 йәшкәсә балалар - 16 кеше. Был аҙнала 57 кешелә ВИЧ раҫланған. 2017 йылда республикала 1921 кешелә ВИЧ асыҡланған.

***✓ Ҡала башлығына мөрәжәғәттәр араһында урамдарға данлыҡлы кешеләрҙең исемдәрен ҡушыу, яңы биҫтәләрҙә дарыухана пункты асыу, веломотокросс трассаларын, йорттарға инеү урындарын төҙөкләндереү кеүек тәҡдимдәр булған.***



йомғаҡлау этабы булып светофорҙар ҡуйыу һәм юлдарға билдәләр һыҙыу торасаҡ.

Ошо уҡ райондан Альмира Греханова "Дим-8" биҫтәһендә төҙөлгән мәктәптең сиктәрен үҙгәртеү мөмкинлеген ҡарауҙы һорай. Ҡала хакимиәтенең ер һәм милек мөнәсәбәттәре идаралығына территорияны сиктәргә бүлеү проекты эшләргә тәҡдим ителгән. Ошоға бәйле бөгөн мәктәп территорияһындағы төҙөкләндереү эштәре төҙөлөш өсөн бирелгән сиктәрҙә генә үткәреләә.

Ҡала башлығына мөрәжәғәттәр араһында урамдарға данлыҡлы кешеләрҙең исемдәрен ҡушыу, яңы биҫтәләрҙә дарыухана пункты асыу, веломотокросс трассаларын, йорттарға инеү урындарын, ихата территорияларын, парковкаларҙы төҙөкләндереү кеүек тәҡдимдәр булған һәм улар үтәлеү өҫтөндә.

## ЯМҒЫР ЭҘЕМТӘЛӘРЕ



**Сентябрь башында үткән ҡойма ямғырҙың ҡала хужалығына килтергән зыяны күләме асыҡлана.**

Мәғлүм булыуынса, 4 сентябрҙә бер нисә сәғәт эсендә ике айлыҡ яуым-төшөм күҙәтелде. Бындай метеорологик күренеште синоптиктар "ныҡ көслө ямғыр" тип баһалаи һәм ул хәүефле тәбиғәт күренеше булып һанала. Үткән аҙна дауамында ҡалала ҡойма ямғыр эҙемтәләрен бөтөрөү буйынса эшмәкәрлек алып барылды: юлдарҙың сите нығытылды, ҡаланың канализация системаларының үҙәк камералары, газондар һәм сәскәлектәр тергеҙелде, ямғыр канализацияһы рәшәткәләрен ремонтлау һәм таҙартыу эштәре башҡарылды, юлдар һәм трамвай юлдары ремонтланды, ҡала сүп-сарҙан таҙартылды, һ.б. Ямғыр ҡала хужалығына 41 млн 593 мең һум күләмендә зыян килтергән. Сығымдарҙың иң ҙур статьяһы - 14 млн 793 мең һум юлдарҙың асфальт-бетон ҡатламын тергеҙеүгә тура килә, трамвай юлдарын ремонтлауға - 12 млн самаһы, тышҡы яҡтылыҡ һәм светофор хужалығы буйынса авария-тергеҙеү эштәрен башҡарыуға - 2 млн 662 мең һумдан ашыу. Әлеге ваҡытта ҡойма ямғыр эҙемтәләре бөтөрөлгән.

## ГАРАЖДАР ҠАМАСАУЛАЙ



**2015 йылдан башлап баш ҡалала ихаталарҙан тимер гараждар алына башлағайны. Ул эш әле лә дауам итә.**

Ошо осорҙа ҡала райондарының коммуналь хеҙмәттәре көсө менән 8873 гараж алынған, уларҙың 3364-е - мағариф учреждениеларынан 25 метр радиуста, ҡалғандары йорт ихаталарында урынлашҡан була. Был милектең ни бары 28 проценты ғына нигеҙле ҡуйылған, шул иҫәптән 11 проценты инвалидтарҙыҡы һәм һуғыш ветерандарыныҡы, ҡалған 72 процент осраҡ - объекттар хужаларының башбаштаҡлығы һөҙөмтәһе. Өҫтәүенә, гараждарҙың 90 проценты урынлаштырылғандан һуң бер тапҡыр ҙа буятылмаған һәм тәртипкә килтерелмәгән, уларҙың барыһын да тут ашаған, конструкцияларға рекламалар йәбештерелеп бөткән, эргә-тирәләре сабылмаған, ә араларына сүп-сар йыйылған. Шулай уҡ ҡалала 50662 берәмеккә берләштергән 575 гараж кооперативы бар. Тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, уларҙа ла тейешле тәртип һаҡланмай һәм төҙөкләндереү эштәре алып барылмай. Әгәр шундай күренештәр дауам иткәндә, суд аша граждандарҙан ер участкалары тартып алынып, гараж кооперативтары бөтөрөлөүе мөмкин.

## ПРЕМИЯҒА КЕМ ДӘҒҮӘСЕ?



**Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы 2017 йылға журналистика өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар буйынса дәғүәселәр билдәле булды.**

Улар: педагогик хеҙмәт ветераны Зөһрә Бәшәрова, "Ветеран Башкортостана" гәзитенең баш мөхәррире Светлана Белландир, философия фәндәре докторы, профессор Октябрь Вәлитов, "Стерлитамакский рабочий" гәзите хәбәрсеһе Марина Воронова, Архангел районы "Инйәр" гәзите редакцияһы хеҙмәткәре Рәғиҙә Ғизәтуллина, "Башҡортостан ҡыҙы" журналы фотохәбәрсеһе Александр Данилов, "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсеһе Ләйлә Ишморатова (Аралбаева), Башҡорт дәүләт университетының журналистика кафедраһы профессоры Фәнил Күзбәков, журналистика ветерандары Әнүәр Сөләймәнов, Эдуард Таһиров, Зөфәр Толомғужин һ. б Комиссия йәмәғәт ойошмаларын, эҙмәт коллективтарын һәм айырым кешеләрҙе 2017 йылға Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияға тәҡдим ителгән эштәрҙе тикшереүҙә ҡатнашырға саҡыра. Уҙ фекерегеҙҙе, тәҡдимегеҙҙе һәм иҫкәрмәләрегеҙҙе матбуғат биттәрендә, телевидение һәм радио программалары йәки түбәндәге адрес буйынса хат аша еткерергә мөмкин: 450076, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, 10-сы ҡат, Башҡортостан Журналистар союзы. Телефон-факс: 276-42-66. Эштәрҙе тикшереү 25 сентябргә тиклем дауам итә.

## ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҠҠА




**Күптән түгел З.Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә тарихсы, журналист, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы лауреаты, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт китап палатаһы директоры Азат Ярмуллиндың рус телендә "У истоков Башкирской республики" исемле китабы донъя күрҙе.**

Китап Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына бағышланған. Унда Башҡортостан дәүләтселеге өсөн көрәшкән, уның нигеҙ ташын һалған билдәле 60 милли хәрәкәт эшмәкәре һәм башҡорт милли ғәскәре сардарҙарының биографияһы тупланған. Бынан тыш, китапта милли хәрәкәттә ҡатнашыусылар исемлеге, фотодокументтар, Башҡортостан автономияһының дәүләт һәм хәрби органдары тураһында белешмә мәғлүмәт бирелгән. Китаптың презентацияһы 6 октябрь көнө Сибай ҡалаһының тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейында буласаҡ, 9 октябрь көнө Өфөлә үтәсәк.

### ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



## ЯҢЫ ВИРУС, ТИҘӘРМЕ?

**Роспотребнадзор Рәсәйҙә Ҡытайҙан һәм уның менән күрше төбәктәрҙән килгән ECHO30 вирусының таралыуы хаҡында хәбәр итә.** РИА Новости белдереүенсә, ведомство инфекцияның таралыуын иҫкәртеүгә тулыһынса әҙер. Ҡайһы бер киң мәғлүмәт саралары мәғлүмәте буйынса, Урал ягындағы биш төбәктә һәм Рәсәйҙең үҙәк өлөшөндә ECHO30 энтеровирусының агрессив төрө табылған да инде. Быйыл көҙ илдә ауырыу тулҡыны көтөлә. Вирус һауа аша еңел йоға һәм бер көн эсендә менингит тыуҙыра, тип билдәләнә. Өҫтәүенә, белгестәр әйтеүенсә, рәсәйҙәрҙең күпселегендә уға ҡаршы иммунитет юҡ. Сир ваҡытында баш ауыртыуы, юғары температура, күңел болғаныуы һәм баш әйләнеүе күҙәтелә. Ауырыуҙың тәүге билдәләре күренеү менән дауаханаға мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## ТИГЕҘЛӘШТЕРЕРГӘ!

**Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Хөкүмәте ағзалары менән кәңәшмәлә 2018 йылдың 1 ғинуарынан хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумынан әлеге 71-72 проценттан 85 процентҡа тиклем арттырырға ҡушты.** "2019 йылдың 1 ғинуарынан да һуңға ҡалмайынса, әгәр Хөкүмәт кәрәкле тип тапһа, иртәрәк тә, хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен йәшәү минимумы менән тигеҙләштерергә. Хөкүмәттең алдағы өс йылға федераль бюджет проекты менән бергә Дәүләт Думаһына тейешле тәҡдимдәр индереүен һорайым", - тине Президент. Владимир Путин принципиаль мәсьәләне хәл итергә - хеҙмәткә түләүҙең минималь күләмен йәшәү минимумынан кәм булмаған күләмгә еткерергә, уны йәшәү минимумы менән тигеҙләштерергә һәм минималь эш хаҡының халыҡтың төп сығымдарын да ҡаплай алмаған хәлдә еңеп сығырға кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

## ЮЛ ЙӨРӨҮ ӨСӨН ТҮЛӘ!

**Башҡортостан менән Удмурт Республикаһы сигендә төҙөлгән Беүә, шулай уҡ Камбарка ҡалаһы янындағы Кама йылғалары аша күперҙәрҙән йөрөү түләүлегә әүерелде.** Ике күпер аша йөрөү еңел автомобиль водителдәренә - 330 һумға, ҙур йөк машиналары өсөн 1740 һумға төшә, тип хәбәр итә РБК-Өфө. "Яңы күперҙәр Татарстан, Башҡортостан, Удмуртия һәм Пермь крайы араһында хәрәкәтте тәьмин итә, шулай уҡ М5 һәм М7 федераль трассаларын бушата, Мәскәү-Өфө-Екатеринбург, Киров-Ижевск-Өфө йүнәлештәре буйынса йөрөү 250 һәм 150 саҡрымға ҡыҫҡара", - тип хәбәр иттеләр баҫмаға Төбәк инвестиция компанияһының матбуғат хеҙмәтендә. Удмурт Республикаһы һәм Инвестиция компанияһы араһында күперҙәр концессия килешеүе буйынса төҙөлгән, бының өсөн 15 миллиард һум аҡса һалынған. Концессия ваҡыты 49 йыл тәшкил итә.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ Июнь айынан көҙгә тиклем алмағастың япрағын өҙөп киптерергә һәм һаҡларға. Алмағастың сорты мөһим түгел. 1 ҡалаҡ япраҡҡа 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ҡапҡасын ябып, 10 минут талғын утта төнәтәбеҙ. Уттан алғас тағы ла 40 минут тотабыҙ. Өлкәндәргә көнөнә ашарҙан 15-20 минут алда яртышар стакан эсергә. Балаларға ярты стакандан әҙерәк күләмдә бирегеҙ. Төнәтмәнең тәме үгәй инә үләненеке кеүек, шунда уҡ һөҙөмтәһен бирә. Йәй көнө ағастан өҙөп алып төнәтмә яһап эсергә була, был осраҡта 6 япраҡҡа 1 стакан һыу ҡояһың.

### Хәтерҙе нығытыу

❖ Ҡан тамырҙарын таҙартыу һәм хәтерҙе нығытыу өсөн дауа: 6 лимон һуты, 1 баш иҙелгән һарымһаҡты ҡушып болғатырға ла, марля салфетка менән ҡаплап, 2 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. 1 балғалаҡ төнәтмәне 1 стакан һыуға болғап, иртән ас ҡарынға эсергә.

### Бронхит

❖ Тигеҙ өлөштә шәкәр, бал һәм лимон һуты алырға. Бер нисә көн төнәткәс, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр балғалаҡты сәйгә ҡушып эсергә.

❖ Һөттө ҡайнатырға, бер аҙ һыуытырға, ярты балғалаҡ сода өҫтәргә һәм төнгөлөккә эсергә.

### Невралгия

❖ Меңъяпраҡ бил һыҙлауын һәм невралгияһынан ярҙам итә. 1 ҡалаҡ үләнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Оҙаҡ та үтмәҫ, ауыртыу баҫылыр.

### Веналар һыҙлауынан

❖ 3 уртаса ҙурлыҡтағы алманы йыуып, эмаль һауытҡа һалырға. 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға, кәстрүлде яҡшы итеп ябырға һәм юрғанға урарға. Иртән ас ҡарынға һәм кисен йоҡлар алдынан 1 ҡалаҡ бал ҡушып 50-шәр мл эсергә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Оло ҡайғы йылы

Хашим ырыуына ҡаршы 616 йылда башланған бойкот өс йылға яҡын дауам итә. Улар үҙҙәре лә, яндарына һыйынған мосолмандар ҙа аслыҡтан бик ныҡ интегә. Тик бойкот күренеше Мәккәләге башҡа нәҫелдәр өсөн дә шатлыҡлы хәл булмай. Ырыу эсендәге был дошманлашыуҙан өс йыл эсендә барыһы ла тамам арый. Шулай уҡ, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең үҙен ғәйепле тип таныуға теләмәүе лә, хашим нәҫеленең үҙ туғаны өсөн ныҡлы тороуы ла бойкот сәйәсәтенең дөрөҫ булмағанлығын күрһәтә. Сөнки, ысынлап та, ситтән яһалған баҫым арҡаһында туғанынан баш тартыу, шуның менән уны язаға тарттырыуға юл ҡуйыу - иң меҫкен, иң ҡурҡаҡ нәҫелгә генә хас нәмә һанала. Хашим нәҫеле иһә - боронғо һәм данлы, көслө һәм ғорур нәҫел була. Бойкот иғлан иткәндә ҡөрәйш ырыуының аҡһаҡалдары быны уйлап еткермәй. Өс йыл үтеүгә Мәккә халҡы бындай аҙым өсөн аҡһаҡалдар менән нәҫел башлыҡтарына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә башлай.

Был хәл менән хашимдарҙың башҡа нәҫелдәргә ҡараған туғандары һәм дуҫтары оҫта файҙалана. Улар ҡалала үҙ сәйәсәтен әүҙемләштерә һәм халыҡ араһындағы ҡәнәғәтһеҙлекте көсәйтә. Хәрәкәттең башында Әбд әл-Мотталибтың ейәне Зөхәйер тора.

Ваҡыты еткәс, ҡөрәйш ырыуының дөйөм йыйылышының береһендә ул бойкотты туҡтатырға кәрәклеге тураһында телмәр тота. Төрлө нәҫел кешеләре уның һүҙҙәрен хуплап сығыш яһай. Бик ентекле уйланып, алдан уҡ әҙерләнгән был сығыштар халыҡтың күпселеген ышандыра. Мосолмандар менән хашим ырыуының дошмандарына күпселектең фекеренә буйһонорға тура килә. Һәм 619 йылдың башында бойкот туҡтатыла. Бойкот шарттары теркәлеп, Ҡәғбәгә эленеп ҡуйылған яҙыуҙы алып тороуҙың кәрәге лә ҡалмаған булып сыға - уның байтаҡ өлөшө бөжәктәр тарафынан ашалып, иғландың иң башында яҙылған: "Алла исеме менән..." - тигән һүҙҙәре генә тороп ҡалыуы бөтәнөһөнөң дә иғтибарын йәлеп итә.

Бойкот тамамланыуына мосолмандар бик нык ҡыуана. Тик, шулай ҙа, ошо 619 йыл Ислам тарихында "Оло ҡайғы йылы" тип атала, сөнки, ысынлап та, күп тә үтмәй, бик күңелһеҙ хәлдәр башлана.

Туҡһан йәшен тултырған Әбу Талиб яҡты донъянан китә. Ғүмеренең һуңғы көндәрен дә, бар ғүмере һымаҡ уҡ, тыныс һәм матур үткәрә - ҡабаланмай ғына эштәрен иплэй, туғандары һәм дуҫтары менән бәхилләшеп сыға. Уның менән хушлашыу өсөн иң абруйлы аҡһаҡалдар менән бергә Әбу Джәхел дә килә. Бер юлы ул сәйәси мәсьәләләрҙе лә хәл итергә була. Мосолмандар үҙ Аллаларына табынһын, доғаларын үҙҙәренсә ҡылһын, тик Мөхәммәт мәжүсиҙәр араһында башҡаса вәғәзләмәһен, ти ул. Мөхәммәт бәйғәмбәр был тәкдимдән баш тарта.

Әбу Талиб үҙе иһә ғүмеренең аҙағына тиклем ата-бабалары диненә тоғро ҡала.

- Ислам динен ҡабул ит, - тип үтенә Мөхәммәт бәйғәмбәр күҙ йәштәре аша. - Был донъянан мәжүси булып китһән, аҙаҡ һуң була бит... Мосолмандарға күрһәткән бөтөн изгелектәренә ҡарамаҫтан, мин һинә бер нисек тә ярҙам итә алмаясаҡмын...

Тик Әбу Талиб ата-бабаларының диненә хыянат итеү тураһында ишетергә лә теләмәй.

Әйтергә кәрәк, ҡайһы бер мәғлүмәттәр буйынса, үлер алдынан ул ниҙер шыбырлай башлай. Уның янында ултырған Ғәббәс иһә Әбу Талибтың Алланы данлау һүҙҙәрен әйтеүен, үҙенең мосолман динен ҡабул итеүен белгертеп доға ҡылыуын ишетә. Бәлки, шулай ҙа булғандыр...

**(Дауамы бар).**

ИШАРА

# ТЫЙЫЛЫУ - ҒӘҘӘТТӘГЕ ОЯЛЫУМЫ?



Яҙҙың бер матур көнөндә мәктәп директоры булып эшләүсе апай беҙҙе, уҡыусыларҙы, мәктәп баҡсаһы янына теҙеп ҡуйҙы ла, шундай хәбәр һалды: "Бөтөн балалар ҙа уҡыу һәм тәртип яғынан бер тигеҙ өлгәшә алмай. Шулай булғас, өлгөлө, тәртипле яҡшы уҡыусылар менән тәртипһеҙ "икеле батшалары" гына мәктәп һәм уҡытыусылар хәтерендә һаҡланып ҡалыусан. Тәүгеләре хәтеребеҙгә - яҡшы иҫтәлек, икенселәре аламалыҡ булып уйыла. Ә бына уртаса өлгәрәүселәр, күҙгә-башҡа күренмәгән шымдар, уҡыуҙа уртаса өлгәшеүселәр, нисек шым йөрөһә, унынсыны тамамлағас, шул килеш онотола. Шуға күрә беҙ уҡытыусылар менән ундайҙар өсөн мәктәпкә хәтирә, иҫтәлек ҡалдырырлыҡ сара уйлап таптыҡ. Хәҙер урмандан ағас үсентеләре тейәгән машина ҡайтасаҡ. Теләгәндәр, ағас ултыртып, мәктәпкә үҙе хаҡында яҡты иҫтәлек ҡалдыра ала. Беҙ һеҙҙе шул ағастарға ҡарап иҫкә алырбыҙ. Мәктәпте тамамлап киткәнсе, ул ағастарҙы тәрбиәләп торорға ла кәрәк буласаҡ. Ағас ултыртыу-ултыртмау һәр кемдең үҙ ихтыярында. Ултыртҡан ағастарығыҙға исем-фамилиягыҙ, класығыҙ яҙылған таҡта беркетергә лә онотмағыҙ..."

Күп тә үтмәне, мәктәп янында ағас үсентеләре тейәгән машина ла күренде. Ул ихатаға морон төртөргә лә өлгөрмәне, беҙ йәш ағастарға ябырылдыҡ. Һырып алдыҡ та, һәр ҡайһыбыҙ үҙебеҙҙе мәктәп хәтеренә "мәңгелеккә" ялғай торған үсенте һәм көрәк эләктереп алып, ҡарҙан яңы ғына әрселеп килгән баҡсаға һөрләгөшөп барып индек.

Хәл көтөлмәгәнсә булды. Баҡтиһән, килтерелгән үсентеләр барыбыҙға ла етмәй булып сыҡты. Шунлыҡтан, уҡыусыларҙың яртыһы баҡсаға инмәйсәрәк моңайып тороп ҡалды. Директор апай был хәлдән сығыу юлын да тиҙ тапты. Йәғни ике кешегә бер ағас ултыртасаҡбыҙ булып сыҡты. Бының өсөн малайҙар - синыфтағы үҙенең яҡын дуҫын, ҡыҙҙар серҙәш әхирәтен һайларға тырышты.

Шулай итеп, директор апай бер юлы ике ҡуяндың тәпәйенән тотто шикелле. Беренсенән, мәктәп баҡсаһының бушыраҡ ятҡан урынына ниҙер булһа ла ултыртыу мәсьәләһен хәл итте һәм, икенсенән, мәктәп уҡыусыларының үҙ-ара мөнәсәбәтен киләсәктә ошо баҡсала гөрләп үҫер урман менән нығытып ҡуйҙы.

Бөгөн килеп, артта ҡалған ғәмһеҙ мәктәп йылдарын иҫкә төшөргәндә, ул саҡта директор апайҙың, "үсентеләргә ябырылыу ажиотажы" менән өҙөлөп, һуңынан онотолоп ҡалған мәктәп баҡсаһына ағас үсентеләре ултыртҡандағы тәүмаҡсаты хәтергә һуғылды. "Күҙгә-башҡа күренмәгән шымдар, уртаса өлгәшеүселәр, нисек йөрөһәләр, шул килеш онотола... ундайҙар өсөн мәктәпкә хәтирә, иҫтәлек ҡалдырырлыҡ сара уйлап таптыҡ..." - тип әйтеүе ҡолаҡ төбөндә яңғыраны.

Ә бит ул саҡта мәктәп ихатаһындағы үсентеләргә барыһы ла ябырылды. Ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Уртасылдар, шымдар менән тәртип боҙоусы "икеле батшалары"ның хәле аңлашыла, ә һәр синыф һайын 5-6 кешене тәшкил иткән алдынғылар нинә башҡаларҙың ағымына ҡушылды икән? Улар үҙенең көсөнә, белеменә, уҡытыусылар биргән баһаға ышанмамы юғиһә?

Бәлки ул саҡта алдынғы уҡыусыларға үҙ-үҙенә ышаныу тойғоһо етмәгәндер, тип уйларға була. Быны мин, мәҫәлән, уртаса уҡыған һәм мәктәп коридорында шым ғына йөрөгән кеше буларaҡ, үҙемдең урынымды белеп, үсентеләргә ныҡлы ышаныс менән ынтылдым һәм яңылышманым шикелле. Һәр дәрестә уҡытыусының һәр һорауына сатнатып яуап биргәндәр ҙә нинә башҡаларға ҡушылды икән һуң? Ошо һорау ҡайта-ҡайта иҫкә төшөп, тынғы бирмәй.

Бәлки, бында үҙендә кемдәндер кәм итеп тойоуға бәйле милли комплекс хаҡында һүҙ алып барырға кәрәктер? Бәлки, тап ошо комплекстан арына алмауыбыҙ бар бәләләребеҙҙең башылыр? Беҙ өйҙә - атай-әсәйҙәребеҙ, мәктәптә уҡытыусыларыбыҙ тыйған ғәмәлдәрҙән, үҫеп еткәс, ихтимаҡи тормошта ла тыйыла алмайбыҙ? Тыйылыу - ғәҙәттәге оялыу, ҡандағы комплексҭыр, күрәһең. Беҙ атай-әсәйҙәребеҙгә яҡшылыҡ эшләйбеҙ, тип тыйылыуҙарҙан ҡотола алмайбыҙ. Ана бит, уҡытыусыларға, мәктәпкә, директор апайға ярар өсөн башҡалар менән бер тигеҙ булырға ла ризабыҙ хатта. Әммә быларҙың һөҙөмтәһе шәп түгел: был комплекстан ғүмер буйына арына алмайбыҙ бит. Әммә һүҙ бында насар ҡылыҡтарҙан тыйылыу хаҡында бармай, әлбиттә.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Автобуста бәҙрәфкә барырға теләүен водителгә әйтергә оялған бер ҡыҙҙың ҡыуығы шартлағансы түҙеүе хаҡында бер күңелһеҙ хәл һөйләгәйнеләр. Оялыу тойғоһо намыҫ, әхлаҡ категорияһына ҡарай, йәғни ул кешенең тәбиғәтенән, булмышынан килә. Тыйылыу иһә күберәген тәрбиәнән, йәмғиәттә аралашыу ҡағиҙәләренән килә торғандыр. Нисек кенә булмаһын, башҡаларҙан айырылып тормаҫ өсөн үҙ асылыңдан, булмышыңдан оялыу кеүек сифаттар беҙҙе биҙәмәйҙер ул. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт?**

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

АТАЙ-ӘСӘЙ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАҢДЫ ТЫЯҺЫҢМЫ?



**Тыйыуҙар төрлө була. Шуға ла балаларығыҙҙы нимәнеләр эшләүҙән тыйғанда түбәндәге кәңәштәргә лә иғтибар итегеҙ.**

**Нимә әйтергә теләгәнегеҙҙе белегеҙ.** Балалар һеҙҙең кинәйәләп әйтеүегеҙҙе аңламаясаҡ. Етмәһә, улар беҙҙең мимикаға, һүҙҙең ниндәй тон менән әйтелешенә күберәк иғтибар итә.

**Тыйыуҙар бер-береһенә ҡаршы килмәһен.** Бер ярамай икенсеһенә ҡаршы килмәскә тейеш. Һеҙ һәр тыйыуҙың үтәлеше өсөн яуаплы. Тыйыуҙар ни тиклем күп һәм улар ни тиклем мәғәнәһеҙерәк, уларҙың тәьсире шул тиклем көсһеҙерәк. Бер ҡасан да: "Ҡысҡырырға ярамай" йәки "Минең әйберҙәремә теймә", тип әйтмәгеҙ. Бындай ҡағиҙәне үтәү мөмкин түгел, ә быны талап итеү - аҡылһыҙлыҡ.

**Аныҡ итеп әйтегеҙ.** Тыйыу балаға аңлашылырға тейеш. Өлкән балаларға тыйыуҙың сәбәбен яҡшылап аңлатырға кәрәк, юғиһә, улар быны үҙ иркен сикләү тип ҡабул итеүе бар. Был бигерәк тә баланың сәләмәтлеге һәм ғүмеренә бәйле тыйыуҙарға ҡағыла.

**Тыйыуҙарҙың үтәлеүен күҙҙән ысҡындырмағыҙ.** Балаға бөтөн нәмәне тыйыу мөмкин түгел. Ҡайһы бер нәмәләрҙе һеҙ контролдә тота ла алмаясаҡһығыҙ. Бер нәмәне тыйғанһығыҙ икән, уның үтәлешен талап итергә кәрәк. Шуға ла тыйыуҙар күп булмаһын, әммә үтәлһен.

**Бер һүҙле булығыҙ.** Атай менән әсәй бер һүҙле булырға тейеш. Атай - бер төрлө, әсәй икенсе төрлө һөйләй икән, бала уларҙың был ҡылыҡтарын нисектер аңларға маташасаҡ. Ҡайһы саҡта ул ике яҡҡа ла ярарға тырышасаҡ, ҡайһы саҡта ике яҡын кешеһе араһынан кемдәрҙе һайларға тура киләсәк, һуңынан ул атай йәки әсәйҙе үҙ файҙаһына "ҡулланырға" өйрәнәсәк. Балағыҙ үҙ-үҙенә ышанып үҫһен тиһәгеҙ, бер һүҙле булығыҙ.

**Балала ғәйеплелек тойғоһо уятмағыҙ.** Бала нимәләрҙер үҫескһә йәки асыуланһа, ул тынысланғандан һуң унда ғәйеплелек тойғоһо уятырға тырышмағыҙ. Үҙегеҙҙе бер нәмә лә булмаған кеүек тотоғоҙ. Әгәр баланың күңеле йомшарып киткән икән, уны йәлләгеҙ. Ғәйеплелек тойғоһо - артыҡ эмоциональ йөк, уны бала үҙ өҫтөнә алырға тейеш түгел.

**Ғәҙел булығыҙ.** Яңы "канун" уйлап сығарыр алдынан уның нимәгә кәрәклеген аңлағыҙ. Һәр тыйыу - бала өсөн бәләкәй генә булһа ла яңы яра.

**Үҙегеҙҙе уның урынына ҡуйып ҡарағыҙ.** Балағыҙҙың ни өсөн теге йәки был ҡылыҡты эшләүен аңларға тырышығыҙ. Бала насар түгел, ул бары насар ҡылыҡ эшләгән генә. Ошо ике төшөнсәне бутамағыҙ, ул, мине яратмайҙар, тигән тойғо менән үҫәсәк. Ул бер нәмәне лә махсус эшләмәй, шуға ла яза биргәндә лә аҡыллы булығыҙ.

✓ *Голландтар әлеге көнгә тиклем башҡорттар ярҙамы өсөн рәхмәтле һәм азат итеүселәр иҫтәлегенә һәйкәлде тап ошо ваҡиғалар урынында - Гелдерланд провинцияһында монументаль композиция булараҡ асырға ниәтләйҙәр.*



БАШҠОРТОСТАН АВТОНОМИЯҺЫНА - 100 ЙЫЛ

# ТӘҮГЕ ТАЛАП...

## туған телдә аралашыуға юл асыу булған

**Тел - кешелектең, барса халыҡтың ҡиммәтле ҡомартҡыһы ла, халыҡ мәҙәниәтенең меңйыллыҡ тәжрибә һандығы ла. Тел тураһында хәстәрлек, уны һаҡлау һәм үҫтереү - был теге йәки был этник төркөмдөң милли үҙаңын билдәләүсе үҙенсәлекле лакмус ҡағыҙы. Әйтелгәндәрҙе дәлилләү өсөн Башҡортостан Республикаһы йәмәғәт берекмәләренең Үҙәк дәүләт архивында һаҡланған бер нисә документ килтерәм.**



1917 йылдың 1 мартында Өфөгә Петроградтағы революцияла еңеү тураһында хәбәр килә. 2 мартта Өфөләге бөтә йәмәғәт ойошмалары вәкилдәренән торған ҡала думаһы ултырышында уларҙың Йәмәғәт ойошмалары комитеты булдырыла. Уға адвокат, Өфө меньшевиктары лидеры И. А. Әхтәмов, губерна дворяндарының күренекле йәмәғәт эшмәкәре А. И. Верниковский етәкселек итә. Унның артынса йәмәғәт ойошмаларының өйәҙ, улыс комитеттары барлыҡҡа килә.

Үҙәк архивта ошо Йәмәғәт ойошмалары губерна комитетының Халыҡ ихтыярының Бәләбәй өйәҙ комитетына мөнәсәбәт документы һаҡланған. Документта шулай тиелә: "Халыҡ ихтыярының Бәләбәй өйәҙ комитетына Бәләбәй өйәҙ биләмәһендәге мосолмандарға үҙ туған телендә аралашырға рөхсәт итеү тураһында мөнәсәбәт. Май, 1917 йыл.

Йәмәғәт ойошмаларының губерна комитеты 30 майҙа Халыҡ ихтыяры комитетының 26 майҙағы 1316 һанлы мөрәжәғәтен тыңлап, шундай ҡарар сығарҙы: Ваҡытлы Хөкүмәт алдында Бәләбәй өйәҙе биләмәһендәге мосолмандарға бөтә учреждениелар менән дөйөм дәүләт мәсьәләләренән башҡа мәсьәләләрҙә туған телдә яҙып аралашырға рөхсәт итергә, тигән ходатайствоны хупларға. Комитет президиумы рәйесе, Президиум сәркәтибе".

Икенсе документ иһә эске эштәр министрының Бәләбәй өйәҙе биләмәһендәге мосолмандарға туған телендә аралашырға рөхсәт биреү тураһында. Май, 1917 йыл.

"Эске эштәр министры әфәндегә (ул осорҙа был вазифаны кенәз Львов биләгән). 2 май 1917 йыл. N1239.

Бәләбәй өйәҙендә мосолмандар 67 процент тәшкил итә, улар рус телен белмәгәнлектән, төрлө үтенес, ғаризалар яҙыу өсөн рус телен белеүселәргә мөрәжәғәт итергә мәжбүр. Һуңғылары үҙҙәре белеп еткермәүҙәнме, әллә насар ниәт менәнме, мосолмандарҙың ышанысы менән файҙалана. Шул арҡала төрлө аңлашылмаусанлыҡтар, ҡайһы берҙә рустарға ҡарата дошманлыҡ хисе лә уяна.

Ошоға бәйле, 1917 йылдың 27 апреленән 2 майына тиклем Бәләбәй ҡалаһында үткән улыс комитеттары вәкилдәре съезы ҡарар сығарҙы: Бәләбәй өйәҙе биләмәһендә мосолмандарға бөтә учреждениелар менән дә туған телдә яҙып аралашырға рөхсәт бирергә, бындай рөхсәт тураһында Ваҡытлы Хөкүмәткә ходатайство еткерергә.

Был ҡарарҙы тыңлағас, губерна комитеты мосолмандарға дөйөм дәүләт мәсьәләләре буйынса түгел, милли мәсьәләләрҙә бөтә учреждениелар менән дә туған телдә яҙып аралашыу рөхсәте тураһында ҡарар сығарҙы.

Был хаҡта, Министр әфәнде, Һеҙгә йәмәғәт ойошмалары мөрәжәғәт итә һәм губерна комитеты киләсәктә комитетҡа ла хәбәр итеүегеҙҙе һорай. Съезд протоколының бер данаһы ҡушып һалына. Президиум рәйесе. Президиум секретары өсөн".

Шулай итеп, провинция йәмәғәтселеге яңы хөкүмәттең программа тексын алғандан һуң уҡ туған телдә һөйләү хоҡуғы хаҡында белдерә. Ә ул программала түбәндәгеләр вәғәҙә ителә: сәйәси хөкөм ителгәндәр, хатта террорсылар һәм ҡораллы хәрәкәттә ҡатнашыусыларға амнистия иғлан итеү, һүҙ һәм матбуғат, партия берекмәләре, йыйылыштар һәм забастовкалар азатлығы, бөтә ҡатлам, милли һәм дини сикләүҙәрҙе юҡ итеү, етәкселек итеү формаһын билдәләү өсөн әҙерләнгән ойошма йыйылышын кисекмәҫтән йыйыу, милли, ауыл хужалығы һәм башҡа демократик революция мәсьәләләре. Бөтә ошо мәсьәләләрҙең ғәмәлгә ашырылыуы алдынан аҫаба халыҡ үҙ туған телендә һөйләшергә ынтылышын белдерә.

Ошолар хаҡында һөйләй 100 йыл элекке документтар.

**Рәмзиә БИКӘНӘСОВА.**

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТ ЯУГИРҘАРЫНА ҺӘЙКӘЛ

**Нидерландтарҙа 1813-1814 йылдарҙа илде Наполеон армияһынан азат иткән башҡорт яугирҙарына һәйкәл ҡуйыла.**

Ҙур әһәмиәткә эйә скульптураны Нидерландтарҙы Наполеон баҫҡынсыларынан азат итеүҙең 200 йыллыҡ юбилей саралары барышында 11 сентябрҙә асыу ҡаралғайны. Ләкин датаны сентябрҙән 2018 йылдың ғинуарына күсерергә тура килгән, сөнки Рәсәй яғынан аҡса күсмәгән, тип хәбәр итә "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһы.

200 йыл самаһы элек генерал Бенкендорф етәкселегендә башҡорттар Наполеон илбаҫарҙарын ҡыуыу өсөн Амстердамға юллана. Голландтар әлеге көнгә тиклем ошо ярҙам өсөн рәхмәтле һәм азат итеүселәр иҫтәлегенә һәйкәлде тап ошо ваҡиғалар урынында - Гелдерланд провинцияһында Эйссел йылғаһы буйында монументаль композиция булараҡ асырға ниәтләйҙәр. Мемориалда граф Бенкендорф һәм башҡорт һыбайлыһы төшөрөлгән. Скульптура өҫтөндә Германияла Чехов, Югославияла Пушкин, Черногорияла Высоцкий, Нидерландтарҙа бөйөк княгиня Анна Павловна һәйкәлдәре, Швейцарияла Суворов бюсы һәм башҡа бик күп проекттар авторы, Рәсәйҙең атҡаҙанған рәссамы Александр Таратынов эшләй.



*Һәйкәл эшләнеү өҫтөндә.*

Әйткәндәй, 30 сентябрҙә Ғафури районының Красноусол ауылында "Төньяҡ амурҙары"на арналған скульптура комплексын асыу тантанаһы була. Комплекс асылғандан һуң бында уҡ атыусылар фестивале ойошторолаҫаҡ.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Бөрйәндәр

Р. Кузеев "Башҡорт халҡының килеп сығышы" тигән хеҙмәтендә нигеҙһеҙ рәүештә башҡорт халҡының территорияһын, ҡәбиләләрен Арал, Һырдаръя һәм Урта Азияға ғына бәйләй. Ул башҡорттарҙың төньяҡтағы Шырҙан ханлығы булыуын күҙ алдына ла килтерә алмай. Шул уҡ ваҡытта Морат Рәмзи шулай яҙа: "Бөрйән - ул Хазарҙар иле...". Ә. Вәлиди Ибн Фаҙланға һылтанып, Хорезмдан алыҫ түгел Манғышлаҡ ярымутрауында бөрйән ырыуына ҡараған бер нисә төрки ҡәбилә йәшәй тип яҙа.

Бөрйәндәрҙең төп йәшәү урыны көньяҡ Уралда, Ағиҙел йылғаһының юғары ағымында, Яйыҡ йылғаһына тиклем Урал аръяғы территорияһында, көньяҡта Туҡ, Оло һәм Кесе Уран, Ырғыҙ, Кәрәлек һәм Кәмәлек йылғалары (хәҙерге Ырымбур, Һамар һәм Һарытау өлкәләре) буйында. XVI-XVII быуаттарҙа бөрйәндәр Башҡорт иленең көнбайышында, Каманың көньяҡ ҡушылдығы Ыҡ йылғаһы буйын биләгән.

Хәҙерге заманда Баймаҡ ҡалаһы бөрйән ырыуы башҡорттарының рәсми булмаған баш ҡалаһы һанала. Ҡасандыр ҙур майҙанды биләгән күп һанлы ҡеүәтле халыҡтың варисҡтары булған бөрйән ырыуы вәкилдәре бөгөн шул халыҡтың вәкәләтлеген үтәп йәшәй. Улар бөрйән башҡорттары тип атала, ә уларҙың ҡалған ҙур өлөшө башҡа халыҡтарҙың составына инеп, эҙҙәре юғалған.

Бөрйәндәр составында 260 атама теркәлгән, шуларҙың 75-е - ырыу аралары атамалары.

### Ҡырғыҙҙар

Тарихсылар, шул иҫәптән Бахши Иман башҡорттарҙы ҡырғыҙ тип атай. Сығатай ҡыпсаҡтарын да ҡырғыҙ тип атағандар. Болғарҙар ҡыпсаҡтарҙың барыһын да ҡырғыҙ тип йөрөткән. Беҙҙең көнгә тиклем килеп еткән шәжәрәгә ярашлы, ҡырғыҙ ырыуы башлығы Ҡорҡот ата булған... Унның улы Әхмәт бей, шунан - Мөхәммәт бей, шунан - Янба бей, шунан -Ҡушыҡ бей. Ҡушыҡ бей Ағиҙел йылғаһы буйындағы Татыш күле янындағы Иҫке Ҡырғыҙ ауылында көн итеп, Аҡ батшаға баш эйгән...

Был шәжәрә Өфө губернаһының Бөгөлмә өйәҙендәге Ташлы ауылы (хәҙерге Татарстандың Баулы районы) башҡорттарында, шулай уҡ Иҫке Күктау ауылы кешеһе Ф.С. Мәрүәровта табылған. Унда Әхмәт бей Ҡандырға Алтын Урҙа хандары грамота биреүе тураһында әйтелә.

Башҡортостан Республикаһында "ҡырғыҙ" атамаһы менән йөрөгән урындар бик күп. Мәҫәлән, Ҡырғыҙ йылғаһы, Ҡырғыҙ ауылы, Ҡырғыҙ-Миәкә район үҙәге, шулай уҡ меңлеләр, әйлеләр, табын һәм кесе табын ырыуҙарында "ҡырғыҙ" аралары бар. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары Сөн йылғаһы буйында ғына элек Ҡырғыҙ улысына - хәҙер Илеш районына ҡараған Иҫке Ҡырғыҙ, Яңы Ҡырғыҙ (Юлдаш) һ.б. ауылдарға нигеҙ һалған.

Ҡырғыҙҙар - төрки ҡәбиләгә ҡараған башҡорттар. Уларҙың ата-бабалары - Енисей ҡырғыҙҙары Енисейҙан Һырдаръяға күсеп, уғыҙҙарҙың конфедерацияһына ингән. XII-XIII быуаттарҙа улар ҡыпсаҡтар менән бергә көньяҡ Уралға килеп, башҡорт халҡын формалаштырыуҙа ҡатнаша.

Ҡырғыҙҙарҙың эре ырыу берләшмәләре: Таныҡ һәм Ҡаҙыҡ бейҙең ата-бабалары - тәнкәй ҡырғыҙ, ҡыҙыҡай ҡырғыҙ.

Күп кенә башҡорт ҡәбиләләрендә "ҡырғыҙ" араһы бар: нуғай бөрйәндәрендә, тамъяндарҙа, әйлеләрҙең төрөкмән ырыуында, шайтан-көҙөй ырыуында, кесе табындарҙа, ҡыуаҡандарҙың түбәләс ырыуында, меңләләрҙең ҡонҡас, ҡыбау, ҡырҡ уйыларында һ.б.

**(Дауамы бар).**

***✓ Баштан уҡ асыҡлап китәйек: ат минең өсөн мал түгел. Мин уны кәрәк ваҡытта тотоноп, кәрәкмәгән саҡта ҡырға ҡыуып ҡына ебәрә торған итеп ҡабул итмәйем. Мин уның менән бергә эшләйем. Унһыҙ минең эшем һан түгел.***

# АТ - МИНЕҢ ӨСӨН ул дуҫ,

**Төрки халыҡтарҙың барыһында ла тигәндәй ат культы бар. Был хайуан образ кимәленә күтәрелеп, уларҙың ауыҙ-тел ижадын, риүәйәттәрен, мифологик ҡомартҡыларын, тарихтарын биҙәп килә. Йылҡының тәү килеп сығышын һәр халыҡ үҙенсә дәлилләй. Мәҫәлән, беҙҙең тәүге йылҡылар Йылҡысыҡҡан күленән күтәрелә. Уларҙы ҡанатлы толпар Аҡбуҙат эйәртеп алып сыға. Төркмәндәрҙә тәүге ат шулай уҡ ҡанатлы була һәм ул диңгеҙҙән сыға. Ғәрәптәрҙә тәүге атты Аллаһы Тәғәлә донъяға ярата ла: "Һинең менән был донъяла бер хайуан да сағыша алмаясаҡ, сөнки был ерҙең бар байлыҡтары һинең ике күҙ араңда ятасаҡ. Ҡайҙа ла бәхетле булырһың, ҡайҙа ла һине яратырҙар, сөнки һиндә был донъя хужаһының һөйөүе ята", - тип әйтә, имеш.**
**Ҡасандыр ир-егеттең, ир-егеттең генә түгел, һәр башҡорттоң ғаилә ағзаһылай булған йылҡы малы бер арауыҡ йылдар артыҡ ныҡ кәметелеп, хатта күҙ алдынан юғалып торғандай булды. Ярай әле, бәхеткә күрә, һуңғы йылдарҙа халҡыбыҙҙың үҙ асылына йөҙ бороуы уңайынанмы, ауылдарҙа йылҡы һаны артты. Бөгөн инде фермерлыҡ әүҙемләшеп, өйөр-өйөр йылҡы үрсеткән, тиҫтәләп мал тотоп, ҡымыҙ менән сауҙа иткәндәр пәйҙә булды. Эйе, беҙ әле был малды ҡабаттан өйрәнеп, уға ҡабаттан яҡынайырға, ышанысын яуларға тырышып ятабыҙ. Тик һаман да уға бары тик мал итеп кенә ҡарайбыҙ. Ә бит, асылда, ат башҡорт өсөн мал ғына булмаған. Ат менән кеше араһындағы бәйләнеш күпкә тәрәнерәк, көслөрәк һәм мөғжизәлерәк булған. Һәм тап бына ошо ҡыҙыҡлы һорауҙарға яуап табыу өсөн беҙ һөйләшеүгә Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, тәүге башҡорт циркындағы джигитовкаға нигеҙ һалыусы**
**Миҙхәт Сәйфулла улы СОЛТАНГӘРӘЕВты саҡырҙыҡ.**



***МИҘХӘТ СОЛТАНГӘРӘЕВ:***

*Беҙҙең башҡорт тоҡомло аттар өйрәтеүгә барымһыҙ. Мин уларҙы өйрәтеп ҡараным, джигитовкаға ла ҡулландым. Әммә улар бик ғорур, сәмсел, текә холоҡлолар. Һығылмалыҡ тигән нәмә бөтөнләй юҡ уларҙа. Тарлыҡты, биклелекте, манеж эсендә хәрәкәт итеүҙе үҙһенмәйҙәр. Һыртына ҡамсы эләктеме, бөтөн биктәрҙе емереп сығып китергә ынтыла башлайҙар.*

**▸ Миҙхәт ағай, цирк беҙҙең өсөн бөтөнләй ят өлкә, шунлыҡтан, һеҙҙең унда нисек барып юлығыуығыҙ ҡыҙыҡһындыра. Икенсенән, һеҙҙең ғаилә оҙаҡ йылдар циркта эшләгән берҙән-бер башҡорт ғаиләһе. Нисек башланды был тарих, унда барып атҡа бәйләнеүегеҙгә нимәләр сәбәпсе булды?**

- Мин Йылайыр районының Яманһаҙ ауылында тыуып үҫтем. Ауыл балаһы булараҡ, ат минең өсөн ғәҙәти күренеш булды. Тиҫтерҙәр менән бергә ҡолон һайлап, йүгән тота белеп, ат менән мөғәмәләне аңлап үҫтек.

Дүртенсе класҡа Өфө ҡалаһының 1-се республика мәктәп-интернатына уҡырға алып килделәр. Мәктәпте тамамлағас, армияға киттем. Армиянан ҡайтып төшһәм, Өфө цирк бинаһында башҡорт студияһы асылған һәм унда аттар менән эшләүсе егеттәрҙе йыялар, тип ишеттем дә, шунда киттем. Мәктәптә уҡыған саҡта Дамир Сафиуллин тигән иптәшем һәм мин спорт гимнастикаһы менән шөғөлләнә инек, ул да шунда икән. Мине ат өҫтөндә йөрөтөп, тикшереп ҡаранылар ҙа, ҡабул иттеләр. Шулай итеп, циркта тороп ҡалдым һәм 33 йыл ат өҫтөндә классик джигитовка күнекмәләре башҡарҙым. Был тамаша менән Советтар Союзы буйлап, унан Рәсәй төбәктәрендә, сит илдәрҙә сығыштар яһаныҡ, бар ерҙә лә яратып ҡабул иттеләр, сөнки бер тамашасы ла аттар менән сығыштарҙы битараф ҡына ултырып ҡарай алмай.

Ҡатыным Римма циркта акробат ине башта. Өс ҡыҙҙың "Бал ҡорттары" тигән билдәле номеры ла бар ине. Яйлап улар был номерҙы ат өҫтөнә күсерҙе һәм джигитовканы тулыландырып, төрлөләндереп ебәрҙеләр. Өс атты йәнәш саптырып, шулар өҫтөндә өс ҡыҙ пирамидалар яһай ине - хәтерләүселәр барҙыр әле.

Унан улыбыҙ Илдар үҫеп етте. Ул бала саҡтан беҙгә эйәреп йөрөп, ат өҫтөндә буй еткерҙе. Ун дүрт йәшенән минең менән йәнәш ҡатмарлы трюктар яһаны. Ул арала әсәһе лә тик джигитовкаға күсте. 1987 йылдан беҙ шулай өсәүләшеп сығыш яһай башланыҡ.

**▸ Һеҙ атты эшкә еккән йәки мал итеп кенә тотонған кеше түгел бит инде, һеҙ уның менән бергә эшләйһегеҙ, бергә сәйәхәт итәһегеҙ, уны өйрәтәһегеҙ, аралашаһығыҙ, һөйләшәһегеҙ, шулай бит? Нимә ул һеҙҙең өсөн ат?**

- Баштан уҡ асыҡлап китәйек: ат минең өсөн мал түгел. Мин уны кәрәк ваҡытта тотоноп, кәрәкмәгән саҡта ҡырға ҡыуып ҡына ебәрә торған итеп ҡабул итмәйем. Мин уның менән бергә эшләйем. Унһыҙ минең эшем һан түгел. Бар тамашабыҙҙың ярты өлөшөн ат башҡара. Тимәк, ул да минең кеүек үк эшләй, ижад итә. Ул минең тулы хоҡуҡлы коллегам. Уның да кәйефе, сәләмәтлеге йәки башҡа сифаттары, холоҡ-ҡылығы үҙгәреп китергә мөмкин. Джигитовка - ул спорт түгел, ул - сәнғәт. Бында атты сыбыртҡылап, саптыртып ҡына булмай. Йәки күнекмәләребеҙ тик сабыуҙан ғына тормай. Ат һинең уның өҫтөндә башҡарғандарынды ҡабул итергә, һиңә булышлыҡ итергә тейеш. Ә уның өсөн ат менән кеше араһында бәйләнеш барлыҡҡа килергә һәм ул бәйләнеш ышаныслы, ныҡлы булырға тейеш. Мәҫәлән, ҡатмарлы трюктар яһар алдынан атымдың мине алып атмаҫына йәки ҡапыл ҡарышып китмәҫенә тулыһынса ышанырға тейешмен. Арҡаһына атланған кешеһен үҙ итеп ҡабул иткән ат, ҡайһылыр ере ауыртҡанда ла, йәки ҡайҙалыр нимәләр ҡамасаулап, игәп, ышҡып килгәндә лә, түҙә. Ә һине яратып етмәгән, һинең тауышыңдан йәки ҡатылығыңдан ҡурҡҡан ат, күнеп йөрөп-йөрөп тә, бер мәл ҡапыл сығынлап китеүе бар.

**▸ Ана шул ат менән кеше бәйләнеше хаҡында төплөрәк әйтеп китәйек әле. Нисек булдырырға был бәйләнеште? Ҡалайыраҡ булырға ат менән: уҫалыраҡмы, йомшағыраҡмы? Әллә башҡа серҙәре бармы?**

- Ат менән эш итеү алдынан иң беренсе уның физиологияһын, биологияһын белергә кәрәк. Мәҫәлән, ат һүҙ мәғәнәһен аңламай, әммә интонацияны бик яҡшы төшөнә. Әммә иң башта, йәғни һүҙ, интонация һәм башҡа төшөнсәләрҙән алда, ат һинең характерыңды тоя. Ул шундуҡ һинең рухи көсөң бармы-юҡмы икәнде самалап ала. Бар икән - баш һала, юҡ икән - ыҙалата ла ыҙалата. Ҡурҡҡанды ла артыҡ яҡынлатып бармаясаҡ. Аттар ҙа ҡатын-ҡыҙ кеүек ул, ҡул көсөнә түгел, ә холоҡ көсөнә күнә.

Ат уның әйткәнен аңлай икән тип уйлағандар уға ҡысҡырып яҡшы хәбәр ҡушалыр ҙа ул, тик малҡайға интонация оҡшамаһа, был өндәшеү генә яҡшы реакция бирмәйәсәк. Интонацияң ярһыу, артыҡ хисле, артыҡ ҡырҡыу булмаһын. Тигеҙ, баҫалҡы, әммә талапсан тауыш менән өндәшеү кәрәк атҡа.

Ат төҫтө артыҡ айырмай, әммә еҫте яҡшы һиҙә. Ҡасандыр үткән юлын ул хәтерләп түгел, ә еҫкәп таный, таба. Кешене лә шул еҫе менән иҫләй. Тәмде бик һәйбәт айыра, бесәне араһына ярамаған үлән һал, ул уны ауыҙына ла алмаясаҡ.

Аттың ҡолаҡтары уға локатор кеүек хеҙмәт итә. Үҙе ятҡан йәки утлап йөрөгәндә лә ҡолаҡтары төрлө яҡҡа боролоп, тауыштынды тотоп ҡына тора.

Аттың тиреһе кешенекенә ҡарағанда күпкә һиҙгерерәк. Ул һалҡында ла, йылыла ла тәнендә бер тигеҙ температура һаҡлай ала. Ҡараһаң, һыйыр бит ҡыштарын ҡалтырап өшөп тора, ә ат өшөмәй, уның организмы "термо" төшөнсәһенә инә ала.

Тағы ла, ул тигеҙ булмаған ерҙәрҙә лә көүҙәһендә тигеҙлек һаҡлап хәрәкәт итә белә. Быны бигерәк тә тау-таш араһында эйәрҙә барғанда тояһың.

Беҙҙең халыҡ борон-борондан атҡа ҡарата мәрхәмәтле булған. Бала саҡта ауылда атҡа һуҡҡан малайҙарҙы ололар үҙҙәре лә эләктереп ебәрер ине. Күп халыҡтарҙа тыңлауһыҙ атты язалау алымдары бар. Бына, сиғандарҙа, мәҫәлән, ат тешләшә икән, уның ауыҙына бешкән эҫе сөгөлдөр йәки картуф тығалар. Ул шуны тешләй ҙә, эҫе аҙыҡ тешенә йәбешеп, бөтә ауыҙ ҡыуышлығын бешерә. Шунан ул тешләшеүҙән биҙрәп ҡала.

Ҡаҙаҡтар тибешкән аттарҙы тар урынға индереп, артына тештәре ыржайып торған махсус ҡулайлама аҫа. Өркәк ат тибә лә, яралана, тибә лә, яралана. Йәки ҡасҡалаҡ аттар аяғына ағас бығауҙар һалалар, тәртә араһына инмәй, баш бирмәгәндәрҙең муйынын ағас ҡамыт менән ҡыҫтырып ҡуялар һәм ул шул ауырлыҡҡа күнеп, башын күтәрмәҫ була. Ишетеүе генә лә йән өшөткөс, шулай бит? Ә беҙҙә бындай язаларҙың береһе лә юҡ һәм кемдеңдер шул рәүешле ат "тәрбиәләгәнен" ишеткәнем дә булманы.

Тағы ла бер нәмә: мин күп кенә егеттәрҙе, малайҙарҙы өйрәттем джигитовкаға, үҙемдең уҡыусыларым да булды. Шуларҙан сығып, бәхәсһеҙ әйтә алам: беҙҙең милләт егеттәре ат менән айырыуса бәйле. Уларҙы атҡа атландырҙыңмы - бер бөтөн була ла ҡуялар. Икенсе милләт уландарын ат менән бәйләнешкә индереү ҡатмарлыраҡ, улар ат ебәргән сигналдарҙы, ат уларҙың тәбиғәтен төшөнә һалып бармай.

**▸ Циркта эшләгән кеше булараҡ, әйтегеҙ әле: аттарҙы өйрәтеүе башҡа хайуандарға, йәнлектәргә ҡарағанда еңелерәк түгелме? Мәҫәлән, филгә йәки арыҫланға ҡарағанда, тимәксемен...**

- Атты иң күндәм хайуан икән тип уйлаһағыҙ - яңылышаһығыҙ. Теләмәһә, уның да ҡурҡынысы арыҫландыҡынан кәм түгел. Шунлыҡтан, өйрәтеүгә лә айырым тоҡомдар ғына алына. Бына, мәҫәлән, беҙҙең башҡорт тоҡомло аттар өйрәтеүгә барымһыҙ. Мин уларҙы өйрәтеп ҡараным, джигитовкаға ла ҡулландым. Әммә улар бик ғорур, сәмсел, текә холоҡлолар. Һығылмалыҡ тигән нәмә бөтөнләй юҡ уларҙа. Тарлыҡты, биклелекте, манеж эсендә хәрәкәт итеүҙе үҙһенмәйҙәр. Һыртына ҡамсы эләктеме, бөтөн биктәрҙе емереп сығып китергә ынтыла башлайҙар. Шунлыҡтан, өйрәтеүгә рус юртаҡтарын алабыҙ. Улар ҡулға эйәләштереүгә лә, дрессировкаға ла барымлылар.

Атты өйрәтеү беҙҙең халыҡта электән дә булған. Бала саҡта колхоз-совхоздарҙа ағайҙар аттарын яратып, уларҙы үҙҙәренә ныҡ эйәләштереп, тегеләре хужалары ҡайҙалыр китһә, уларҙы эҙләп бара торғайны. Йәки атты баш эйергә, тубыҡланып хужаһын ултыртып алырға, һыҙғырғанда сабып килергә һ.б. ғәҙәттәргә өйрәтеүселәр булды. Тик быларға улар бары тик сикһеҙ һөйөү, аттарын ҡәҙерләү аша ғына өлгәште.

**▸ Хаҡлы ялға сығып, аттарҙан айырылғас, ҡыйын булып торманымы? Һеҙ әле лә республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә йәштәрҙе джигитовкаға өйрәтәһегеҙ, шулай бит? Аттар менән башҡарыла торған сығыштарҙың, уйындарҙың халыҡҡа ҡабат ҡайтыуына нисек ҡарайһығыҙ?**

- Заманында һәр республика циркының үҙ милли сығыштары булған булһа, туҡһанынсы йылдарҙағы тарҡалыш ваҡытында улар ҙа юҡҡа сыҡты бит. Әммә яратҡан эштән айырылһ-

✓ "Ылаҡ" уйынына ла, дөрөҫөрәге, ат өҫтөндә хәрәкәт итеү алымдарын өйрәтергә тура килә. Был уйын беҙҙең милләттеке түгел, төрки халыҡтарҙыҡы, әммә беҙҙекеләр уйнамаған уны. Беҙҙең икенсе уйындарыбыҙ бар.

# МАЛ ТҮГЕЛ,

## ғаилә ағзаһы, коллега

ам да, ялда булһам да, халҡыма, йәмғиәткә файҙалы эштәр башҡарырға тырышам. Һуңғы йылдарҙа бына Баймаҡ, Учалы, Ҡырмыҫҡалы райондарында йәштәр менән эшләргә, уларҙы джигитовкаға өйрәтергә тура килде.

Кеше ат өҫтөнә ни тиклем иртәрәк ултыра, шул тиклем яҡшыраҡ. Джигитовкаға өйрәнергә теләүселәрҙең үҫмерҙәр, хатта малайҙар булыуы кәрәк. Сөнки 20 йәштән үткәндәрҙә инде ҡурҡыу, һаҡланыу тойғолары яҡшы үҫешкән була. Улар үҙҙәрен йәлләй, имгәнеүҙән ҡурҡа һәм шул сәбәпле имгәнәлә. Малайҙар улар ҡурҡа һалып бармай, шуны аттар ҙа һиҙә һәм шулай бер бөтөн булып, бер-береһен тойомлап, трюктарға тиҙ өйрәнәләр.

Төрлө урындарҙа үҙҙәренең һорауы буйынса "Ылаҡ" уйынына ла, дөрөҫөрәге, ат өҫтөндә хәрәкәт итеү алымдарын өйрәтергә тура килә. Әйтеп үтергә кәрәк, был уйын беҙҙең милләттеке түгел, төрки халыҡтарҙыҡы, әммә беҙҙекеләр уйнамаған уны. Беҙҙең икенсе уйындарыбыҙ бар.

Нимәһе менән оҡшамай миңә был уйын? Бигерәк ҡанһыҙ ул! Күрәләтә ат имгәтеү өсөн уйлап сығарылған кеүек. Беҙҙә, ярай, ниндәйҙер тәртип нормаларын күҙәтеп, күргәҙмә өсөн генә сығалар әлегә был уйын майҙанына. Ә ҡырғыҙҙарҙа, ҡаҙаҡтарҙа ылаҡ өсөн талашып, аттарҙы шул ҡәҙәр бер-береһенә бәрелештерәләр, уларҙың күкрәк һөйәктәре имгәнеп бөтә. Туҡтауһыҙ тартҡыланған ауыҙҙары ҡайырыла. Өйкөлөшөп, ҡыҫылышып, бәрелешеп йөрөүҙән яурынбаштары, ҡабырғалары һуғыла, хужаһының туҡтауһыҙ йә ҡыуып, йә ҡайырып һуҡҡылауынан аттың психикаһы ҡаҡшай. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы: был уйын беҙгә тәбиғәте менән сит.

**Джигитовка сығышы менән хәрби хәрәкәттәрҙең бер өлөшө бит, шулаймы?**

- Әлбиттә. Заманында ат өҫтөндәге һәр ир-егет, хатта ҡатын-ҡыҙҙар ҙа белергә тейеш булған был алымдарҙы. Мәҫәлән, уҡтан йәшенеп ат ҡабырғаһына "ятыу", аттың елкәһенә ятыу, аттың аҫтынан атыу, сабып барышлай артҡа боролоп атыу, сабып барған килеш ерҙәге яралыны алыу, һ.б. Советтар Союзы ваҡытында, әле утыҙынсы йылдарҙа уҡ, джигитовка буйынса Союз кимәлендәге ярыштар уҙғарыла торған булған. Уларҙа төрки халыҡтар һәм казактар вәкилдәре ҡатнашҡан. Беренсе булып джигитовканы манежға индереүселәр осетин милләтенән Алимбек Ҡантимеров менән Михаил Туғанов булған. Мине Туғановтың уҡыусыһы Юрий Гриценко өйрәтте.

Джигитовка - ул сәнғәт, тип әйтеп үттем бит инде. Сөнки джигитовкала беҙ уҙышмайбыҙ, еңешмәйбеҙ, ә күрһәтәбеҙ. Ылаҡ, ат сабышы кеүектәр - улар еңеү өсөн ярыш, һуғыш, йән өҙөш - спорт. Джигитовка иһә, ат менән кешенең оҫталығын, таһыллығын, сослоғон күрһәтеү, һоҡландырыу ул. Шуның өсөн дә ул спорт булараҡ һаҡланмаған. Ул элек һәр ир-егет өсөн хас таһыллыҡ, талант иҫәпләнһә, аҙаҡ, беҙҙең көндәрҙә ул цирк артистары номеры ғына булып ҡалды. Мине бер һабантуйҙа "атҡаҙанған тренер" тип иғлан итәләр, мин әйтәм: "Минең тренер булғаным юҡ, мин - артист".







**Ат яратаһығыҙ, ә ат итен аҙыҡ булараҡ ҡулланаһығыҙмы?**

- Әлбиттә, мин бит башҡорт! Унан һуң, дөрөҫ итеп әйтәйек: "ат итен" түгел, ә йылҡы итен. Ат менән йылҡы араһында айырма ҙур. Һәм башҡортта йылҡыны аҙыҡ итеү харам түгел.

**Республикабыҙҙа йылҡы үрсетеү үҫешә бара. Шулай ҙа технологиялар заманында был ыңғай күрһәткестәр бирәсәкме икән, ысынлап та файҙа күрә алырмы икән халыҡ йылҡынан, әллә был ваҡытлыса мода булып ҡына алырмы?**

- Йылҡы үрсетеү артыҡ үҫешкән, тип тә әйтмәҫ инем. Бөгөн йылҡысылыҡ менән фанаттар ғына шөғөлләнә. Уларға ла хөкүмәт тарафынан һиҙелерлек ярҙам юҡ. Бик ҡимməткә төшә йылҡы тотоу, улар бит бөтөн районадарҙа ла тибендә ҡышлай алмай. Әлеге мәлдә "Башҡорт аты" тигән атаманы тергеҙҙек тергеҙеүен, әммә ул аттың үҙенә терелеп китергә шарттар тыуҙырманыҡ. Хөкүмәт ошо тәңгәлде лә уйлаһын ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ат тураһында оҙаҡ, бик оҙаҡ һөйләшеп ултырырға була был ағай менән. Уның һәр һүҙендә был йән эйәһенә ҡарата оло һөйөү һәм ихтирам ята. "Инде хәҙер үҙем һыбай елмәһәм дә, йәштәрҙә ҡыҙыҡһыныу бар икән - өйрәтәсәкмен", - ти ул. Ә йәштәргә Миҙхәт Сәйфулла улы кеүек легендар шәхестән һабаҡтар, аманат алып ҡалыу оло мәртәбә булыр.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ЭЙ, ТУҒАН ТЕЛ!




# ҺУТЛЫ ЛА УЛ,

## наҙлы ла...

**Тыуғандан башҡорт ауылында йәшәп, мәктәптә лә башҡортса уҡыным. Юғары уҡыу йортона уҡырға ингәс, рус телен үҙләштереү ауырыраҡ булды. Мәктәп программаһы буйынса ғына уны камил итеп өйрәнеп тә булмай бит инде. Филология факультетын тамамлап, эшләй башлағас та еңел булманы. Баҡһаң, бөтә нәмә тәжрибә арҡылы килә икән, әле, Аллаға шөкөр, туған телемдә лә, рус телендә лә иркен аралашам.**

Юғары уҡыу йортонда русса уҡыныҡ. Тел барьеры уҡығанда ла, эштә лә бер аҙ ҡамасауланы. Балаларыма еңелерәк булыр, тип, рус класына уҡырға бирҙем. Һөҙөмтәлә, балаларым бөгөн башҡорт телен бөтә һутында һәм һығылмалылығында белеп тә бөтмәй. Шуға, буласаҡ ейәндәрем һәм ейәнсәрҙәрем өсөн борсолам.

Мин үҙем бәләкәйҙән "Эй, туған тел, эй, матур тел" тигән йырҙы нык яраттым. Уны һаман да көйләйем дә йөрөйөм. Был ҡылығымдан хатта ҡыҙым көлә. Бәлки, ана шул йыр аша миндә туған телгә ҡарата һөйөү тойғоһо уянғандыр. Быны мин үҙем дә аңлата алмайым. Әсәйем уҡый-яҙа белмәне, әммә Хоҙай уға тел байлығы биргәйне. Туған тел нескәлектәрен күберәк әсәйем аша һеңдергәнмендер, институтҡа уҡырға ингәс, курсташтарым, әллә нимәсә һөйләшәһең ул, тип, минең телмәргә аптырай торғайны. Һуңғараҡ аңлай башланым: мин әсәйемдең теле менән һөйләйем икән дә. Мәҫәлән, ул башы ауырыуын баҫыр өсөн сәй йәки дарыу эсеп алғас: "Башыма әҙерәк бәймән бирҙе", - ти торғайны. Беҙҙеңсә, еңеллек бирҙе тигәнде аңлата инде. Әсәйемдең бөгөнгө әҙәби башҡорт телендә осрамаған ундай һүҙҙәре бик күп ине.

Туған телгә һөйөү, минеңсә, өндәребеҙҙең йомшаҡлығы, йылылығы аша ла ҡаныбыҙға һеңдерелгәндер. Быны раҫлар өсөн бәләкәй генә миҫал килтермәксемен: башланғыс класта Ленин тураһында йыр өйрәндек:

*"Ленин һөйөклө атабыҙ,*
*Ул һәр саҡ беҙҙең менән.*
*Беҙ уның рәс(е)мен биҙәйбеҙ*
*Гел аҫыл сәскә менән".*

Бына ошо куплетта гел генә йомшаҡ ө-ә-е өндәре ҡабатлана. Улар күңелгә ниндәйҙер йылылыҡ, йомшаҡлыҡ, нәзәкәтлек биреп тора. Белмәйем, бәлки, был минең күңел торошом ғыналыр. Шулай ҙа был башҡорт өндәрендә милләтебеҙҙең аңлатып бирә алмаҫлыҡ бер сифаты йәшеренгән.

Әлеге көндә, шөкөр, башҡорт телендә һөйләшеүселәр арта. Тик шуныһы үкенесле: беҙҙең быуын һәм беҙҙең балаларыбыҙ быуыны менән ҡуша телебеҙ үҙ байлығын, һығылмалылығын юғалта бара. Шулай ҙа әле бик үк һуң түгел - беҙҙең хаталарҙы ейән-ейәнсәрҙәребеҙ төҙәтер, тигән өмөтөм бар.

**Рәшиҙә НАЗАРОВА.**

# ХАТА ТӨҘӘТЕҮ...

## төп эш түгел

**Ни сәбәптәндер, телсе ғалимдар, башҡорт телендә ижад итеүсе яҙыусылар, шағирҙар, башҡа өлкә зыялылары башҡорт теленең бөгөнгө хәле, үҫеш юлдары тураһында мәсьәләне артыҡ ҡуйыртмаҫҡа тырыша.**

Башҡортостанда башҡорт телен дәүләт теле итеп законлаштырыу менән генә бөтөн мәсьәләләр ҙә хәл ителмәгәйне бит. Документтарҙағы, мисәттәрҙәге, төрлө атамаларҙағы орфографик хаталарҙы төҙәтеү менән генә боҙ ҡуҙғалмаясағы көн кеүек асыҡ. Һәр хәлдә, халыҡ теле хаталар тикшерә торған диктант дәфтәре түгел.

Унан һуң, беҙ һаман әҙәби башҡорт теле менән туған тел араһында тигеҙлек билдәһе ҡуйырға батырсылыҡ итмәйбеҙ. Дәүләт теле - ул закон, әҙәби башҡорт теле нормаларына тап килмәгән диалекттар өсөн эталон. Уға яраҡлашырға, шул кимәлгә күтәрелергә кәрәк. Һәр төбәк һаман да үҙ диалектын иң саф башҡорт теле, тип бәхәсләшә икән, тимәк, тел тураһындағы Законға ҡаршы килә. Ниңә, рус теленең диалекттары әҙме ни? Әммә улар әҙәби рус теленең формалашыуына ҡамасауламаған бит...

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ.**

***✓ Сәмле тормош - йәмле тормош. Тормошто уны сәмләнеп китеп, хатта бер аҙ көнләшә биреп тә көтөү зарур. Көнләшә биреп, әммә көнсөлләшеп түгел. Ошолай йәшәүгә ни етә?***



# ҺЫҘЛАНЫУ

хикәйә

Иҙрис НОҒОМАНОВ

Фани йәшәйештең һөйөнөс менән көйөнөстәре, һәр ҡайһыһы үҙ нәүбәтен һис яҙлыҡтырмай, аҡлы-ҡаралы һыҙат булып, ғәжәп теүәллек һаҡлап бер-бер артлы килә икән. Мәңге тынысланa алмаған даръя ише, улар уңлы-һуллы килтерә лә бәрә, килтерә лә бәрә, ә һин, ирекһеҙҙән, ошо даръя ҡосағына ырғытылған килеш, йә ут булып янаһың, йә боҙға әйләнәһең. Ғүмер тигәнеңдең көндәре һирәп бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлана барған һайын, әлеге һыҙаттарҙың донъяуи мәғәнәһе лә, ҡәҙере лә арта бара...

Йәшәй-йәшәй аҡһаҡал дәрәжәһенә ирешкән Сәләх ҡарт әле килеп үҙенсә ошондай асыш яһаны һәм электән ышана йөрөгән хәҡиҡәткә ныҡлап йәнә бер инанып ҡуйҙы. Сиратҡа һөйөнөс килеп баҫҡан. Ул алыҫ түгел, ана, "Шәжәрә байрамы" сүрәтенә кергән дә, елеп килеп, аҡ һыҙат булып башы ауыл осонда күренә, ә йылыһы инде, киләсәккә татлы өмөттәр уятып, күңелдәрҙе ирәйтә.

"Шәжәрә байрамы" әүәлдән биш йыл һайын үтә килгән "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" түгел. Быныһының дәрәжәһе күпкә юғарыраҡ. Был юлайы нәҫел-нәсәбен ихтирам итеп, атайсалын ололаған әллә ҡайҙарҙағы тамырына ҡағылышлы үренделәргә ҡәҙәр йыйылырға тейешле, хәбәре генә булһын. Бер бөйөк башҡорт әйтмәксе, аҡтамырҙың тамыры оҙон, шөкөр. Тап шуның өсөн дә борон-боронғо ғөрөф-ғәҙәт, атабабаларыбыҙ йолаһы һаналған мәртәбәле ҡорға айырым мәғәнә биргән Сәләх ошоғаса булмаған ихласлыҡ үә дәрт менән әҙерләнде. Ниндәйҙер мөғжизә менән ҡапыл ҡалҡып сыҡҡан ихласлыҡ үә дәрттең икенсе сәбәбе лә юҡ түгел: тыуған ауылына бына инде байтаҡ ғүмер килеп күренгәне булмаған баш малайы, тәүге, хәҙер инде мәрхүмә ҡатынынан тыуған өлкән улы - Тәүфиғы ла ҡайтып төшөр, бәлки. Әлбиттә, ҡайтыр. Шулай булырына Сәләхтең шиге юҡ. Үҙен уйламағанда ла, атай хаҡы бар ҙа баһаң! Атай хаҡы, тыуған ер хаҡы. Ошоно ғына аңлайҙыр бит ирмен тигән ир кеше. Аңламаған хәлдә: "Көтөгөҙ, кисекмәҫтән киләбеҙ", - тигән ҡағыҙ остоғо ебәреп тә тормаҫ ине. Тик бер ситят кеше һымаҡ, киләбеҙ, тигән һүҙе нисектер күңелгә ятып етмәне: ҡайтабыҙ, тиһә, бер төрлө йылыраҡ та, яҡыныраҡ та булмаҫ инеме икән?.. Эйе, бәғзе һүҙ менән һүҙ араһында ла айырма бар. Ул һүҙ тәү ҡарашҡа әһәмиәтһеҙ, иғтибарға лайыҡ түгел һымаҡ күренгән хәлдә лә...

Шулай ҙа әлеге өс ауыҙ һүҙҙән торған сәләм болоҡһоп йөрөгән бабайҙы күҙ алдында ҡанатландырҙы ла ебәрҙе. Дарман самалыраҡ, ләкин дәрт итеп кеше ыңғайына ҡуҙғалып ҡалыу кәрәк. Тантананың бындайы унның һымаҡтарға башҡаса йә тәтей, йә юҡ. Ғүмер көҙө әллә ҡайҙа Ҡаф тауы артында түгел, иртәгә кем менән ни булырын берәү ҙә әйтә алмай.

* * *

Кинйәһе Фуатҡа, күрше ауылда төпләнгән ҡыҙына йәүкә һалып, тәблиғ ҡылғандан һуң эшкә сымыры, бөтмөр Сәләх әүәл үҙ йортон йүнәтеп, тәртипкә килтерҙе, унан ҡайҙалыр мәркәз Мәскәү тарафтарында аҙашып йөрөп ятҡан Тәүфиғына тәғәйенләп һалынған, әле бер кем дә йәшәмәгәнлектән өр-яңы килеш тоштош урындан ҡарайып, иҫкерә барған өйҙө тәрбиәләргә тотондо. Тышын йоҡа таҡта менән көпләтеп, сағыу төҫкә буятып ебәрҙе, мүкләнә башлаған шифер ҡыйыҡты ялтырап торған тулҡынлы ҡалайға алмаштырҙы, янтая төшкән ҡойманы, бағаналарҙы рәтләп ҡуйҙы.

Ҡыҫҡаһы, һағындырған улының торлағы тартынмайынса буйтым әҙәм күҙенә күрһәтерлек хәлгә керҙе. Шулай тейеш, Тәүфиғы бит вазифалы ҙур кеше. "Ҡара көнгә" тип әбейенең иҫке ойоғона төйнәп һаҡлаған барлы-юҡлы йыйындыһын һуңғы тиненәсә "расхутлап" бөтһә-бөттө, үҙенекен итте: ике донъяны ла гөлт иттерҙе. Баш һау булһа, аҡса табылыр. Ошондай мәлдә хурлыҡҡа ҡалып, кеше алдында бөлөнөп тороу килешмәҫ. Кемдән кәм ул? Шөкөр, ҡулынан эш килә. Бына ҙур итеп шәжәрә ағасы эшләп, унда туғыҙ быуын нәҫел-ырыуын тәфсирләп яҙып ҡуйһа... Уныһын әлегә йәшереп торор. Шәжәрә - ул нәҫел китабы, сер итеп һаҡлана, һәр кемгә күрһәтеп барылмай. Тик Тәүфиғының, ни сәбәптәндер, һаман да дауамы юҡ, шуға эсе боша...

Ауылын ташлап киткеһе килмәй, ергә ерегеп ятҡан Фуаты, эшем күп, тип һылтау эҙләп торманы, кейәүе лә ситкә тибеп ярҙамынан ҡалдырманы, иншалла, икеһе лә бар хәлдәренсә булышып, иң терәште. Уларҙың үҙҙәренең мәшәҡәттәре баштан ашҡан, шулай ҙа атай-әсәй, ҡайны-ҡәйнә хаҡы беренсе сиратта. Ошо яҙылмаған ҡанунды иҫтәренән сығармай риғәйә ҡылды балалар.

Барлыҡ эштәренең осона сыҡҡан һымаҡ булған Сәләх бабай бер көн, ирәйә биреп, урамға сығып баҫты, бөйөрөнә таянған килеш әүәл үҙенең, унан уландарының, ахырҙа, күрше-күләндең йорттарына алмаш-тилмәш ҡараш ташлап, һынап торҙо. Уныҡы бөтәһененән дә шәп килеп сыҡҡан түгелме? Һай мәрҙәс тә һуң үҙе! Күҙҙәрен ҡыҫа биреп йылмайған Сәләх, оло ҡәнәғәтлек менән тамаҡ ҡырып, сал төшкән мыйығын һыпырып ҡуя: эшләгәс, уны ошолай эшләйҙәр, йәнәһе.

Шулай ҙа Тәүфиҡтың өйө өңөрәйеп, төҫлө күҙлек кейгән һуҡыр ише, буш тәҙрәләре менән ҡарап тора икән. Эсең бошмаҫмы шуға? Һис юғында, ҡорған тартып ҡуйғанда... Ҡорған эсенән бер нисә гөл ултыртып ебәргәс, йорт бөтөнләй икенсе төҫ алды. Матурлыҡ өсөн күп кәрәкме ни?!

Ҡаҡса, йәтеш, әммә нығын кәүҙәле, хәрәкәттәре етеҙ Сәләх ҡарт, күп эшләүҙән һөйәлләнеп бөткән тынғы белмәҫ шыраулы ҡулдарын ҡаушырып, өй алдындағы семәрле эскәмйәгә барып ултырҙы. Иртәгә - йыйын. Бына хәҙер һәүетемсә ҡунаҡ ҡаршыларға ла була. Ҡунағың ғына килһен...

Ошолай хистәргә бирелеүҙән донъянды онотоп, тормош, йәшәйеш матурлығына мөкиббән китеп ғәмһеҙ ултырыу уға, уға ғынамы, йәшәйем, тип ынтылып ятҡан ауыл кешеһенең һәммәһенә лә һирәк эләгә. Тиккәме устары суғыртмаҡланып ярылып бөткән. Ауыл ерендә ҡулдарың тик тора икән, ауыҙың да ял итә тигән һүҙ. Ҡалала ғына ул, әҙер тамаҡ тигәндәй, йә магазинға, йә баҙарға сығып һатып алдың да... Хәйер, һатып алыу өсөн дә нимәлер кәрәк бит әле. Мәҫәлән, аҡса тигәнең. Тимәк, унда ла ҡыл ҡыбырлатмай, ҡырын төшөп ятып булмай. Шулай ҙа ҡала кешеһенең ҡулы сабый усы шикелле йомшаҡ, һөйәлһеҙ.

Ауылда йәшәп тә, эш юҡ, эшһеҙ интегәм, тип зар илағандарҙы Сәлих һис аңлай алмай. Үҙенсә фекерләп, аңларға тырышып ҡарай, барып етмәй ҙә ҡуя аңына. Елкәң ҡалын, беләгең ныҡ, уларына ҡушып теләгең етерлек икән, эш бында һине үҙе эҙләп таба, хатта ҡасып ҡотолормон тимә. Әлеге байрамға әҙерлекте генә ал, күпме мәшәҡәт тыуҙырҙы, күпме көс, хәтһеҙ сығым талап итте. Үҙ йортон үҙе йүнәтеп, шул йортта ҡунаҡ саҡырған кеше генә белә быны. Тырыштар артылып сыға алмаҫтай күренгән тауҙы артылды. Ә шулай ҙа мәшәҡәттәре татлы булды...

* * *

Сәләх ауылдаштары өсөн эске ғорурлыҡ кисереп, уларҙың хеҙмәт емештәренә һоҡланып бөтә алмай. Ана ниндәй ҙур, күркәм итеп һалып ҡуялар хәҙер йорттарҙы! Ундайҙарҙың ихатаһына барып инеүе үҙе бер кинәнес. Ә йорт алдындағы баҡсалары! Өйҙәр береһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡлыраҡ итеп биҙәлгән, һәр береһендә тиерлек йә атмалы, йә сығыр ҡоҙоҡтар. Ҡасан ғына әле улар урынында ергә һеңеүҙән янтайышып бөткән һалам башлы, йә бөтөнләй башһыҙ уҫаҡ өйҙәр тора ине. Үҙҙәре килеп тороп бәләкәс кенә. Әҙме-күпме кешенең ҡыйығы транса менән ябылыуы булды, былары етештәрҙән һаналды. Һалам башлылар уларға ҡарап көнләшер ине. Һай замана! Хәҙерге мал аҙбарҙары уларҙан лутсыраҡ. Ә һыуҙы йәйен-ҡышын әллә ҡайҙа ятҡан шишмәнән ташып эстеләр. Ул мәлдәрҙе иҫкә алып, бөгөнгө йәштәргә һөйләһәң, ышанмайҙар. Ышанмаҫтар ҙа, ышаныу өсөн ундайҙы үҙ күҙҙәре менән күреү кәрәк.

Әле етеш йәшәйем тиһәң, бөтә шарты бар, көллөһө лә тик үҙеңдән тора. Ҡарт үҙе әйтмәксе, етенсе тиҫтәне "ыуаҡлаған" Сәләхтең дә донъяһы бер кемдекенән дә кәм түгел. Күптәрҙекенән артығыраҡтыр ҙа әле. Билләһи, артығыраҡ. Күршеләренеке, ана, ысынлап та, күпкә ҡайтыш күренә һымаҡ... Бабай, ҡулын ҡаш өҫтөнә килтереп, бер һул күршеһенең, бер уң күршеһенең йортона йәнә ҡарап ала. Эйе, башҡаға ҡарағанда күрше нығыраҡ сәмләндерә. Күршенең тауығы ла ҡаҙҙай, ҡатыны ҡыҙҙай... Сәмле тормош - йәмле тормош. Тормошто уны сәмләнеп китеп, хатта бер аҙ көнләшә биреп тә көтөү зарур. Көнләшә биреп, әммә көнсөлләшеп түгел. Ошолай йәшәүгә ни етә? Ниәтең, тырышлығың изге икән, бында бер хилафлыҡ та юҡ. Шулай ҙа, сүп башы ҡайырмай, ниндәйҙер мөғжизә менән осто-осҡа ялғап, хәйерсе көнөндә тиерлек көн итеп ятҡан бәғзе берәүҙәргә ҡарап, Сәләхтең иҫе китә. Намыҫың етеп, нисек шулай йәшәмәк кәрәк? Үҙҙәре, эш юҡ, эш булмағас, аҡса юҡ, тип кемгәлер бәлә һалып лаф ора, үҙҙәре... көн дә кәйеф-сафа ҡора, ә балалары ас-яланғас. Замана пролетарийҙарымы әллә былар? Әллә дәүере шулай, әллә, донъянан артта ҡалып, хәҙерге кешене белеп бөтмәй, аптырарһың. Дөрөҫ, ундайҙар ауылда күп түгел. Ярай әле күп түгел, әммә үҙҙәрен күрһәтеп торалар. Ундайҙарҙың өйҙәре лә бахыр ҡиәфәтендә, башҡаларҙан әллә ҡайҙан айырылып, ауылды йәмһеҙләп тора. Кәрнизе булһа, маңлайы юҡ, уныһы бар икән, ҡыйыҡ һыртына атлама ҡағылмаған, тәҙрә йөҙлөгө ҡуйылмаған. Булғандары ла ғүмерҙә буяу төҫө күрмәгән. Хас та затлы йылҡы араһына килеп ингән ҡойто алаша һымаҡтар. Берәү булһа оялыр ине, ә былар... Иң ҡыҙығы шунда: ошоноң ише эт ялҡауы оҙон елкәләр теләһә ниндәй байрамды ла башҡаларға ҡарағанда нығыраҡ көтөп ала. Ғәжәп түгелме? Ғәжәп. Күрәһең, улар өсөн бер күңел асып ҡалыуы ғына шарт...

* * *

Ауылдың үрге осонда байрамса кейенгән бер төркөм ҡыҙ-ҡырҡын күренде. Ә-ә, һөлгө күтәреп, бәйге бүләге йыя сыҡҡандар икән. Сәләх йәһәт атлап өйөнә инеп китте. Остары суҡлы, урта тошо сәскәләп сигелгән оҙон таҫтамалды ҡолаға бәйләгән Нәкиә ҡортҡа, Фуаттың әсәһе:

\- Бисмилләһир-рахмәнир-рахим. Ил-йорт имен торһон, ҡайғы-хәсрәт урап үтһен, көллөгөҙ ҙә бәхетле, ырыҫлы булығыҙ, тәнәйҙәр. Собханалла машалла, һөймәлекле генә икәнһегеҙ, - тип ихлас күңелдән теләк теләп, ҡыҙҙарҙың арҡаһынан алмаш-тилмәш һөйөп алды. Хужа кеше үҙе айырым ҡәнәғәтлек менән:

\- Байрам мөбәрәк, тормоштар бәрәкәтле, ниәт-маҡсаттарығыҙ изге булһын берүк, амин! - тине, түш кеҫәһенән өр-яңы йөҙ һумлыҡты сығарып, юрый ҡыштырлата биреп, һөлгө бауыны беркетеп ҡуйҙы. - Бына ошоноңа риза булығыҙ.

Ниндәйҙер ҡөҙрәт менән үҙенең йөҙө яҡтырып китте. Хәҙер уның донъяһы бөтөнләй теүәлләнде, бурыстары юҡ. Ә ҡыҙҙар:

\- Ҡорттар осһон кейәнән, Ҡолон тыуһын бейәнән. Игендәре гел уңһын, Күкәй кеүек туҡ булһын. Янсыҡ, күкәй, таҫтамал! Ҡулъяулыҡ, ҡулъяулыҡ! - тип шаян һамаҡлап, ары китте. Араларынан береһе: "Аҡса булһа ла бара! Рәхмәт, олатай! - тип остандап ирәмһене. - Өләсәй, һиңә лә ҙур рәхмәт!"

Тәғәйен көн етеп, ғәҙәттәгенән күпкә иртәрәк уянған ауыл аяҡҡа баҫыуға һәр төрлө машина, атлы ылау, улары араһында йәйәүлеләре лә, ҡайҙа берәм-һәрәм, ҡайҙа икешәрләп-өсәрләп, әкрәбәлек юллап ағыла ла башланы. Улар шул тиклем күп, киләләр ҙә киләләр. Ҡайҙа һыйып бөтәләр тиһең. Ә шулай ҙа һыялар. Килә торалар, шарран асыҡ аратаплы ҡапҡаларға инеп юғала торалар. Берәү ҙә урамда ҡалмай. Башҡортта йола шулай: хужаны ихтирам иткән ҡунаҡ атын урамға ҡуйырға тейеш түгел. Хужа кеше өсөн был намыҫ эше.

**(Дауамы бар).**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

**Өфөлә "Туғанлыҡ" Төрки телле театрҙарҙың VI халыҡ-ара фестивале үҙенең еңеүселәрен билдәләне. Баш ҡалала бер аҙна дауамында хакимлыҡ иткән үҙенсәлекле мәҙәни сара ваҡытында тамашасылар Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Әзербайжан, шулай уҡ Ҡабарҙы-Балҡар, Хакасия, Сыуашстан, Дағстан, Татарстан һәм Башҡортостандың алдынғы театрҙары менән таныша алды.**

# "ТУҒАНЛЫҠ" ФЕСТИВАЛЕНЕҢ...

## бәйге түгел, берҙәмлек рухында үтеүе ҡиммәт




Төрки телле театрҙар өсөн ойошторолған "Туғанлыҡ" фестивале күптән инде республикабыҙҙың матур бер йолаһына әүерелгән. Уның тап Башҡортостан ерендә үтеүендә лә ниндәйҙер мәғәнә табырға булыр ине. "Бөгөнгө сара башҡорт халҡы өсөн айырыуса ҡәҙерле халыҡ йырҙарының береһе - "Урал"ды тыңлауҙан башланды. Беҙҙең Уралыбыҙҙа туғандаш халыҡтар йәшәгән тәбиғәттең һәр өлөшө сағылыш таба - далалар, бейек тауҙар, тәрән уйһыулыҡтар, ҡуйы урмандар, йылғалар. Беҙ ошоноң менән бәхетлебеҙ. Беҙ шулай уҡ һирәк булһа ла һеҙҙең менән аралашыу бәхетенә эйәбеҙ. Беҙҙең фестивалдең беҙгә булғанығыҙ өсөн рәхмәт", - тине БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов та үҙенең фестивалде ябыу тантанаһындағы сығышында. Салауат Тәлғәт улы шулай уҡ киләһе "Туғанлыҡ" фестивале 2019 йылда үтәсәген һәм уның Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыныуға, шағирыбыҙ Мостай Кәримдең тыуыуына, Башҡорт дәүләт академия драма театрының 100 йыллығына арналасағын белдерҙе. "Туғандар менән осрашыу өсөн былар сәбәп түгелме ни? Етенсе фестиваль дә ҡыҙыҡлы булыр һәм, иң мөһиме, төрки телле халыҡтар араһындағы туғандарса мөнәсәбәттәребеҙ тағы ла нығыныр, тип уйлайым", - тине ул.

Театр - ул нескә материя, тере организм. Театр гел генә бер төрлө була алмай, ул үҙгәрергә, үҫергә тейеш. Шуға ла бер фестиваль, ғәҙәттә, икенсеһенә оҡшамай, шуныһы менән был сара ҡыҙыҡлы ла инде. Шулай уҡ быйылғы фестивалдең төп үҙенсәлеген айырып ҡына атап әйтеп булмаҫ ине. Фестиваль программаһында башлыса классика өҫтөнлөк итте. Сит ил авторҙарына мөрәжәғәт итеүҙең театр, актерҙар өсөн ыңғай яҡтары булһа ла, һәр милли театрҙың тағы ла бер нескәлеге бар - ул тамашасыға үҙенең художестволы йүнәлешен, үҫеш кимәлен генә түгел, милли үҙенсәлеген дә күрһәтә. Быға милли әйберҙәр аша ғына өлгәшеп булалыр. Бигерәк тә "Туғанлыҡ" кеүек фестивалдәрҙә тамашасы милли әҫәрҙәр ҡарағыһы, был халыҡтың йәшәйеше, рухи ҡиммәттәре, мәҙәни зауығы тураһында мәғлүмәт алғыһы килә. Мәҫәлән, нуғай театрының (Дағстан) испан авторы әҫәрен уйнауы тамашасы өсөн ҡыҙыҡ булмағандыр, моғайын. Әйткәндәй, "Туғанлыҡ"та академик статустағы театрҙарға ҡарағанда, йәш театрҙар күберәк булды. Шул уҡ нуғай театры ла, фестивалгә Гоголдең "Ревизор"ын тәҡдим итеүсе "Жастар" театры (Ҡаҙағстан) ла шундайҙар иҫәбенән. "Жастар"ҙың дәрт-кеүәттәре ташып торған, һығылмалы, матур тауышлы йәш артистарының мөмкинлектәре был трагифарста бик урынлы ҡулланылған һәм ул күптәргә оҡшаны. Коллектив ансамбль уйыны өсөн тәнҡитселәр коллегияһының махсус призы менән, шулай уҡ фестивалдең "Иң яҡшы музыкаль биҙәлеш" һәм Анна Андреевна роле өсөн Махаббат Мадгулова "Икенсе пландағы иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияларында бүләкләнде.

Тағы ла бер йәш театр - "Учур" дәүләт йәштәр театрының (Ҡырғыҙстан) Сыңғыҙ Айтматовтың "Плаха" әҫәре буйынса "Ҡиәмәт" тип аталған драмаһы ла сағыу күренештәрҙең береһе булды. Кеше һәм тәбиғәт араһындағы мөнәсәбәт "кеше - кеше" трагедияһына килтергән был спектакль формаһы менән үткән быуат театрын хәтерләтһә лә, Айтматов ижадына яңыса ҡарашы, күтәргән проблемаһы, актерҙар эштәре менән айырылып торҙо. Тәбиғәт вәкиле - Аҡ бүрене уйнаған актриса Динара Кыдырмаева "Эпизодик ролдә оҫта башҡарғаны өсөн" номинацияһына лайыҡ булды. Ҡ. Кулиев исемендәге Ҡабарҙы-Балҡар дәүләт драма театрының күп милләтле совет шиғриәте вәкиле, бөйөк шағир Ҡайсын Кулиев тормошона, ижадына арналған "Жизнь-восхождение" спектакле лә, А. Топанов исемендәге Хакас милли драма театрының "Алып Пил Тараан" этно-фэнтези жанрындағы әҫәре шулай уҡ кешелек өсөн мөһим төшөнсәләргә арналды.

Республика театрҙарының конкурстан тыш ҡатнашҡан спектаклдәре - Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Джут" һәм Милли Йәштәр театрының "Калигула"һы тәнҡитселәр тарафынан шулай уҡ ыңғай фекерҙәргә лайыҡ булды. Тәүгеһенең символик театр йүнәлешендә ҡуйылыуы, актерҙарының оҫталығы телгә алынһа, икенсеһенең шундай материалға тотонорға ҡыйыулығы етеүе һөҡландырҙы уларҙы. "Нимә ул власть һәм ошо властың бөтөн әхлаҡи ҡанундарҙы аша атлап үтеүенең һуң нимә буласағын күрһәткәне өсөн ҡыйыу тип атамайым мин уларҙы, театрҙың тамашасыға ҡабул итергә ауыр булған әйбергә тотоноуы ҙур ҡыйыулыҡ. "Калигула" театрға күңел асырға ғына йөрөгән тамашасыға бер ниндәй ҙә ҡәнәғәтлек килтермәйәсәк, унда аҡыл һәм күңел көсәргәнеше кисерәсәк. Әммә бөгөнгө тамашасы бындай көсөргәнештән ҡасырға тырыша", - тине театр тәнҡитсеһе, "Алтын битлек" премияһының эксперт советы ағзаһы Татьяна Тихоновец. Конкурс программаһында ҡатнашмаһа ла, "Калигула" тәнҡитселәр коллегияһы призына лайыҡ тип табылды.

Фестивалдең төп бүләге - "Иң яҡшы спектакль" номинацияһы М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Антигона" драмаһына тапшырылды. Һәр ваҡыт үҙеңдең кешелек дәрәжәңде һаҡлап ҡалырға һәм үҙеңә хыянат итмәскә саҡырған был пьеса бөгөнгө көн күҙлегенән бик әһәмиәтле. Бигерәк тә быуаттар буйына формалашҡан әхлаҡи-рухи ҡиммәттәр шик аҫтына ҡуйылғанда һәр кем үҙе өсөн мөһим тип иҫәпләгән бурыстарынан баш тартмаҫҡа тейеш. Төп ролдәрҙе башҡарыусылар - Олег Ханов (Креон) менән Лилиә Ғәлина (Антигона) фестивалдең "Иң яҡшы ир-ат роле" һәм "Иң яҡшы ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияларында ла билдәләнде. Нығынған фекер буйынса, Креон - тиран, кире герой, ә Антигона - ғазап сигеүсе, әммә Олег Хановтың Креоны кире герой түгел, киреһенсә, уны яҡшыраҡ аңлайһың, геройҙар араһындағы бәхәстәрҙә уның яғына сығаһың. Әммә уларҙың икеһенең бурыстары ике төрлө. Әйткәндәй, "Антигона"ла Һаҡсы ролен башҡарыусы Илдар Сәйетов "Иң яҡшы икенсе пландағы ир-ат роле" номинацияһына лайыҡ тип табылды.

Алтынсы фестиваль төрлө сараларға ла бай булды. Лекциялар, оҫталыҡ дәрестәре, түңәрәк өҫтәл, театр һабантуйынан тыш, ҡунаҡтар Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов менән осрашты. Унда мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова, жюри һәм тәнҡитселәр коллегияһы ағзалары, Өфө театрҙары директорҙары, сарала ҡатнашҡан театрҙар вәкилдәре, фестиваль ҡунаҡтары - танылған актер, Б. Щукин исемендәге театр институты ректоры Евгений Князев, Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзының драма һәм милли театрҙар кабинеттары мөдире Марина Корчак, Ҡабарҙы-Балҡарҙың халыҡ шағиры Ҡайсын Кулиевтың тормош иптәше Элизат Кулиева, Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзы секретары, Республикалар советы рәйесе Борис Манджиев ҡатнашты. "Беҙ берберебеҙгә кәрәкбеҙ, - тине Рөстәм Зәки улы. - Мәҙәниәт - ул тормошобоҙҙоң нигеҙе, мәҙәниәтһеҙ дәүләт алға бара алмай". Республика Башлығы милли театрҙарҙың туған телдәрҙе үҫтереү йәһәтенән булған ролен юғары баһаланы. "Рәсәй халыҡтарының телдәре хәүеф аҫтында. Телдәр өйрәнеү - иркле эш, быны һәр кем үҙе өсөн үҙе хәл итә. Бөгөн балаларға тел өйрәтеүҙең яңы формаларын эҙләргә кәрәк. Милли театрҙарыбыҙ ҙа был эшкә ҡушылыр, тип ышанам".

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Рәсәйҙәге егерме йыл демократия дәүерендә халыҡтарҙың бер-береһенә ҡарата мөнәсәбәте ныҡ үҙгәрҙе. Элек туғандаш булған милләттәрҙең ҡайһыларындыр өҫтөнөрәк ҡуйырға тырышыу ҙа бар, йәштәребеҙ башҡа халыҡтарға, уларҙың мәҙәниәтенә ихтирам менән ҡарай белмәй. Илдә милли характерҙағы проблема барлығы хәүефле сигнал. "Туғанлыҡ" кеүек сараларҙың халыҡтарҙы берләштереүе, хәүефле күренештәргә ҡаршы тороуы, элеккесә, халыҡтар араһында дуҫлыҡ урынлаштырыуы бигерәк әһәмиәтле", - тигәйне фестивалдең тәнҡитселәр коллегияһы рәйесе, "Алтын битлек" премияһы эксперт советы ағзаһы Александр Вислов. Ысынлап та, "Туғанлыҡ" фестивалененең бәйге түгел, ә берҙәмлек рухында үтеүе ҡиммәтерәктер, моғайын. Сөнки һәр милләт, һәр тел, һәр театр үҙенсәлекле һәм ҡабатланмаҫ - быны беҙ гел хәтеребеҙҙә тоторға тейешбеҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## ИНТЕРНЕТТАН



# СӘТЛӘҮЕК...
## асығыуҙы баҫа

■ Ныҡ асығып китһәгеҙ, әстерхан сәтләүегә ашап торроғоҙ, ул баш мейеһенең аппетитты көйләй торған зонаһына тәьҫир итеп, уны әүҙемләштереп ебәрә. Һынауҙарҙа һимеҙлек менән яфаланыусы 10 кеше ҡатнашҡан. Һынауҙар биш көндән торған ике сессияға һуҙылған. Тәүге сессияла ҡатнашыусылар көн һайын смузи эскән, ә смузиға 40 грамм әстерхан сәтләүеге өҫтәлгән. Икенсеһе сиктәрендә шундай уҡ смузи ҡабул иткәндәр, тик был юлы уға сәтләүек ҡушылмаған, әммә ул ризыҡ ҡиммәтлеге буйынса тәүгеһенә торошло булған. Асыҡланыуынса, тәүге сессия осоронда ҡатнашыусылар асығыу тойғоһон аҙыраҡ тойған. Шулай уҡ был мәлдә улар гамбургер, тәм-том кеүек ризыҡҡа тартылмаған.

■ Һәр ата-әсә балаһының мәктәптә яҡшы билдәләргә генә өлгәшеүен теләй. Нью-Йорк университетында үткәрелгән яңы һынауҙар күрһәтеүенсә, мәктәпкә бармаған саҡта уҡ өйҙә уның менән китаптар уҡыу, аңын үҫтереүсе уйындар уйнау, төрлө темаларға һөйләшеү баланың когнетив һәләттәрен камиллаштыра икән. Белгестәр бер төркөм балаларҙы тыуғандан алып 5-се класҡа тиклем күҙәткән. Өй шарттарында бала менән шөғөлләнеү уның телмәрен, башҡа һәләттәрен яҡшы үҫтергән, шуға ла улар яҡшы өлгәшкән дә, тиҫтерҙәре менән аралашыуҙа ла проблемалар тыумаған. Балағыҙҙың мәктәптә уңышлы булыуына тап һеҙ йоғонто яһай алаһығыҙ, ти ғалимдар.

■ Америка ғалимдары еңел генә ябығыу юлын уйлап тапҡан. Хәҙер әллә ниндәй күнегеүҙәр эшләп организмды ыҙалатыуҙа, диеталарҙа ултырыу ҙа кәрәкмәй. Май күҙәнәктәрен эстән генетик яҡтан үҙгәртеп, хатта йоҡлағанда ла ябығып буласаҡ, ти Массачусетс технология институты ғалимдары. Тикшеренеүҙәр лаборатор сысҡандарҙа үткәрелгән. Май күҙәнәктәренең генын үҙгәртеп, ғалимдар метаболизмды тиҙәйтә алған, һөҙөмтәлә артыҡ майҙар үҙенән үҙе янып бөткән. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, сысҡандар ашауҙы сикләмәй генә үҙ ауырлығының яртыһын юғалтҡан. Тән ауырлығына физик әүҙемлектең булыуы йәки булмауы ла йоғонто яһамаған. Сысҡандар көнө-төнө ябыҡҡан, сөнки уларҙың метаболизмы энергия йыйыу режимынан уны таратыуға күскән. Ғалимдар билдәләүенсә, был процесс кешеләрҙә лә шулай уҡ уңыш менән барасаҡ. "HealthDay" мәғлүмәттәре буйынса, әлеге мәлдә донъяла һимереү менән 500 миллиондан ашыу кеше яфалана.

■ Һауа температураһының 10 градусҡа түбәнәйеүе инфаркт ҡорбаны булыу хәүефен 7 процентҡа күтәрә. Кардиологтарҙың яңыраҡ үткән "ESC Congress 2015" сараһында ғалимдар ошо турала хәбәр итте. Белгестәр алты йыл дауамында Канаданың Виннипег ҡалаһында йәшәүсе кешеләрҙә миокард инфаркты ни сәбәптән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Йәйгеһен был ҡалала көндәр ҡоро һәм эҫе тора, ҡышын ныҡ һыуыҡ була. Һалҡын ваҡытта миокард инфаркты йышыраҡ булған. Шуға ла кем йөрәк сирҙәре менән ауырый, һауа температураһы ҡапыл һыуыткан мәлдә үҙ организмына иғтибарлыраҡ булһын, тип кәңәш итә ғалимдар.

## УЙЛЫҒА - УЙ

**"Суицид" термины 17 быуатта ғына барлыҡҡа килһә лә, әҙәм балаларының үҙ-үҙенә ҡул һалыуы бик борондо замандарҙа уҡ билдәле булған. XX быуат башында ла йәшәү рәүештәре тәүтормош дәүерендәгеләй булған байтаҡ ҡына ҡәбиләләрҙе күҙәтеүсе ғалим-антропологтар ҙа шуны раҫлай. Ҡайһы бер ҡәбиләләрҙә кешенең үҙенә ҡул һалыуы уның үҙ ихтыярында, тиген ҡараш өҫтөнлөк алһа, башҡаларында был хәлгә табу һалынып, уны боҙорға ниәт иткәндәргә ҡаты яза бирелгән. Үҙ-үҙеңде үлтереү күренештәре менән оҙата барылған дини ғөрөф һәм культтары булған общиналар ҙа булған.**

# ӘҘӘМ БАЛАҺЫНЫҢ...
## үҙ-үҙен үлтерергә хоҡуғы юҡ!



### Тарихынан

Күрәһең, суицидтың тәү нигеҙендә боронғо йәмғиәттең тәбиғәт көстәре алдында үтә көсһеҙ булыуы яталыр. Байтаҡ ҡына халыҡтарҙа теге йәки был ҡәбиләгә астан ҡырылып бөтөү ҡурҡынысы янағанда иң сибек, сирле һәм олоғайған кешеләр артабан йәшәй алыу хоҡуғын юғалтҡан. Мәҫәлән, эскимостарҙа ҡарттар тундраға сығып китеп, туңып үлгән. Вестготтарҙа "ҡанбабалар ҡаяһы" булып, ҡарттар ошо ҡаянан ташланыр булған. Боронғо Грецияла ил ҡарттары үҙҙәренең үлеме алдынан халыҡ өсөн ҙур байрам ҡорған, уның аҙағында, баштарына венок кейеп, цикута тип аталған көслө ағыу эскән. Японияла аслыҡ йылдарында ҡартайған ата-әсәләр балаларынан үҙҙәрен бейек тау башына алып барып ҡалдырып китеүҙе талап иткән. Ундағы Обясутэяма тауының исеме "әбей ҡалдыра торған тау" тигән мәғәнәгә эйә. Ә меланизий ҡәбиләләрендә үлем язаһына хөкөм ителгән ҡанун (табу) боҙоусылар бейек пальма башынан һикереп, йәиһә ағыу эсеп үлергә тейеш булған. Шулай ҙа заманалар үтеү менән күп халыҡтарҙа суицид уларҙың киләсәге өсөн зыянлы тип иҫәпләнеп, тыйыла башлай. Мәҫәлән, ҡайһы бер Африка ҡәбиләләрендә аҫылынып үлеүсенең туғандарына мәйеткә яҡын килергә лә рөхсәт ителмәгән, ул аҫылынған ағас та, уның өйө лә яндырылған.

Боронғо Грецияла был донъянан үҙ теләге менән китә алыу хоҡуғы тик айырым граждандарға ғына бирелгән. Йәшәүҙән ваз кискәндәр иң элек ареопагҡа мөрәжәғәт итеп, үлергә теләү сәбәптәрен аңлатҡас ҡына, рөхсәт ала алған хәлдә, уларға цикута ағыуы бирелгән. Афинала һәм Фивала үҙ-үҙен рөхсәтһеҙ үлтереүсенең мәйете хурлыҡлы процедураға дусар ителгән: уның ҡулдары киҫеп алынып, дөйөм зыяраттан ситтә ерләнгән. Үлем язаһына хөкөм ителгән кешегә лә үҙенә ҡул һала алыу хоҡуғы бирелгән. Бөйөк философ Сократтың ғүмере тап шулай өҙөлә. Сократ үлемде буйһоноп йәшәүҙән өҫтөн күрһә лә, кешенең үлеме тик аллалар ихтыярында булыуына инанып, "Һин был донъяға үҙ ихтыярың менән килмәнең һәм үҙеңә генә тәғәйен яҙмыштан ваз кисергә хоҡуғың юҡ", тип белдерә.

Юстиандың классик рим хоҡуғы тупланмаһы булған "Дигеста"һында үҙ-үҙенә сәбәпһеҙ үлтереү хоҡуғы инҡар ителә: "Үҙ-үҙен йәлләмәгән кеше башҡаларҙы ла йәлләмәйәсәк", - тиелә унда. Император Тарквиний Триске ваҡытында бындай кешеләрҙең мәйеттәре тәрегә ҡаҙаҡланған йәиһә йыртҡыстарға ташланған. Император Андриан хөкөмдарҙары суицидты енәйәткә тиңләп, үҙ-үҙенә ҡул һалыусының мөлкәтен конфискациялаған, уны ерләүҙе һәм матәм йөрөтөүҙе тыйған. Боронғо Карфагенда ҡатын-ҡыҙҙар үҙ-үҙенә ҡул һалмаһын өсөн бик һөҙөмтәле ысул уйлап табылған: бындай хәл була ҡалһа, ҡатын-ҡыҙҙың шәрә мәйете халыҡ күп йөрөй торған майҙанға сығарып ҡуйылған.

Боронғо йәһүдтәр ҙә һәр бер кешенең ғүмерен илаһтан бирелгән бөйөк ҡиммәт тип танып, суицидты енәйәт ҡылыуға тиңләгән. Бик һирәк осраҡтарҙа ғына үҙен-үҙе үлтереүсенең бик фажиғәле хәлгә тарыуын иҫәпкә алып, уны закон буйынса хурлыҡҡа дусар итеү урынына йәлләү мөмкин тип табылған. Шулай булһа ла, йәһүдтәрҙең беренсе батшаһы Саулдың ҡылысҡа ҡаҙалып үлеүе билдәле.

### Көрәш әүҙем алып барыла

Европала христиан диненең таралыуы рәсми сиркәү тарафынан христиандар араһында суицидты тыйыуға йүнәлтелгән саралар үҙғарыуға нигеҙ була. Христиан догматтарына ярашлы, үлемһеҙ йән һәр саҡта ла бер Аллаһ ҡарамағында ғына булып, үҙ-үҙен үлтереүсе кеше шайтан ҡоткоһона биреләүсе сифатында ҡарала. VI быуатта үҙҙәренә ҡул һалған христиандарҙы күмгәндә сиркәү ритуалдарын үткәреү тыйыла, 693 йылдан башлап улар ғына түгел, суицидтан һуң тере ҡалыусылар ҙа сиркәүҙән ҡыуыла.

Суицидҡа ҡаршы көрәшкә Европа илдәре хакимдары ла бик әүҙем ҡушыла. Англия короле Эдуард XI индергән "Канондар"ҙа үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар бур һәм кеше талаусылар менән тиң ҡарала. Данияла бындай кешеләрҙең мәйетен ишек аша сығарыу тыйыла - уны тәҙрә аша алып сығып, яндыралар. Бындай ритуал кешеләргә үҙен-үҙе үлтереүсенең йәнө мәңгелек тамуҡ утында янасағына ишаралай. Бордо ҡалаһында үҙенә ҡул һалыусының мәйетен майҙанға сығарып, аяҡтарынан аҫып ҡуялар, Аббервилдә сентәгә йөҙтүбән һалып, урам буйлап һөйрәп йөрөтәләр. Йыш ҡына бындай мәйеттең йөрәгенә усаҡ ҡаҙыҡ ҡағып, юл сатына ерләр булғандар: йәнәһе, шулай итмәһәң, уларҙың тынысһыҙ таба алмай йөҙәгән йәндәре тереләргә тынғылыҡ бирмәй, килеп йөрөүе мөмкин. Рәсәйҙә лә, Европалағы кеүек уҡ, суицид яман күренешкә тиңләнә. Петр I тарафынан төҙөлгән хәрби дингеҙ артикулында былай тип яҙылған: "Әгәр кем дә кем үҙ-үҙенә ҡул һала икән, башҡалар күреп, үҙҙәре өҫтөнән шундай законһыҙлыҡ ҡылырға баҙнат итмәһен өсөн, уның мәйетен атҡа бәйләп, урам буйлап һөйрәтеп йөртөп, аяҡтарынан аҫып ҡуйырға".

Дин һәм властың ошондай ҡәтғи талаптары теүәл үтәлә барыуы һөҙөмтәһендә урта быуаттарҙа бөтә илдәрҙә лә суицид осраҡтары бик аҙ була. Заманалар үҙгәреү менән, йәмғиәт, кеше тормошо, уның хоҡуҡтары тураһында яңы ҡараштар барлыҡҡа килеп, элегерәк ҡабул ителгән ҡанундар ҙа ҡаҡшай, улар урынына яңылары индерелә. XVIII - XIX быуаттарҙа йәмғиәттә суицидҡа ҡараштар үҙгәрә барып, үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙың сәбәбе сифатында кешенең психик яҡтан сәләмәт булмауы тураһындағы фекер өҫтөнлөк ала. Тап ошо ваҡытта суицидты енәйәткә тиңләүҙең дөрөҫ булмауы хаҡында ҡараштар нығый, үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы әҙәрлеклеүҙе туктатыу талап ителә башлай. Иң тәүҙә француздар суицидты енәйәткә тиңләүсе закондарын ғәмәлдән сығара. АҠШ-тың Нью-Йорк штатында 1881 йылда ла суицидтан һуң тере ҡалған кешене 20 йылға төрмәгә ябалар. Был өлкәлә иң консерватив илдәрҙең береһе булған Англияла үҙ-үҙен үлтереүгә өлгәшә алмаған кешене хатта үлем язаһына хөкөм итеү ҙә ҡаралған була. Был илдә 1941 йылдан 1955 йылға тиклем суицидта ғәйепләнгән 44 956 кешенең 346-һы ғына ғәйепһеҙ тип табылып, 308-е төрмәгә ябыла, ҡалғандарына шартлы срок бирелә. Англияла суицид 1961 йылдан башлап ҡына енәйәти ғәмәл булыуҙан сығарыла.

### Был хәлдең ҡара таҡтаһы

Бөтә донъя тарафтарынан йыйылған рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, суицид ҡорбандарының дөйөм һаны йылына 1 100 000 кешегә етә. Ошо сәбәп менән 350 мең ҡытай, 110 мең һинд, 55 мең рәсәйле, 31 мең америкалы, 30 мең япон, 12 мең украин, 10 мең француз кешеһенең ғүмере өҙөлә. Рәсми булмаған иҫәпләүҙәр буйынса Ер шарында бер йыл эсендә үҙ ғүмерҙәрен ҡыйыусыларҙың һаны 4 миллион кешегә етеүе мөмкин. 19 000 000 кеше йыл һайын үҙ-үҙенә ҡул һалырға теләп, уны аҙағынаса еткерә алмай. Суицидҡа уҡталып ҡарап, тере ҡалған 4 кешенең береһе генә медицина ярҙамы ала.

Ирҙәр араһында суицидты аҙағына тиклем еткереүселәрҙең һаны ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда уртаса алғанда 4

*✓ Һәр башҡорт кешеһе - үҙ халҡының ғәзиз бер тамсыһылыр, ә тамсыларҙан күл йыйыла. Үҙең теләп, ваҡытынан алда үҙ ҡулдарың менән үҙеңде үлемгә дусар итеүҙе үҙ-үҙеңә, туғандарыңа һәм халҡыңа хыянат, тип тә нарыҡлау хаҡтыр.*



тапҡырға күберәк. 65-85 йәштәгеләр араһында был нисбәт 6-9 тапҡырға күбәйә. Икенсе яҡтан, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда суицидҡа 4 мәртәбә йышыраҡ аҙым яһап ҡарай, әммә үлем осраҡтары барыбер күпкә аҙыраҡ теркәлә.

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) донъя илдәрен суицид күрһәткестәре буйынса өс төркөмгә бүлә.

2007 йыл һөҙөмтәләре буйынса суицид кимәле юғары һәм бик юғары булған илдәр (100 мең кешегә 20-нән артыҡ үлем осрағы): Литва - 42, Белоруссия - 37, Рәсәй - 36, Ҡаҙағстан - 30, Венгрия - 28,5, Латвия - 26, Украина - 25, Япония - 24;

Суицид кимәле уртаса булған илдәр (100 мең кешегә - 10-20 осраҡ): Франция - 18, Молдова - 17, Ҡытай - 14, Германия - 13, Канада - 12, Австралия - 11,5, АҠШ - 11:

Суицид күрһәткесе түбән булған илдәр (100 мең кешегә 10-ға тиклем осраҡ): Италия - 7, Англия - 7, Израиль - 6, Греция - 3, Грузия - 2, Әрмәнстан - 2, Әзербайжан - 1.

Суицид осраҡтары бик аҙ булған илдәрҙән Египетты, Гаитиҙы һәм Ямайканы атарға була, бында суицид күрһәткесе нулгә яҡын. Урта Азия республикаларында суицид күрһәткесе шулай уҡ түбән: Таджикистан - 2,6, Үзбәкстан - 5,5, Төркмәнстан - 8,6 Ҡырғыҙстан - 8,9.

Советтар Союзында суицид күрһәткестәре оҙаҡ йылдар буйына йәшереп киленде, был мәғлүмәт 1989 йылда ғына билдәле булды. Батша Рәсәйендә суицид күрһәткесе түбән булһа, революция һәм граждандар һуғышынан һуң үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар ҡырҡа күбәйә. 1937 һәм 1947 йылдарҙа был күрһәткес бик юғары була. 1984 йылда суицид буйынса СССР донъяла Венгриянан ҡала икенсе урында була (100 мең кешегә - 39 осраҡ). Үҙгәртеп ҡороу йылдарында илдә суицид кимәле 23-кә тиклем түбәнәйһә, 90-сы йылдар урталарына ике тапҡырға тиерлек арта.

## Милләт тамырҙарын ҡаҡшата

Һәр тере йән эйәһе кеүек, әҙәм балаһы был донъяға йәшәр өсөн тыуа. Әлбиттә, һәр кемебеҙ яҙмышына яҙғанын күреп, үҙ тормошон үҙе йәйләпкөйләп, йәшәйеш баҫҡыстарын төүгеһенән ахырынаса лайыҡлы рәүештә үтергә тырыша. Кешелектең көн итмеше һис ҡасан да бигүк еңелдәрҙән булмаған, әммә әҙәми зат йәшәйешенән йәм табып, тормошонан фәһем алып, фани донъяның гүзәллегенә һоҡланып туймаған. Бер генә бирелгән ғүмерендә донъялыҡ бурыстарын үтәп ҡалырға ла ашыҡҡан ул.

Мәңгелек үлсәмдәрендә кеше ғүмере тыуым менән үлем араһындағы ҡыҫҡа ғына бер мәл булғас, һәр кем үҙенә бирелгән тәбиғи йәшәү һәләтен мөмкин булғанса һаҡлап ҡына йәшәһә ине лә һуң. Юҡ шул. Күптәр үҙҙәрен ергә китмәҫкә килгәндәй тойоп, ваҡытын юҡҡа-барға, һис бер мәғәнәһе булмаған ғәмәлдәргә сарыф итһә, бәғзе берәүҙәр ғүмерҙәрен һуҡыр бер тингә лә баһаламай. Баһалар ине, әгәр йәшәүенән мәғәнә таба алһа. Теге йәки был сәбәптәр арҡаһында үҙҙәренең ерҙә йәшәүенең мәғәнәһен юғалтҡан әҙәм балалары, фани донъянан тамам төңөлөп, үҙ-үҙенә ҡул һала...

Алтмышынсы йылдар башында булһа кәрәк, минең ғәжәп һәм яҡты булып тойолған донъямды ҡараңғылатҡан, бала күңелемдә тетрәткән бер шомло ваҡиға булды. Йәмле йәй көндәренең береһендә ауыл буйлап барыһын да ныҡ һиҫкәндергән, шик-шөбһәләр уятҡан ҡурҡыныс хәбәр таралды: "Хәснулла аҫылынып үлгән икән, йылға буйындағы әрәмәлеккә муйыл ашарға килгән малайҙар уның ағаста аҫылынып торған үле кәүҙәһенә тап булған, ти". Мин ошоға тиклем дә үлем тип аталған фажиғә менән әҙмекүпме таныш инем. Бер туған Ғәлиәхмәт ағайым 13 кенә йәшендә урманда аҙашып, туңып үлгәс, ғаиләбеҙгә ҡара ҡайғы килгәнен дә бер аҙ иҫләй инем. Әммә ошоға тиклем һап-һау кешенең үҙ ғүмерен үҙе алыуы минең уйыма ла инеп сыҡҡаны булманы. Ошо хәлде аңлай алмай, бер аҙ шаңҡып торғас, инәйемдән һорай ҡуйҙым: "Хәснулла ағай нисек итеп аҫылына алды икән, үлем бик тә ҡурҡыныс нәмә бит". Инәйем уйланыбыраҡ торҙо ла: "Эй, улым, әҙәм балалары күрәһеләрен күрмәйенсә, был донъянан китмәй. Яҙғаны шул булғандыр инде", тип яуапланы.

Йәшәлгән йылдар үренән Хәснулла ағай фажиғәһенең сәбәптәре миңә нығыраҡ аңлашылғандай тойолһа ла, бала-сағалы ябай ауыл кешеһенең шундай аҙымға барыуы әле булһа ла күңелдә өйкәп тора. Һуғыш йылдарында немецтарҙа әсирлектә булып ҡайтҡан Хәснулланың башҡалар алдында кәмһенеү тойғоһо ла көслө булғандыр, эскегә әүәҫ булыуы ла уны һуңғы аҙым яһауға этәргәндер. Ә ул барыбер йәлләү тойғоһо уята. Ҡурайҙа ла уйнай ине, ауыл өйҙәре әлегә тиклем маһир балта оҫтаһының ҡулдары тейгән эҙҙәрҙе һаҡлай...

Нисек кенә булмаһын, фән теленсә әйткәндә, борон суицид күренештәре башҡорттар араһында бик һирәк булып, кеше тик һуңғы сиктә генә ошо аҙымды яһаған. Ҡайһы бер башҡорт легендаларында ғына бәхетһеҙ яҙмыш ҡорбаны булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың һыуға ташланып үлеүе тураһында бәйән ителә. Ғөмүмән, үҙ-үҙеңә ҡул һалыу башҡорттарҙа иң оло гонаһтарҙан һаналып, ундай кешенең мәйетен дә дөйөм зыяратта ерләү тыйылған булған.

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һуңғы йылдарҙа милләттәштәребеҙ араһында халҡыбыҙға хас булмаған яман күренештәр йышая башланы. Төрлө боҙоҡлоҡ һәм әхлаҡһыҙлыҡ ғәмәлдәре айырым кешенең һәм тотош халыҡтың яҙмышына кире йоғонто яһамай ҡалмай. Аныҡ сәбәптәре низә генә булмаһын, башҡорт мөхитендә үҙ-үҙеңә ҡул һалыу кеүек фажиғәләрҙең арта барыуы ла рухи-әхлаҡи халәтебеҙ менән бермә-бер бәйлелер. Сәйәси һәм иҡтисади тотороҡһоҙлоҡ хөкөм һөргән дәүерҙәрҙә йәмғиәттә суицид осраҡтары шулай уҡ артҡандан-арта бара. Әлбиттә, суицид күренеше иң элгәре айырым шәхестең эске психологик проблемалары, көсөргәнешле мөнәсәбәттәре һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килә. Ҡуйған маҡсаттары ғәмәлгә ашмай, тормош пландары емерелгән, эшендә һәм ғаиләһендә шәхси уңышһыҙлыҡтар кисереп, үҙен башҡаларға кәрәкһеҙ тип иҫәпләгән кешенең үҙаңында психопатологик үҙгәрештәр барлыҡҡа килә. Бындай кешенең эске ҡапма-ҡаршылыҡтары көсәйгәндән-көсәйә барып, уның аңында үҙен-үҙе юҡ итеү тураһындағы уй үҙен бимазалаған шәхси көрәштән сығыуҙың берҙән-бер юлы сифатында нығына бара. Әммә суицидаль ынтылыштары булған бар кешеләрҙе лә психологик яҡтан тотороҡһоҙ һәм көсһөҙ характерлы, тип әйтеп булмай. Киреһенсә, улар араһында дәрт-дармандары ташып, көслө ихтыярлы булғандар ҙа юҡ түгел. Бындай шәхестәрҙең йәшәү дәрте бик көслө булған кеүек, депрессияға дусар булған саҡтарында эске кисерештәре бик көсөргәнешле һәм тәрән була. Уларҙа өмөтһөҙлөккә бирелеү ҙә шулай уҡ йышыраҡ күҙәтелә. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, уларҙың суицидҡа барыуында башҡалар алдында үҙҙәренең баһаһын күтәреү маҡсаты ла юҡ түгел. Шулай булһа ла, кемдәндер үҙ-үҙенә ҡул һалыуын уны аңлай алмаған йәки ҡабул итмәгән мөхиткә протест белдереүе итеп тә ҡарарға була.

Ер йөҙөнә килгәндәрҙең береһе лә үҙ яҙмышын алдан белә алмай. Яҙмыш - тормошонда осраған күп ауырлыҡтар аша уҙмыш икәне лә билдәле. Әлбиттә, тормош, йәшәйеш тигән бөйөк уҙышта гел генә алғы рәттә булып, маҡтау һәм хөрмәт ҡаҙана торған урынды даими биләү ҙә мөмкин түгел. Киреһенсә, әҙәм балаһына ҡыйырһытылып, түбәнлектәргә дусар ителеп, ауыр хис-кисерештәр, һыҙланыуҙар аша үтергә лә тура килә. Бындай саҡтарҙа тик бер генә нәмәне - үҙеңдең кеше икәнлегеңде оноторға ярамай. Аҡ донъяға килгәнһең һәм йәшәйһең икән - бында оло мәғәнә бар, һәм ғүмер баҡый ошо фекерҙе тотоп йәшәү зарур. Эш һинең шәхси ҡаҙаныштарыңда, биләгән вазифаңда, матди байлығың булыу-булмауҙа ғына түгел. Һәр башҡорт кешеһе - үҙ халҡының ғәзиз бер тамсыһылыр, ә тамсыларҙан күл йыйыла. Төрлө сәбәптәр арҡаһында үлем тигән нәмә былай ҙа милләт түлен ҡорота, уның киләсәгенә хәүеф тыуҙыра. Тыуғас, үлемдән ҡалыу юҡ, әммә үҙең теләп, ваҡытынан күпкә алда үҙ ҡулдарың менән үҙеңде үлемгә дусар итеүҙе үҙ-үҙеңә, туғандарыңа һәм халҡыңа хыянат, тип тә нарыҡлау хаҡтыр. Аңлаһа ине лә бит ошоно әҙәм балаһы...

Йәнә, бына нимә тураһында әйтеп үтеү кәрәктер. Күп йылдар буйына тәкрарланған атеистик идеология йоғонтоһонда күптәребеҙ ошо матди, фани донъяны ғына белеп, баҡыйлыҡты дини уйҙырма рәүешендә генә ҡабул итә. Үҙ-үҙенә ҡул һалыусы ла, бары тик ошо мөхитте генә ысын тип уйлап, үҙенең үлемен ҡотолоу сараһы сифатында ҡабул итә. Тәнеңде үлтереп кенә йәнеңде ҡотҡарып буламы икән? Билләһи, юҡтыр. Суицидҡа ынтылыусылар ошо хаҡта уйлап ҡараһа ине лә бит. Был турала хатта заман физиктары ла уйлана башланы. Улар Кирлиан эффекты тип аталған тәжрибәләр һөҙөмтәһен тикшереп, ғәжәпкә ҡала: кеше тәненең күҙәнәктәрен бик юғары йышлыҡтағы электромагнит тулҡындарында тотҡанда, улар нур тарата башлай, быны фотоға төшөрөп, теркәп тә була. Кеше үҙ үлеме менән үлһә, ошо нурҙар өс көн дауамында аҡрынлап һүнә бара. Ә бына үҙен-үҙе үлтереүсенең тире күҙәнәктәренән сыҡҡан нурҙар бер ҡабынып, бер һүнеп тора икән. Ошо иҫ китмәле физик күренеште ошо әҙәм йәненең үҙенә урын тапмай үрһәләнеүе, тип ҡабул итергә лә мөмкин бит. Динебеҙҙә үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙы оло гонаһ тип нарыҡлау юҡҡа түгел икән. Ошо факт үҙе генә лә дини ҡанундар нигеҙендә әле беҙгә аныҡ булмаған белем булыуын белдереп, фани донъяла хаҡ мосолмандарса йәшәй алыуыбыҙҙы талап итә.

Шулай итеп, суицид - кешенең айыҡ аҡыл менән ҡылған эше түгел, бында һәр осраҡта ла кешенең психик халәтендә барлыҡҡа килгән тайпылышты, йәиһә фекер сиклелеген табыуы ҡыйын түгел. Тимәк, уны социаль мөхит тыуҙырған яман сирҙәрҙең береһе рәүешендә ҡабул итеп, барса мөмкин булған сараларҙы ҡулланып, иҫкәртә алыу юлдарын табыу фарыз.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Фиҙаҡәрлек

**Фиҙаҡәр эшләү өсөн ике сәбәп бар.** "Эште үҙ ихтыярың менән башҡарһаң, ул кәмһендермәй" ти Альбер Камю. Беренсенән, бөтөн тырышлығыңды һалһаң, ҡыуаныс кисерәһең. Мәктәп йылдарын иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле. Тырышып, бөтөн өйгә эшенде эшләгәндән һуң мәктәпкә барыу үҙе бер ҡыуаныс, барғы килеп тора! Шул мәлдән алып әллә күпме ваҡыт үтһә лә, "өйгә эш" ҡағиҙәһе һаман да ғәмәлдә. Әлбиттә, тырышлыҡ тураһында беҙ һәр саҡ ишетәбеҙ: ата-әсәләрҙән, уҡытыусыларҙан, етәксенән... Әммә беҙ улар өсөн эшләмәйбеҙ бит, тимәк, етәксең өсөн түгел, үҙең өсөн эшләйһең. Икенсенән, йыһан ялҡаулыҡ һәм тәкәбберлек өсөн яза бирә белә. Әгәр эшеңде ялҡауланып ҡына эшләһәң, юлыңда нимәләр арҡыры торасаҡ. Һәр саҡ тулы ҡеүәткә эшләү өсөн махсус һүҙ ҙә уйлап табылған - профессионаллек. Иғтибар иткәнегеҙ бармы, бер таксисҡа ултырып йөрөү - оло ҡыуаныс, ә икенсеһе менән - ыҙа. Икеһенең дә эше бер төрлө. Әммә улар бер-береһенән айырыла, сөнки тормош фәлсәфәләре төрлө. Яҡшы таксистың кәйефе күтәренке, ул үҙенең яҡшы эшләгәнен һәм кешегә уның менән йөрөү күңелле икәнен аңлай. Кеше эшенән ҡәнәғәтлек ала икән, ул тағы ла яҡшыраҡ эшләргә тырыша. Профессионал үҙенең эшенә мөкиббән бирелгән һәм камиллашыуын туҡтатмай. Ундайҙарға "талант" тип әйтеү - уларҙы баһаламау ул, сөнки талант арҡаһында ғына оҙаҡ йылдар беренсе булыу мөмкин түгел.

**Кемгә эшләйһегеҙ?** Һәр саҡ эш хаҡына ҡарағанда күберәк эшләгеҙ һәм бер көн килеп һеҙгә күберәк түләй башларҙар. Донъяла идеаль етәкселәр бик аҙ, ә ялҡау хеҙмәткәрҙәр бик күп. Әгәр эшкә урынлашҡанһың икән, эш хаҡы түләүсенең кәмселеген эҙләмә, ә үҙеңде тулыһынса эшкә бағышла. Ярты-йорто ғына эшләп, етәксеңә ҡарағанда нығыраҡ ыҙа сигәсәкһең, сөнки энтузиазмыңды, кешелек дәрәжәңде һәм тормошоңдоң бер өлөшөн юғалтасаҡһың.

**Әгәр яҡшыраҡ эшем булһа...** Бәғзеләр тормошта "бәхет килтереүсе" һәм "күңелһеҙ" эштәр бар тип иҫәпләй. Ҡыҙыҡлы кеше хатта иң күңелһеҙ эште лә ҡыҙыҡлы итә белә. Был, әлбиттә, эшһеҙ ҡалған банкир 20 йыл автомобилдәр йыуыу салонында эшләргә тейеш, тигәнде аңлатмай. Әммә бер нисә ай машиналар йыуыу бик яҡшы терапевтик һөҙөмтә биреүе мөмкин. Проблема шунда, именлек һәм байлыҡ кешелә ниндәйҙер кимәлдә тәкәбберлек һәм хаяһыҙлыҡ тәрбиәләй. Эштән йәм табыу кәрәкме, юҡмы - үҙегеҙҙән тора. Ҡыҫҡаһы, кемдәләр матур тәьҫир ҡалдырам тип кенә бөтөн көсөңдән тырышырға ярамай. Бары тик эшеңдән ҡәнәғәтлек алыу өсөн бар көсөңдө һалырға кәрәк.

**Карьерамы, булмышмы?** Ғүмер беҙгә бер тапҡыр ғына бирелә һәм уны үҙебеҙ битараф булмаған шөғөлдәргә генә сарыф итергә кәрәк. Бының өсөн ике ҡағиҙәне үтәү зарур:
1. Яратҡан эшең менән эштә түгел, буш ваҡытыңда шөғөлләнергә мөмкин. Әгәр кеше буш ваҡытында ла яратҡан эше менән шөғөлләнергә һәләтле түгел икән, ул күңеленә ятҡан эш табырға ла батырсылыҡ итмәйәсәк.
2. Яратҡан эш менән шөғөлләнеп, аҡса ла эшләргә мөмкин. Миллионлаған кеше эшкә байрамға йөрөгән кеүек йөрөй, бының өсөн уларға хатта аҡса ла түләйҙәр.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**



## 18 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".

09.00, 12.00, 03.00 Новости.

09.10, 04.30 "Контрольная закупка".

09.40 "Женский журнал".

09.50 "Жить здорово!" (12+).

10.55 "Модный приговор".

12.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).

13.55 "Давай поженимся!" (16+).

15.00 Новости (с субтитрами).

16.00 "Мужское/Женское" (16+).

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).

19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).

21.00 "Время".

21.30 "Отчий берег". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (16+).

23.40 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).

00.15 Ночные новости.

00.30 "Тальянка". 1-2-я серии. Мелодраматический сериал (16+).

02.30, 03.05 "Потопить "Бисмарк". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".

06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".

09.00 "Доброе утро, республика!"

09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).

11.00 "Вести".

11.40 "Вести-Башкортостан".

11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).

13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).

14.00 "Вести".

14.40 "Вести-Башкортостан".

14.55 "Тайны следствия". "Золотое дело". Детективный сериал (12+).

17.00 "Вести".

17.40 "Вести-Башкортостан".

18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).

20.00 "Вести".

20.45 "Вести-Башкортостан".

21.00 "Благие намерения". Часть 1. Мелодраматический сериал (12+).

23.15 "Специальный корреспондент" (16+).

01.50 "Василиса". Сериал (12+).

03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ

**Профилактика на канале.**

**14.00 Новости недели.**

**14.45 "Специальный репортаж" (12+).**

**15.00 "Наука 102" (12+).**

**15.30 "Книга сказок".**

**15.45 "Байтус" (6+).**

**16.00 "Гора новостей".**

**16.15 "Перекличка" (6+).**

**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**

**16.45 "Туганлык-2017". Итоги Международного VI фестиваля тюркоязычных театров.**

**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**

**17.45 "Красная кнопка" (16+).**

**18.15 "Бизнес-проба" (12+).**

**18.30 Новости (на башк. яз.).**

**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Северсталь" (Череповец).**

**21.55 Футбол. РФПЛ. ФК "Зенит" (Санкт-Петербург) - ФК "Уфа" (Уфа).**

**00.15 "Ультрафиолет". Худ. фильм (16+).**

**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

**02.30 "Бәхетнамә" (12+).**

## 19 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".

09.00, 12.00, 03.00 Новости.

09.10, 04.25 "Контрольная закупка".

09.40 "Женский журнал".

09.50 "Жить здорово!" (12+).

12.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).

13.55 "Давай поженимся!" (16+).

15.00 Новости (с субтитрами).

16.00 "Мужское/Женское" (16+).

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).

19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).

21.00 "Время".

21.30 "Отчий берег". 11-я и 12-я серии (12+).

23.40 "Вечерний Ургант" (16+).

00.15 Ночные новости.

00.30 "Тальянка". 3-4-я серии. Сериал (16+).

02.30, 03.05 "Скажи, что это не так". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".

06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".

09.00 "Доброе утро, республика!"

09.55 "О самом главном" (12+).

11.00 "Вести".

11.40 "Вести-Башкортостан".

11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).

13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).

14.00 "Вести".

14.40 "Вести-Башкортостан".

14.55 "Тайны следствия". "Переходящее пиво". Детективный сериал (12+).

17.00 "Вести".

17.40 "Вести-Башкортостан".

18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).

20.00 "Вести".

20.45 "Вести-Башкортостан".

21.00 "Благие намерения". Часть 2. Мелодраматический сериал (12+).

23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).

01.50 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).

03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**

**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**

**11.00 "Следопыт" (12+).**

**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**

**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**

**12.00 "Счастливый час".**

**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**

**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**

**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**

**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**

**15.00 "Дорога к храму" (6+).**

**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**

**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**

**16.00 "Гора новостей".**

**16.15 "Семәр" (6+).**

**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**

**17.45 "Дознание" (16+).**

**18.15 "Орнамент" (12+).**

**19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**

**19.15 "Автограф" (12+).**

**19.45 "Сәңгелдәк".**

**20.00 "Телецентр".**

**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**

**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**

**23.00 "Бала-саға" (6+).**

**23.45 "Весело живем" (12+).**

**24.00 "Черный пес". Худ. фильм (16+).**

**По окончании: Новости (на башк. яз.) (16+).**

**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 20 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".

09.00, 12.00, 03.00 Новости.

09.10 "Контрольная закупка".

09.40 "Женский журнал".

09.50 "Жить здорово!" (12+).

10.55 "Модный приговор".

12.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).

13.55 "Давай поженимся!" (16+).

15.00 Новости (с субтитрами).

16.00 "Мужское/Женское" (16+).

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).

19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).

21.00 "Время".

21.30 "Отчий берег". 13-я и 14-я серии (12+).

23.40 "Вечерний Ургант" (16+).

00.15 Ночные новости.

00.30 "Тальянка". 5-6-я серии. Сериал (16+).

02.30, 03.05 "Приятная поездка". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".

06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".

09.00 "Доброе утро, республика!"

09.55 "О самом главном" (12+).

11.00 "Вести".

11.40 "Вести-Башкортостан".

11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).

13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).

14.00 "Вести".

14.40 "Вести-Башкортостан".

14.55 "Тайны следствия". "Последние часы". Детективный сериал (12+).

17.00 "Вести".

17.40 "Вести-Башкортостан".

18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).

20.00 "Вести".

20.45 "Вести-Башкортостан".

21.00 "Благие намерения". Часть 3. Мелодраматический сериал (12+).

23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).

01.50 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).

03.45 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**

**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**

**11.00 "Наука 102" (12+).**

**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**

**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**

**12.00 "Счастливый час".**

**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**

**14.00 "Тәмле" (12+).**

**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**

**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**

**15.00 "У дачи" (12+).**

**15.30 "Городок АЮЯ".**

**15.45 "Ал да гөл".**

**16.00 "Гора новостей".**

**16.15 "Физра" (6+).**

**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**

**17.45 "Оперение 2017: Уфа - Сочи" (6+).**

**19.15 "Үткән ғүмер" (12+).**

**19.45 "Сәңгелдәк".**

**20.00 "Телецентр".**

**20.45 "Полезные новости" (12+).**

**22.00 "Историческая среда" (12+).**

**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**

**23.45 "Весело живем" (12+).**

**24.00 "Над законом". Худ. фильм (16+).**

**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 21 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".

09.00, 12.00, 03.00 Новости.

09.10, 04.25 "Контрольная закупка".

09.40 "Женский журнал".

09.50 "Жить здорово!" (12+).

10.55 "Модный приговор".

12.15, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).

13.55 "Давай поженимся!" (16+).

15.00 Новости (с субтитрами).

16.00 "Мужское/Женское" (16+).

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).

19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).

21.00 "Время".

21.30 "Отчий берег". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).

23.40 "Вечерний Ургант" (16+).

00.30 "Тальянка". 7-8-я, заключительная, серии (16+).

00.15 Ночные новости.

02.30, 03.05 "Гром и молния". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".

06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".

09.00 "Доброе утро, республика!"

09.55 "О самом главном" (12+).

11.00 "Вести".

11.40 "Вести-Башкортостан".

11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).

13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+)

14.00 "Вести".

14.40 "Вести-Башкортостан".

14.55 "Тайны следствия". "Сила звука". Детективный сериал (12+).

17.00 "Вести".

17.40 "Вести-Башкортостан".

18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).

20.00 "Вести".

20.45 "Вести-Башкортостан".

21.00 "Благие намерения". Часть 4. Мелодраматический сериал (12+).

23.15 "Поединок". Программа Владимира Соловьева (12+).

01.15 "Василиса". Мелодраматический сериал (12+).

03.10 "Родители". Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**

**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**

**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**

**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**

**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**

**12.00 "Счастливый час".**

**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**

**14.00 "Бай бакса" (12+).**

**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**

**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**

**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**

**15.15 "Учим башкирский язык".**

**15.30 "Борсаҡ".**

**15.45 "Фанташ" (6+).**

**16.00 "Гора новостей".**

**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**

**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**

**17.45 "Клио" (12+).**

**19.15 "Башҡорттар" (6+).**

**19.45 "Сәңгелдәк".**

**20.00 "Телецентр".**

**20.45 "Полезные новости" (12+).**

**22.00 "Уфимское "Времечко".**

**23.00 "Колесо времени" (12+).**

**24.00 "Осторожно, двери закрываются". Худ. фильм (16+).**

**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 22 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".

09.00, 12.00 Новости.

09.10, 05.00 "Контрольная закупка".

09.40 "Женский журнал".

09.50 "Жить здорово!" (12+).

10.55 "Модный приговор".

12.15, 15.15 "Время покажет" (16+).

13.55 "Давай поженимся!" (16+).

15.00 Новости (с субтитрами).

16.00, 04.05 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).

17.00 "Жди меня".

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).

19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).

21.00 "Время".

21.30 "Голос". Новый сезон (12+).

23.25 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).

00.20 "Брюс Спрингстин" (16+).

01.45 "Большая игра". Триллер (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".

06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".

09.00 "Доброе утро, республика!"

09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).

11.00 "Вести".

11.40 "Вести-Башкортостан".

11.55 "Сваты". Комедийный сериал (12+).

13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).

14.00 "Вести".

14.40 "Вести-Башкортостан".

14.55 "Тайны следствия". "Маэстро". Детективный сериал (12+).

17.00 "Вести".

17.40 "Вести ПФО".

18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).

20.00 "Вести".

20.45 "Вести-Башкортостан".

21.00 "Юморина". Главный юмористический фестиваль года (12+).

23.20 "Любовь не делится на два". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

03.15 "Родители". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**

**10.00 "Близнецы". Сериал (12+).**

**11.00, 23.30 "Автограф" (12+).**

**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**

**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**

**12.00 Ч.Айтматов. "Белый пароход"**

**14.15 "Весело живем" (12+).**

**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**

**14.45 "Бала-сага" (6+).**

**15.30 "Сулпылар".**

**15.45 "Шәп арба" (6+).**

**16.00 "Гора новостей" (6+).**

**16.15 "Зеркальце" (6+).**

**16.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**

**17.15 "Современник" (12+).**

**17.45 "Специальный репортаж" (12+).**

**18.00 "Йома".**

**18.50 Хоккей. КХЛ. "Металлург МГ" (Магнитогорск) - "Салават Юлаев" (Уфа).**

**22.00 "Наука 102" (12+).**

**23.00 "Песня года" (12+).**

**24.00 "Ас из асов". Худ. фильм (12+).**

**По окончании: Новости (на башк. яз).**

**02.15 А.Папаян. "Оставайтесь солнцем" (12+).**

## 23 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.30, 06.10 "Модный приговор".

06.00 Новости.

06.40 "Жизненные обстоятельства". Худ. фильм (16+).

08.50 "Смешарики. Спорт".

09.00 "Играй, гармонь любимая!"

09.45 "Слово пастыря".

10.00 Новости.

10.15 К юбилею актрисы. "Ольга Остроумова. Когда тебя понимают..." (12+).

11.20, 12.15 "Доживем до понедельника". Мелодрама.

12.00 Новости (с субтитрами).

13.40, 15.10 "А у нас во дворе..." Детективный сериал (12+).

15.00 Новости (с субтитрами).

18.00 Вечерние новости (с субтитрами).

18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым".

19.50, 21.20 "Сегодня вечером" (16+).

21.00 "Время".

23.00 "Короли фанеры" (16+).

23.50 "Типа копы". Комедия (18+).

01.45 "Каприз". Худ. фильм (16+).

03.40 "Черная вдова". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

04.40 "Неотложка-2". Сериал (12+).

06.35 Мультутро. "Маша и Медведь".

07.10 "Живые истории".

08.00 "Вести-Башкортостан".

08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).

09.20 "Сто к одному". Телеигра.

10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.

11.00 "Вести".

11.20 "Вести-Башкортостан".

11.40 "Аншлаг и Компания". Юмористическая программа (16+).

14.00 "Вести".

14.20 "Все вернется". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

18.10 "Субботний вечер".

20.00 "Вести в субботу".

21.00 "Месть как лекарство". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

00.55 "Примета на счастье". Худ. фильм (12+).

03.05 "Марш Турецкого". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**

**07.45, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**

**08.00 "Месть волшебной рыбки" (6+).**

**09.30 "Аль-Фатиха" (6+).**

**10.00 "У дачи" (12+).**

**10.30 "Большой чемодан" (6+).**

**11.15 "Клио" (6+).**

**12.00 "Тәмле" (12+).**

**13.00 "Учу башкирский язык" (6+).**

**13.45 "Орнамент".**

**14.00 "Дарю песню" (12+).**

**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**

**17.00 Творческий вечер народной артистки РБ Шауры Дильмухаметовой (12+).**

**19.00 "Все песни о главном" (12+).**

**19.30 "Замандаш" (6+).**

**19.45 "Сәңгелдәк".**

**20.00 "Колесо времени" (12+).**

**21.00 "Полезные новости" (12+).**

**21.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**

**21.30 Новости.**

**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**

**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**

**23.00 Международный фестиваль искусств-2017 "Этноночь" (12+).**

**00.30 "Дорз". Худ. фильм (16+).**

## 24 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Жизненные обстоятельства". Мелодраматический сериал (16+).

06.00 Новости.

08.10 "Смешарики. ПИН-код". Мультсериал.

08.25 "Часовой" (12+).

08.55 "Здоровье" (16+).

10.00 Новости.

10.15 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым" (12+).

10.35 "Честное слово" с Юрием Николаевым".

11.25 "Фазенда".

12.00 Новости (с субтитрами).

12.15 "Главный котик страны".

13.00 "Теория заговора" (16+).

14.50 К юбилею Иосифа Кобзона. "Есть что любить и что беречь" (12+).

16.00 Юбилейный вечер Иосифа Кобзона.

21.00 "Воскресное "Время".

22.30 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр.

23.40 "Прометей". Фантастика.

02.00 "Исчезающая точка". Приключения (16+).

03.50 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

04.55 "Неотложка-2". Сериал (12+).

06.45 "Сам себе режиссер".

07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.

08.05 "Утренняя почта".

08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".

09.25 "Сто к одному". Телеигра.

10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".

11.00 "Вести".

11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.

14.00 "Вести".

14.20 "Без права на ошибку". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

18.00 "Удивительные люди-2017".

20.00 "Вести недели".

22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).

00.30 "Сорос. Квант разрушения". Худ. фильм.

01.55 "Одиноким предоставляется общежитие". Мелодрама (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**

**07.45 Новости (на башк. яз.).**

**08.00 "Приключения в Изумрудном городе".**

**09.00 "Йома".**

**09.30 "Бай" (12+).**

**10.00 "Физра" (6+).**

**10.15 "Перекличка" (6+).**

**10.45 "Урал-батыр" (6+).**

**11.00 "Сулпылар".**

**11.30 "Гора новостей" (6+).**

**11.45 "Алтын тирма".**

**12.30 Новости недели (на башк.яз.).**

**13.00 "Орнамент".**

**13.15 Футбол. РФПЛ. ФК "Уфа" (Уфа) 0 ФК "Арсенал" (Тула).**

**15.45 "Дарю песню" (12+).**

**16.50 Хоккей. КХЛ. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа).**

**19.30 "Дорога к храму".**

**20.00 "Байыҡ-2017" (12+).**

**21.00 "Дознание" (16+).**

**21.30 Новости недели.**

**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**

**22.30 "Красная кнопка" (16+).**

**23.15 "Вечер.com" (12+).**

**24.00 "Свидание с джазом" представляет..." (12+).**

**01.00 "Сердце ангела". Худ. фильм (18+).**

✓ ***Фильмдың сюжеты нигеҙендә баш ҡалабыҙҙың иң күркәм урындарында төшөрөлгән мөхәббәт тарихы ята. Айҙар Аҡманов яҙған сценарий фильм дауамында тамашасының иғтибарын үҙендә тота.***



*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# ЕТЕ ТЫЛСЫМЛЫ ТЕЛӘК



**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 86-сы ижад миҙгелен "Ете тылсымлы теләк" тигән спектакль-квест менән аса. Пьеса Башҡортостан халыҡтарының телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү буйынса саралар барышында яҙылған.**

Ҡуйыусыһы - рәссам, Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзы Йәштәр советының "Life-theatre" премияһы лауреаты Әнисә Томаншина менән берлектә Альберт Имаметдинов. "86-сы театр миҙгелен асыу тантанаһы ваҡытында балаларҙы ғәҙәттәгесә фойела байрам программаһы көтә. Тамашасылар әкиәт геройҙары менән осраша, улар менән фотоға төшә, шулай уҡ үҙҙәренең теләктәрен яҙып ҡалдыра ала", - тип һөйләнеләр театрҙың матбуғат хеҙмәтендә. 86-сы миҙгелдә театрҙың үҙендә лә, күсмә майҙансыҡтарҙа ла спектаклдәр күрһәтергә ниәтләйҙәр. Байрамдарға һәм әһәмиәтле ваҡиғаларға бағышланған саралар, балалар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн ҡыҙыҡлы конкурстар, акциялар ойоштороу ҡаралған. Уҙған миҙгелдә асылған "Kuku-project" үҙ эшен дауам итә, театрҙың ағымдағы репертуарына иһә өлкәндәр өсөн тағы бер спектакль өҫтәлә.

# ЯҢЫ ЕҢЕҮ



**5-11 сентябрҙә Татарстандың баш ҡалаһында XIII халыҡ-ара мосолман киноһы фестивале үтте. Фестивалдә ҡатнашыусы фильмдарҙы Рәсәйҙең халыҡ артисы, режиссер һәм сценарист Николай Досталь етәкселегендәге жюри баһаланы. "Холод Каландара" (Төркиә - Венгрия) иң яҡшы фильм тип танылды.**

"Ҡыраҕай" исемле башҡорт фильмы фестивалдең призына лайыҡ булды. Фәрзәнә Утарбаеваның ҡыҫҡа метражлы уйын фильмы "Йәш Рәсәй" номинацияһында иң яҡшыһы тип танылды. Был номинацияға һигеҙ кинотаҫма дәғүә итте. Сценарий авторы һәм режиссер Фәрзәнә Утарбаева 25 минутлыҡ дебют фильмын "Башҡортостан" киностудияһы менән берлектә төшөргән. Яңы драма әсә менән улдың үҙ-ара мөнәсәбәттәренә арналған. Фильмдың мәғәнәһе "Әсә күңеле - балала, бала күңеле - далала" тигән башҡорт мәҡәленә ауаздаш. Төп ролдәрҙе Башҡорт дәүләт академия драма театры актерҙары, СССР-ҙың халыҡ артисы Гөлли Мөбәрәкова һәм Артур Кәбиров уйнай.

# БАЛ ТУРАҺЫНДА ФИЛЬМ

**Башҡортостандағы "Шүлгәнташ" ҡурсаулығына республикала һаҡланып ҡалған үҙенсәлекле ҡәсеп - солоҡсолоҡ хаҡында фильм төшөрөү өсөн ARTE француз-немец телеканалының ижади төркөмө килде.**

Был канал бал тураһында төрлө илдәрҙә, шул иҫәптән Рәсәйҙә төшөрөлгән 16 фильм сығарырға йыйына. Фильмда ҡурсаулыҡтағы нәҫелдән килгән умартасыларҙы, атап әйткәндә, солоҡсо Сабит Ғәлинды күрергә мөмкин. Уның нисек йәшәүен, эшләүен һәм ҡыраҕай бал йыйыуын төшөрөргә ниәтләйҙәр. Ҡурсаулыҡ хеҙмәткәрҙәре төбәктә солоҡсолоҡто һаҡлап ҡалыу, Бөрйән бал ҡортоноң үҙенсәлектәре һәм уның ҡушылыу проблемалары хаҡында һөйләйәсәк. Проекттың продюсеры Александра Дальсбек һүҙҙәренсә, фильмды махсус рәүештә Европа тамашасыһына билдәһеҙ булған урында төшөрәләр. "Беҙгә урындағы умартасының күңел торошон аңлау, уның нисек йәшәүен, ни өсөн ошо һөнәр менән шөғөлләнеүен күрһәтеү мөһим", - тип билдәләне ул. ARTE каналы тамашасылары башҡорт балы хаҡында 26 минутлыҡ документаль фильмды 2018 йылдың башында ҡарай ала.

# ҘУР ГАСТРОЛДӘР



**М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры "Ҙур гастролдәр" федераль маҡсатлы программаһы сиктәрендә Нальчик ҡалаһына юлланды. 14-17 сентябрҙә Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһының Дәүләт музыка театры сәхнәһендә Башҡортостандан килгән коллектив балалар һәм өлкәндәр өсөн алты спектакль сәхнәләштерә. Программаны ойоштороусылар - Федераль гастролдәр эшмәкәрлегенә ярҙам итеү үҙәге.**

Йәштәр театрының башҡорт труппаһы М. Кәримдең "Тылсымлы тирмән", М. Багаевтың "Аҡса булһа бер мукса...", Дж. Родариҙың "Чиполлино", С. Айытматовтың "Дингеҙ ярын инләй ала эт...", У. Хубтың "Нух кәмәһе", Ф. Бүләковтың "Карт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа" спектаклдәрен тәҡдим итә. Художество етәксеһе Мәсәлим Күлбаев фекеренсә, гастролдәр репертуарына Төньяҡ Кавказда йәшәүселәр өсөн ҡыҙыҡлы булған сәхнә әҫәрҙәре һайлап алынған.

Был Йәштәр театрының Ҡабарҙы-Балҡар Республикаһына тәүгә барыуы түгел. Һуңғы тапҡыр рус труппаһы - 2012 йылда, башҡорт труппаһы иһә 2013 йылда алмаш гастролдәр менән Нальчикка барып ҡайтҡайны.

# ӨФӨНӘН - АНАПАҒА...

**Анапала "Киношок" фестивале еңеүселәре иғлан ителде. Башҡорт режиссеры Айнур Асҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән" фильмы төп призддарҙың береһенә лайыҡ булды. Тулы метражлы кинола иң яҡшы сценарий өсөн бүләкте "Өфөнән һөйөү менән" фильмы сценарисы Айҙар Аҡманов яуланы.**

Шулай уҡ кино "Ҙур тамашасылар потенциалы" өсөн Ирина Шилова исемендәге киноматбуғат призына ла лайыҡ булды. Фильмдың сюжеты нигеҙендә баш ҡалабыҙҙың иң күркәм урындарында төшөрөлгән мөхәббәт тарихы ята. Айҙар Аҡманов яҙған сценарий фильм дауамында тамашасының иғтибарын үҙендә тота. Фильм авторҙары һүҙҙәренсә, бөтә идеялар режиссер һәм сценарист менән бергәләп уйланылған, тикшерелгән. Фильм Башҡортостан Башлыһы грантына төшөрөлгән.

Әлеге ваҡытта "Өфөнән һөйөү менән" фильмы Рәсәй прокатында бара.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 сентябрь "Театр төнө"** 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**19 сентябрь** XXVIII ижад миҙгелен асыу. "Театр төнө"ндә театрлаштырылған тамаша 6+

**20 сентябрь "Ханума"** (А. Цигарели), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**23 сентябрь "Три поросенка"** (С. Михалков) 0+

**24 сентябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х Андерсен) 0+

**Башлана 12.00, 14.00**

*ХОККЕЙ*

САЛАВАТ ЮЛАЕВ хоккейный клуб

# ТИК ЕҢЕҮҘӘР!

**"Салауат Юлаев" хоккей командаһы ағымдағы миҙгелдең ситтәге тәүге уйынын Мәскәү өлкәһе Подольск ҡалаһының "Витязь" командаһы менән уҙғарҙы. Иҫәпте хужалар асты, шулай ҙа тәнәфескә тиклем ҡунаҡтар таблолағы һанды тигеҙләне. Артабан уйын барышында алға сыҡҡан юлаевсыларҙы "Витязь" ҡыуып етте етеүен, ләкин Өфө хоккейсылары осрашыу аҙағына тиклем үҙ иҫәбенә тағы ике мәрәй яҙыуға өлгәште. Хужаларға 2:4 иҫәбе менән хушһынырға тура килде.**

Ситтә яуланған еңеү уңышы юлаевсыларҙы Өфөлә лә ташламай. 12 сентябрь Риганың "Динамо"һын ҡабул иткән "Салауат Юлаев" ағымдағы еңеүгә өлгәште. Эркка Вестерлунд тәрбиәләнеүселәренең ике шайбаһына ҡаршы ҡунаҡтар тик бер генә тапҡыр яуап бирә алды. Шулай итеп, уйын һөҙөмтәһе, юлаевсылар файҙаһына, 2:1.

2017-2018 уйын миҙгеленең 9 матчын Өфө командаһы Түбәнге Новгородтың "Торпедо"һы менән уҙғарҙы. Таблолағы тәүге һанды ҡунаҡтар "ҡабыҙҙы" һәм оҙаҡ ҡына юлаевсыларға иҫәпте тигеҙләргә мөмкинлек бирмәне. Ике осор буйына ҡунаҡтар ҡапҡаһын аса алмаған хужалар өсөнсө осорҙа, ниһайәт, уйын дилбәгәһен үҙ ҡулына алды. "Салауат Юлаев" хоккейсылары тиҙлекте һәм һөжүм итеүҙе арттырып, уйынсылар сменаһын йыш алыштырып, "Торпедо" ҡапҡаһына бер-бер артлы ике шайба индереү яйын тапты. Сираттағы осрашыу ҙа, "йәшел машина" файҙаһына, 2:1 иҫәбе менән тамамланды.

Алдағы көндәрҙә "Салауат Юлаев" Өфөлә "Спартак" һәм "Северсталь" менән алышасаҡ. Ул осрашыуҙар ҙа яратҡан командабыҙ өсөн уңышлы булыр, тип өмөтләнәйек.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438-1439 һижри йылдар.*

| Сентябрь (Зөлхизә - Мөхәррәм) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (27) дүшәмбе | 5:26 | 6:56 | 13:30 | 17:53 | 19:23 | 20:53 |
| 19 (28) шишәмбе | 5:27 | 6:57 | 13:30 | 17:51 | 19:21 | 20:51 |
| 20 (29) шаршамбы | 5:29 | 6:59 | 13:30 | 17:48 | 19:18 | 20:48 |
| 21 (1) кесе йома | 5:31 | 7:01 | 13:30 | 17:45 | 19:15 | 20:45 |
| 22 (2) йома | 5:33 | 7:03 | 13:30 | 17:43 | 19:13 | 20:43 |
| 23 (3) шәмбе | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 17:40 | 19:10 | 20:40 |
| 24 (4) йәкшәмбе | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 17:38 | 19:08 | 20:38 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

# ЯТЛАУ...

## баш мейеһенә шифа



**Төркиә профессоры Исмаил Хаккы Адын: "Беҙҙең баш мейе күҙәнәктәрен әүҙем хәлгә килтереү өсөн, күп нәмәне яттан өйрәнергә кәрәк", - ти.**

Баш мейеһендә йөҙ миллиардтарса төп мейе күҙәнәге һәм бер нисә триллион ярҙамсы күҙәнәк бар. Бөгөн кеше был күҙәнәктәрҙең 12 процентын ғына ҡуллана. Мейе эшмәкәрлеген ныҡыраҡ файҙаланыу һәр кемдең үҙенән тора. Иң яҡшы, унай юл - яттан өйрәнеү. Уйлап ҡараһаң, юҡҡа ғына бит ата-бабаларыбыҙ Ҡөрьән һүҙҙәрен һәм доғаларҙы ятҡа өйрәнмәгән.

АФАРИН!

# РӘИС ВӘҒИЗОВ ЙЫРЛАЙ!

**Уны тамашасы "Яратам", "Юлдар саҡыра", "Өсөнсө көн тоташ ҡар яуа", "Һинә барам", "Үҙ ягыма ҡайтһам" йырҙары аша яҡшы белә. Үҙенсәлекле моң эйәһе, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Рәис ВӘҒИЗОВ көҙ миҙгелендә 75 йәшлек юбилейын ҡаршылай.**



Рәис Шәйхнур улы бәләкәйҙән йырлай. "Бигерәк тә халыҡ йырҙарын йырларға ярата инем, яңғыҙым ҡалһам - йыр дуҫым, йыраҡ юлға сыҡһам - йыр юлдашым булды. Мәктәпте тамамлағандан һуң Ҡазан консерваторияһына уҡырға индем. Тик унда оҙаҡ белем алырға тура килмәне, Совет Армияһы сафына саҡырҙылар. Ил алдындағы бурысымды үтәгәндә лә йырҙан айырылманым. Патриотик йырҙар башҡарыусылар бәйгеһендә лауреат булдым. Был еңеү мине ҡанатландырып ебәрҙе. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, дәртләнеп, Өфө сәнғәт институтына уҡырға юлландым", - ти ул.

Хеҙмәт юлын Башҡорт дәүләт филармонияһында солист-вокалист булып башлай Рәис Вәғизов. Ул ваҡытта башҡорт профессиональ йыр сәнғәте үсеш дәүерен кисергән була. Күп кенә вокаль-инструменталь ансамблдәр барлыҡҡа килә. Рәис ағайға Айрат Кәримов етәкселегендәге "Ирәндек", Бәхти Ғайсин етәкселегендәге инструменталь ансамблдә эшләү бәхете тейә. Ни өсөн үҙемә ансамбль ойоштороп ҡарамаҫҡа, тигән уй килә шул мәлдә. Ишмулла Дилмөхәмәтов менән ошо йүнәлештә эшләргә булып китәләр. Яңы ғына барлыҡҡа килгән фольклор бригадаһына "Бөгөн байрам, бөгөн туй" тигән исем бирәләр. Был осорҙа Ишмулла Дилмөхәмәтов, Сөләймән Абдуллин, Лена Зарипова, Редик Фәсхетдинов менән бөтөн Рәсәйҙе урап сығалар. Яңы коллективтың төп маҡсаты - башҡорт халыҡ йырҙарын тергеҙеү һәм халыҡҡа еткереү була. Рәис Вәғизов тик башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыуға күсә. "Колой кантон", "Эскадрон", "Ильяс", "Урал", "Азамат", "Ирәндек" кеүек йырҙарҙы тамашасы тап уның башҡарыуында яратып ҡабул итә лә инде. Ошо уҡ мәлдә ул үҙе ижад иткән "Инйәр", "Фаягөләм", "Аҡкоштар нинә моңһоу" кеүек йырҙарын да халыҡҡа таныта.

- Һайлаған һөнәремдән дә, шәхси тормошомдан да ҡәнәғәтмен. Тиҫтәләгән йырҙарымды халыҡ бөгөн дә йырлап йөрөй. Һәр ерҙә көтөп алалар. Артист өсөн тамашасы һөйөүенән дә ҙурарыҡ баһа юҡтыр ул, - тип ҡыуана оло юбилейын ҡаршылағанда Рәис Вәғизов.

Әйткәндәй, тамашасы оҙаҡламай яратҡан артисын тағы ла сәхнәлә күрә аласаҡ. Сентябрь аҙаҡтарында ул ижадташ дуҫтарын - Нәзифә Ҡадырова, Ғәли Алтынбаев, Азат Айытҡолов, Роза Аҡкучукова, Рим Хәсәнов, Рөстәм Маликов, Афарим Аҡсурин һәм башҡа йырсыларҙы бер сәхнәгә йыясаҡ.

**Эльнара ШАФИҠОВА.**

РОБАҒИҘАР

# БЫЛ БӘЙГЕНЕҢ ҺӨҘӨМТӘҺЕ БЕРӘҮ ГЕНӘ:

## Ерҙең өҫтөн тын алмаҫлыҡ саң баҫа

* * *

Планеталар оса, оса йыһанда.
Әйтерһең дә, аттар саба майҙанда.
Беҙ китербеҙ, ҡарап туймай бәйгене.
Оло байрам дауам итер һаман да.

* * *

Әллә яҡшы, әллә яман барған юлым?
Һайларғамы әллә уңын, әллә һулын?
Был донъяла кеше - һуҡыр мосафир.
Әллә Хоҙай, әллә шайтан һуҙа ҡулын?

* * *

Был донъяла көндәребеҙ һанау тигән.
Тыуғандарҙан алып ғүмер - һыҡтау, тигән.
Ожмах күген күрер булһан, түҙ, һыҡтама,
Был ғүмерҙәр - ҡыҫҡа ғына һынау, тигән.

* * *

Ямғыр түгел, ҡар ҙа түгел, таш яуған.
Таштан түгел, уйҙан шаңҡый баш һаман.
Ерҙе утка тотоп торған ракеталар
Нимә ҡылыр, афәт килһә асмандан.

* * *

Эх, бағаһы килә ергә, бағаһы.
Ғүмерҙәрҙең ләкин етә аҙағы.
Ғүмер мәңге булмауында хикмәт барҙыр,
Был донъяның ҡалмаҫ ине ҡыҙығы.

* * *

Бер ир ҡибла тарафына ҡарап баҫа.
Намаҙлығын түшәй, гүйә, ҡанат һуҙа.
Күршеһе лә шул тарафҡа ҡарай, ләкин
Намаҙлығы әүерелгән тәрән һаҙға.

* * *

Ҡөрьән уҡып, ул өйрәнде ғәрәпсә.
Йәшәй, тине, хәҙер Хоҙай йөрәктә.
Ә ул Хоҙай йөрәгенә инде микән,
Туған телен һанамаҫ ҡөҙрәткә?..

* * *

Булған егет, гел мәсеткә йөрөгән,
Доға ҡылған, күҙ алмаған Ҡөрьәндән.
Тик йөрәге уның һис тә сафланмаған.
Хоҙай түгел, шайтан уны өйрәткән.

* * *

Тағы бер көн ҡул болғаны ғүмергә,
Ҡояш һүнде окшап ҡалып күмергә.
Ялҡынланып, йөрәгемдә тағы янды.
Йылы бирҙе микән берәй күңелгә?

* * *

Был тормоштар ҡоролғанмы ярышҡа?
Һәр бер кеше ал бирмәҫкә тырыша.
Был бәйгенән ләкин көтмә ғәҙеллек,
Күп осраҡта алға сыға алаша.

* * *

"Тормош бәйге", - ти ҙә кемдер, сабыша.
Халыҡ, хайран ҡалып, ҡыла тамаша.
Был бәйгенең һөҙөмтәһе берәү генә:
Ерҙең өҫтөн тын алмаҫлыҡ саң баҫа.

* * *

Эх, йәшәйһе ине ерҙә көләп кенә,
Киң донъяны иңләп, ҡоштар кеүек кенә,
Ашыҡмайса, белеп кенә тормош тәмен,
Көн үткәнен, гөл үҫкәнен күреп кенә.

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КЕШЕ АҠЫЛЫН...

## белмәйенсә маҡтама

Кеше яманатын һатҡансы, үҙеңдең яҡшы исемеңде тап.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тормош иптәшенең нисек балыҡ ҡармаҡлап ултырыуын бер тапҡыр ҙа күрмәгән ҡатын үҙенең ни тиклем түҙемле кешегә кейәүгә сыҡыуын аңламай әле.

**(Эдгар Хау).**

Һүҙ көрәштереү аҡыллы менән ахмаҡты тиңләштерә һәм ахмаҡтар быны яҡшы белә.

**(Оливер Уенделл Холмс).**

Ваҡ мәсьәләләр беҙҙең иғтибарыбыҙҙы ныҡыраҡ йәлеп итә: филдән ҡасыуға ҡарағанда себендән ҡотолоу ауырыраҡ.

**(Генри Уилер Шоу).**

Һәр хәҡиҡәтте лә ҡысҡырып әйтеп булмай: берәүһен үҙең өсөн әйтмә, икенсеһен икенсе берәү хаҡына өндәшмә.

**(Бальтасар Грасиан).**

Һинең хаталарыңды эҙләгән дошманың ул хаталарҙы йәшерергә тырышҡан дуҫыңдан файҙалыраҡ.

**(Леонардо да Винчи).**

Асыу ҡыҫҡа ваҡытлы аҡылһыҙлыҡ.

**(Гораций).**

Ҡулына балта йә гусли тотҡан кешене тәҙеүсе йә музыкант тип әйтеп буламы? Шуның кеүек, аҡыллы һүҙ һөйләгән кешене лә аҡыллы тип атарға ашыҡма.

**(Эпиктет).**

Бәләгә ҡалғанда иһә ҡурҡыныс ҡарарҙар ҡабул итмәй сараң юҡ.

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Хөсәйен тигән кеше ҡалаға баҙарға алып барған бар тауарын һатып бөтә, шуға ла ул ауылына яҡшы кәйеф менән ҡайтып килә. "Ишәгем ашап алғанса, ял итеп алайым әле", тип уйлай ул һәм бер шишмә янында туҡтай. Аҡсалы тоғон баш аҫтына һала ла, йоҡларға ята. Бәхетһеҙлеккә күрә, шул мәлдә уларҙың ауылында бер юлбаҫар туҡтаған була. Ул Хөсәйендең ҡайҙан ҡайтып килгәнен дә, ял итергә ятҡанын да ағас башында күреп белеп тора. Яуыз аҡрын ғына йоҡлап ятыусы эргәһенә килә, кеҫәһенән ҡурай киҫәге һәм ағыу ала. Ҡурай эсенә ағыу һалып, уны йоҡлап ятыусыға өрөргә һәм уны үлтерергә уйлай. Талаусы үҙ ниәтен тормошҡа ашырырға уйлап, ҡурайға өрөп ебәреүе була, йоҡлаусы Хөсәйен сискереп ебәрә, ә уға өрөлгән ағыу өрөүсенең ауыҙына әләгә һәм уны шунда уҡ үлтерә. Бәйғәмбәр дөрөҫ әйткән: Кеше башҡаларға яуыҙлыҡ ҡыла икән, Хоҙай Тәғәлә уның үҙенә лә яуыҙлыҡ ебәрә".**

1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 15 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4677
Заказ - 1879/09